ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 июнь (һөтай)

2018

№25 (807)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Июнь аҙағына тиклем һеҙ 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индекслы (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм теләгәндәр квитанцияларын редакцияға ебәреп, Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"; Миләүшә Ҡаһарманованың "Күңелем йылы теләй"; Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ"; Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үсемлектәре"; "Башкиры" һәм башҡа матур китаптарға эйә була ала. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Бер ҡапҡаға уйнаумы?**



3

**Ҡиммәттәребеҙҙе…**

заманса алымдарҙа балҡытайыҡ



6

**Ауылым, милләтем, туғандарым -**





ошондай уртаҡ маҡсат тирәһендә ойошайыҡ!

8-9

**Ҡобайырға тереһыу бөркөп…**

"Урал батыр" эпосын башҡарыусы балаларҙың республика конкурсы тарихынан



10-11

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн кеше, башына ниндәй ауырлыҡ төшһә лә, ярар, һуғыш ҡына була күрмәһен, тип үҙен йыуата. Ләкин шулай тип кенә беҙ тормошобоҙҙағы проблемаларға күҙ йоморға тейешбеҙме?

*Хөрмәт МӨХӘМӘТҠОЛОВ, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, Өфө ҡалаһы:* Беҙҙең ил һәм быуындан-быуынға күпте кисерә килгән халҡыбыҙ һуғыштың ни икәнен яҡшы белгәнгә күрә лә ғүмер буйы тыныслыҡ теләй, тыныслыҡҡа табынып йәшәй. Башҡаса телəктең булыуы ла мөмкин түгел һымаҡ, ләкин, һорауҙа ишаралanғанса, гел генә ошондай көсөргәнештә йәшәү ҙә мөмкин түгел: донъяға бер тыуабыҙ. Тимәк, тормоштоң әҙәм балаһына тәғәйен бәхетле, ҡыуаныслы мәлдәрен дә кисереп, үҙ еребеҙҙә тулы хоҡуҡлы хужа булып, икмәк үҫтереп, төҙөп, балалар тәрбиәләп, тыныс һәм ижади хеҙмәт емештәрен татып та йәшәргә хаҡлыбыҙ. Планетабыҙҙа солох урынлаштырып, ил һәм халыҡ-ара тыныс, һыйышып йәшәү мөнәсәбәттәренә нигеҙ һалып, уны нығытып, ил граждандарына лайыҡлы тормош тәьмин итергә тейешле дәүләт етәкселәре, вәкәләтле илселәр, сәйәсмәндәр, йәмәғәтселек бар. Ахыр сиктә, "һуғыш суҡмарҙары" даны алған агрессив көстәрҙе тыйып тороp ҡеүәтле, заманса ҡоралды көстәр бар. Улар үҙҙәре яуаплы булған тәғәйен бурыстарын теүәл үтәп, көнө-төнө тыныслыҡ һағында торорға, фәҡәт шуға хеҙмәт итергә тейештәр, шунын өсөн уларға шарттар булдырылған, шунын өсөн уларға аҡса түләнә. Әлбиттә, тыныслыҡты һаҡлауҙа донъя йәмәғәтселеге: ирекмәндәр, спортсылар, космонавтар, яҙыусылар, артистар, әсәләр, балалар хәрәкәттәре лә ҡеүәтле көс. Совет замандарында барған "һалҡын" һуғыш көсөргәнешен йомшартыуҙа тап уларҙың да йоғонтоһо көслө була торғайны. Үкенескә, хәҙер бындай әүҙемлек һүрелде. Спортсылар һәм артистарыбыҙ, мәҫәлән, баш-тояҡтары менән аҡса эшләүгә, шоу-бизнесҡа сумды, ДНР-ға хеҙмәт итергә киткән Захар Прилепиндан башҡа яҙыусылар ҙа ҡалманы һымаҡ. Икенсенән, өсөнсө бөтә донъя һуғышы ихтималлығы, Ер йөҙөндә үрсеп киткән халыҡ һанын кәметеп алыу ихтыяжы хаҡында фараздар һәм имеш-мимештәр ҙә кешелеккә ауыр тәьҫир итә, әлбиттә. Ләкин айыҡ аҡыл менән уйлап ҡараһаң, һәр ике тараф та буласаҡ конфликттың ике яҡ ҡына түгел, ә тотош планета өсөн дә һуңғыһы һәм үлемесле буласағын яҡшы аңлай торғандыр. Быйылғы "Тура бәйләнеш"тә Владимир Путин был хаҡта ла әйтте: "Өсөнсө донъя һуғышы бөгөнгө цивилизацияның ахыры буласағын аңлау беҙҙе халыҡ-ара аренала сикке һәм ифрат хәүефле ғәмәлдәрҙән тыйып торорға тейеш. Бер-беренде юҡҡа сығарыу ҡурҡынысы державаларҙы һәр ваҡыт киҫкен хәрәкәттәр яһауҙан сикләп, үҙ-ара ихтирамлы мөнәсәбәттәргә мәжбүрләп килә". Бөгөнгө һуғыштарҙың нимәгә килтереү ихтималын күҙаллау өсөн ил башлығы бөйөк физик-теоретик Альберт Эйнштейндың һүҙҙәрен килтерҙе: "Өсөнсө донъя һуғышы ниндәй ысулдар менән алып барылыр - белмәйем, ләкин шуны беләм: дүртенсеһе таяҡтар һәм таштар ярҙамында барыр".

Өсөнсө донъя һуғышы күптән бара инде, тип әйтеүселәр ҙә бар. Улар ана шул локаль бәрелештәрҙең ҙур һәләкәткә әйләнеп китеү ихтималлығын күҙҙә тота. Ләкин цивилизацияның төп билдәһе булып ниндәй генә шарттарҙа ла айыҡ аҡыл ҡалырға тейеш. Беҙ иһә, сәйәсәттә барған туҡтауһыҙ милитаристик пропаганда шауҡымына бирелеп тә китмәйек, тип әйткем килә. Әҙәмсә йәшәргә, тормош проблемаларын еңеп сығырға ынтылайыҡ - кешенең ерҙә йәшәүе күберәк тыныс тормошта өлгәшелгән еңеүҙәр менән билдәләнә түгелме? Һуғыш темаһы, әйткәндәй, ауыр тормош-көнкүреш мәсьәләләренән халыҡ иғтибарын ситкә йәлеп итеү маҡсатында ла ҡуйыртылыуы ихтимал - шуны ла онотмайыҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӘЙҘӘГЕҘ, ҠЫМЫҘ ЭСЕРГӘ - тирмәләр ҡаласығына!

**Әле ҡасан ғына эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр араһында ҡымыҙ һатыусылар, буҙа етештереүселәр, милли кейем тегә башлаусылар барлыҡҡа килеүенә ҡыуана инек. Хәҙер Өфөлә милли ризыҡтар, биҙәүестәр, сувенирҙар бер ерҙә һатылған урын барлыҡҡа килде. И. Якутов паркында "Тирмәләр ҡаласығы" тип аталған үҙенсәлекле проект ошо көндәрҙә эшен башланы. Ошо турала проект авторы Айгөл ИҘЕЛБЕВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

(Дауамы 3-сө биттә).



12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ҺИН ДӘ, МИН ДӘ МУЛЛАМЫ?

***Вельмир АҘНАЕВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, С. Юлаев ордены кавалеры:*** Колхоздар тарҡалғас, ауыл ерҙәрендә кеше эшһеҙ ҡалды, күптәр, бигерәк тә йәштәр күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, эскелеккә һалышты. Элек хөкүмәттең етәкләп йөрөтөп тигәндәй эшкә ҡушыуына күнеккән халыҡ баҙар иҡтисады шарттарына әҙер булмай сыҡты. Бөгөн йәмғиәттәге бөтә актуаль проблемалар ҙа тиерлек илдең иҡтисад өлкәһендәге сәйәсәте менән бәйле. Хатта ғаиләләр тарҡалыуы ла йыш ҡына осраҡта йәштәрҙең донъя көтөргә аҡса еткерә алмауына ҡайтып ҡала. Шул уҡ ваҡытта һәр кемгә күңеленә яткан шөғөл менән булырға, ҡайҙа теләй - шунда эшләргә, үҙ эшен асырға ла мөмкинлектәр бирелгән. Мәҫәлән, Башҡортостан юлдаш каналында Гөлдәр Ишкыуатова алып барған "Бай" тигән тапшырыуы ошо йәһәттән бик тә фәһемле, ундағы геройҙар аҡса эшләүҙең ниндәй генә юлдарын тапмаған! Тырыш егет-ҡыҙҙар үҙ йүнендә үҙең күреп, бар эште яйға һалып алырға мөмкин, тигәнде үҙ өлгөһөндә иҫбатлай. Бер мәл шулай таксист менән һөйләшеп барырға тура килде. Был йәш егет студент булып сыкты, ғаиләле, уҡыуҙан буш ваҡытында өс урында эшләй, шул арҡала машина һатып алған. Бына шундай "елкәле" йәштәр ҙә бар ул, ә бар бер ҡайҙа ла эшләмәй, ата-әсәһенең елкәһендә ятҡан ялҡауҙар ҙа.

Хәҙер күп ерҙәр буш ята, фермер хужалығы төҙөп, ниҙер сәсеп, мал үрсетеп аҡса табырға була. Башҡортостандың Шаран, Туймазы райондарында йәшелсә үҫтереп, хатта Себергә тиклем алып барып һаталар икәнде беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта һыйыр малы тотмай, бәрәңге лә сәсмәй йәшәгәндәр ҙә етерлек. Ауылда көс түкмәйенсә генә байып китеп булмай шул.

Совет осоронда кешеләрҙе нисек эшкә ҡушырға тигән проблема юҡ ине. Ул заманда һәр кем 280 көн эшләргә тейеш булды, эшләмәһә, "Әрәмтамаҡлыҡ тураһындағы закон"ға ярашлы, эшсене йәмәғәт алдында тәнҡитләү, хатта күпмелер хеҙмәт хаҡын тотоп ҡалыу ҡаралғайны. Хәҙер хөкүмәт дилбегәне бушатты, шуға ла етештереү тармаҡтары юҡҡа сыға. Мәҫәлән, ил буйынса миңә билдәле һигеҙ трактор заводы эшләмәй әлеге көндә, ә кәрәкле техниканы территорияны буйынса Башҡортостандан да бәләкәйерәк булған Көньяҡ Кореянан һатып алабыҙ. Һатынып ҡына байып булмай ул, етештереү ҙә кәрәк. Карл Маркс тәғлимәте буйынса, етештереү булғанда ғына байлыҡ барлыҡҡа килә.

Йәштәргә сәләмәт тормош, рух нығлыҡы теләр инем. Тормош көтөүе ауыр, тип бирешеп йәшәмәһендәр. "Барыһы ла үтә, быныһы ла үтер", - тигән һүҙҙәрҙе хәтерҙәрендә тотһондар. Һәр ауыр мәлдә тырышып эшләп, йүнен күреп үткәреп ебәрергә була. Шуға ла ябай эшсе булып эшләргә теләмәй, юғары вазифаларға ынтылып, ғүмер буйы үҙ урынын таба алмай йөрөмәһендәр. "Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала?" тигән мәҡәл бик дөрөҫ был осраҡта.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Бөгөн кеше, башына ниндәй ауырлыҡ төшһә лә, ярар, һуғыш ҡына була күрмәһен, тип үҙен йыуата. Ләкин шулай тип кенә беҙ тормошобоҙҙағы проблемаларға күҙ йоморға тейешбеҙме?

(Башы 1-се биттә).

***Әхмәт ДАЯНОВ, пенсионер, Әбйәлил районы Буранбаол ауылы:*** Һуғыш - ул фажиғә, үлем, ҡайғы-хәсрәт, күҙ йәштәре... Уны ниндәйҙер башҡа ауырлыҡтар, тормош-көнкүреш проблемалары менән бер ҡатар ҡуйыу ҙа урынһыҙҙыр, тием, сөнки, халыҡ әйтмешләй, донъялар тыныс булһа, тере кеше тереклеген итә, мөмкин тиклем етеш, яҡшыраҡ йәшәргә тырыша. Кемдеңдер ниндәйҙер ауырлыҡтарға һәм проблемаларға тарып йәшәүе күп йәһәттән уның үҙенә лә бәйле булып сыға бит йыш ҡына: уҡырға ла, эшләргә лә теләмәй, ялҡаулыҡ көслө һ.б. Ә һуғыш - ул, әйтеүемсә, бөтөн тереклекте емереүсе, тормоштарҙы, яҙмыштарҙы ҡыйратыусы бәлә. Мин һуғыштан һуң - 1946 йыл тыуһам да, ялanaяҡ үҫкән быуын вәкиле. Һуғыш бөтһә лә, уның эҙемтәһе - аслыҡ-яланғаслыҡ, емереклек оҙаҡ йылдарға һыҙылды, беҙ әле лә уның шаңдауынан тетрәнәбеҙ, шуға күрә әсәй-өләсәйҙәребеҙҙең: "Һуғыш ҡына була күрмәһен", - тип доға кеүек ҡабатлаған һүҙҙәрен әле беҙ ҙә ҡабатлап ҡына торабыҙ. Мин үҙем дә армияла хеҙмәт иткән кеше булараҡ, һуғыш хаҡында кинонан ҡарап, китаптарҙан уҡып ҡына түгел, ә башынан аҙағына тиклем шул ғәрәсәт эсендә йөрөп, еңеү яулап, 1945 йылдың августында тәүге эшелон менән (сөнки атайым һуғышҡа армияла тыныс хеҙмәт итеп йөрөгән ерҙән тура китә) Берлиндан ҡайтып төшкән тере шаһит - фронтовик атайымдың һөйләгәндәренән дә беләм. Ундай фажиғәләрҙе башҡаса Хоҙай күрһәтмәһен. Илдә проблемалар күп, әлбиттә. Рәсми статистика буйынса, 22 миллион рәсәйле фәҡирлек сигендә йәшәй. Был фактҡа ла күҙ йомоп булмай. Ил Президенты В. Путинға "Тура бәйләнеш" мәлендә "Ниңә танк, бомба, хәрби самолеттар өсөн аҡса бар, ә кеше өсөн аҡса юҡ?" тигән һорау юҡҡа ғына бирелмәне бит. Ә шулай ҙа мин тәү сиратта илдең оборонаһын нығытыу яҡлы, сөнки илебеҙ ҡеүәтле, көслө булһа, нисек кенә янаһа ла, уға ҡаршы башҡа бер ил дә һуғыш асмаясаҡ.



Һуғыштың ни икәнен беҙ беләбеҙ...

***Кәримә ИСЛАМОВА, хат ташыусы, Белорет районы Үҫмангәле ауылы:*** Мин был мәсьәләгә ҡарата әсә булараҡ, халыҡ уйлағанса фекер йөрөтәм: эйе, фәҡәт һуғыш булмаһын, тибеҙ беҙ. Сөнки илебеҙ тарихының ниндәй генә осорон алһаҡ та, тыныслыҡ хаҡына ныҡышмалы сәйәсәт һәм йәмәғәтселек хәрәкәттәренең тынып торғаны юҡ әле. Тимәк, уға сәбәптәр - реаль янауҙар ҙа бар, тигән һүҙ бит был. Тыныс тигән осорҙарҙа ла афган, чечен һуғыштары аҙ хәсрәт килтерҙеме әсәләргә? Әле булһын Сириянан табуттар ҡайтарылып тора... Бөйөк Ватан һуғышынан күпкә һуң тыуһам да, генерал Шайморатов командалыҡ иткән легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы сафында яу кисеп ҡайтҡан атайым - Нөғөмән Молҡаман улы Таһировтың хәтирәләрен тыңлап үҫтем, шуға ла мин һуғыш тигән был яман һүҙҙең ни тиклем ҡурҡыныс бәләләргә дусар итеүен күҙ алдыма килтерәм һәм ул башҡаса бер ҡасан да ҡабатланмаһын, тип теләйем. Иремдең дә атаһы Фәрхетдин Исламов Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир ине. Улар быуынына ана шундай ауыр һынау төштө. Яралы, сирле булып ҡайтһалар ҙа шул ғәрәсәттән иҫән ҡалыуҙарына шөкөр итеп, ҡыуанып бөтә алмай ине яҡындары. Беҙҙең хаҡҡа - тыуыр балалары хаҡына имен ҡалған улар. Донъялар тыныс торһон, ә һеҙ ана шуның ҡәҙерен белеп, матур итеп йәшәгеҙ, ҡыуанып эшләгеҙ, тип нәсихәт бирә ине атайым гел. Ә бит, ысынлап та, һуғыштан да яманы юҡтыр был донъяла. Сөнки сирҙе - дауалап, фәҡирлекте эшләп еңеп була. Ҡала халҡы нисек хәлен белмәйем, ә бына ауылда елкәһе бар кешегә бына тигән итеп донъя көтөргә була. Ауылда йәшәп тә фәҡирлек кисерә икән кеше - тимәк, был ялҡаулыҡ йә эскелек касафатылыр, моғайын. Зәғиф кенә булмаһа...

Беҙҙең Үҫмангәлелә матур йәшәй халыҡ: өй һайын машина, хатта икешәр; мал аҫрайҙар, сабынлыҡ бар, шөкөр. Унан ҡала ҡош-ҡортон, баҡсанда үҫтергән ниғмәттәр иш янына - ҡуш бит ул. Ауылда йәшәйбеҙ, шул уҡ ваҡытта илдәге хәлдәрҙән, сәйәсәттән бер ҙә алыҫ тормайбыҙ. Мин үҙем һөнәрем буйынса ла бөтә яңылыҡтар менән хәбәрҙар булырға тейешмен, тип уйлайым: ауылдаштарға гәзит-журналдар таратам бит. Үкенескә, гәзит алдырыусылар ғына һирәгәйҙе шул хәҙер... Шуға ла донъя ҡыуып, рухи фәҡирлеккә тарый күрмәйек, тип тә хәүефләнәм берсә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Хөкүмәте дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлауға, үҫтереүгә йүнәлтелгән республика Башлығы гранттарын тапшырыу тәртибен раҫланы. Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы тиҙҙән грант алыуға конкурс иғлан итәсәк. Грантҡа туған телдәрҙе, шулай уҡ Башҡортостандан ситтә башҡорт телен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән мәҙәниәт, мәғариф, фән, киң мәғлүмәт саралары спорт һәм йәштәр сәйәсәте өлкәһендәге проекттар дәғүә итә ала.

✓ Башҡортостан Башлығы ташлама менән ҡулланыусы граждандарҙы ер участкалары менән тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Рөстәм Хәмитов республикала бындай ярҙамды күп балалы һәм инвалид бала тәрбиәләүсе ғаиләләр генә алмауын билдәләне. Ер участкалары менән шулай уҡ торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж булып иҫәптә торған граждандар, алдан йәш ғаилә булараҡ иҫәпкә ҡуйылған бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәре тәьмин ителә.

✓ Юғары технологик медицина ярҙамын финанслау 2011 йылдан алты тапҡырға артты. Ошо хаҡта Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Медицина хеҙмәткәре көнөнә арналған йыйылышта хәбәр итте. "2011 йылдан финанслау алты тапҡыр артты. 23 һаулыҡ һаҡлау учреждениеһында юғары технологик ярҙам күрһәтелә, - тине төбәк етәксеһе. - Һуңғы биш йылда 151 - бөйөр, 16 - йөрәк һәм 14 бауыр күсереп ултыртыу операцияһы яһалған", - тине Рөстәм Зәки улы.

✓ Швейцария һәм Европа башҡорттары һәм татарҙары Һабантуйға йыйылды. Байрам бына инде өсөнсө йыл рәттән Женевалағы Мариньяк паркында үтте. Уны Швейцариялағы "Юлдаш" башҡорттар һәм татарҙар ассоциацияһы ойошторҙо. Һабантуйҙа дөйөм ҡатнашыусылар һаны 500 кешегә етте. Байрам башҡорт һәм татар телдәрендә асылды, артабан рус һәм француз телдәрендә дауам итте. Сәләмләү менән Швейцариялағы Рәсәй вице-консулы сығыш яһаны. 2019 йылда һабантуйҙы Миланда уҙғарыу тураһында килештеләр.

✓ Башҡортостан фехтованиеһының ике тәрбиәләнеүсеһе Европа чемпионатында алтын миҙал яуланы. Тимур Сафин һәм Тимур Арыҫланов Рәсәй йыйылмаһы составында Сербияла почет пьедесталының иң юғары баҫҡысына күтәрелде.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Ялҡынһынған шешек кеүек ҡабара барған пенсия реформаһы мәсьәләһенең, ниһайәт, ярылыр мөҙҙәте етте. Байтаҡтан бирле яфаланы туҡ власть был хәбәр менән халыҡты, ләкин илдәге иҡтисади тоторокһоҙлоҡ, бер туктауһыҙ ҡабатланып торған көрсөктәр, инфляция уны ошоға тиклем тотҡарлап килде, шуға ла, күрәһең, был хаҡта әллә ни һүҙ ҡуйыртылмаһа ла , "әллә була, әллә юҡ" тигәнерәк ҡараш бер аҙ тынысландыра ине кешене.**



"Беҙ пенсияға сығып өлгөрҙөк!"

# БЕР ҠАПҠАҒА УЙНАУМЫ?

Өстәүенә, бынан ике аҙна элек кенә ил Президенты В. Путиндың "Тура бәйләнеш" ваҡытында халыҡ күҙенә тура ҡарап: "Был мәсьәләгә мин бик һаҡ һәм иплә ҡарайым ", - тип, ә 2005 йылда: "Мин президент булған саҡта быға юл ҡуйылмаясаҡ", - тип белдереүен һаман яҡшы хәтерләгән Рәсәй граждандары барыбер ҙә РФ Конституцияһы гаранты булған шәхестең был һүҙҙәрен ысынға алып, бер аҙ тыныслана биргәйне... Әле килеп, аяҙ көндә йәшен һуҡҡан кеүек "хәл ителде" лә ҡуйҙы мәсьәлә: Рәсәйҙә футбол буйынса донъя чемпионаты асылған көндә - 14 июндә Хөкүмәт рәйесе Д. Медведев илдә пенсия реформаһы башланасағы хаҡында иғлан итте һәм ике көндән ошо туралағы закон проектын Дәүләт Думаһы ҡарауына индерҙе. Был закон проекты буйынса илдә ирҙәр хәҙер пенсияға - 65 (элекке йәш сигенән һуң тағы ла - 5 йыл эшләргә!), ҡатын-ҡыҙҙар 63 (элеккегә ҡарағанда 8 йылға оҙағыраҡ!) йәштә сығырға тейеш була. Шул уҡ ваҡытта Дәүләт Думаһы ҡарауына өҫтәмә хаҡҡа һалым (НДС) күләмен әлеге 18-ҙән 20 процентҡа тиклем күтәреү мәсьәләһе лә ҡуйылды. Беренсе вице-премьер - финанс министры А.Силуанов фекеренсә, ошо популяр булмаған саралар ниндәй юл менәндер "иҡтисад үсешен яңы кимәлгә күтәреп, халыҡтың тормош хәлен яҡшыртып ебәрәсәк" икән...

Вице-премьер Татьяна Голикова аңлатмаһы буйынса, пенсия реформаһы илдә эшкә һәләтле халыҡ һанын арттырыу өсөн эшләнә, югиһә, улар иҫәбе йыл һайын 400 меңгә кәмей. Шул уҡ ваҡытта йыл һайын 1,5 млн кеше пенсияға сығыу хоҡуғына эйә була. Голикова вәғәҙәләүенсә, реформа һөҙөмтәһендә киләһе йылдан алып пенсия күләмен 1 меңгә тиклем арттырыу мөмкинлеге тыуа. Тимәк, Президенттың май указдарын үтәү өсөн халыҡ үҙ кеҫәһенән сығарырға тейеш буламы инде? Тимәк, беҙҙә, һәр ваҡыттағыса, батып барыусыны ҡотҡарыу батып барыусының үҙ хәстәре булып ҡала? Урыҫ мәҡәле юҡҡағына шулай әйтелмәгән икән шул... Ә иҡтисадты үҫтереү, эш урындары булдырыу, "күләгәлә" эшләп, конвертта эш хаҡы таратып, һалым түләмәй йәшәренеп килеүсе эш биреүселәр менән кем шөғөлләнер?

Мәкерлектең мәле өсөн һәр саҡ шулай уңай осор һайлана бит ул. Был юлы ла футбол тип донъяһын оноторға әҙер рәсәйҙәр "пилюля"ны һиҙмәй ҙә йотоп ебәрер, тип уйланылармы әллә? Тик был ҡарар иләнмәгән-һүгылмаған әле: халыҡ, уның мәнфәғәтен күҙәткән депутат фракциялары, йәмәғәтселек ни әйтер? Хәйер, алдан уҡ хәл ителгән ҡарарҙан властың кире ҡайтмаясағы көн кеүек асыҡ. Билдәле публицист Александр Невзоров әрнеү ҡатыш ирония менән: "Әгәр рәсәйҙәргә дуст ашарға ҡушһалар, улар сиратҡа баҫасаҡ", - тип юҡҡа әйтмәйҙер. Баҫырҙар ҙа, сөнки беҙҙә халыҡ фекере менән иҫәпләшеп тормаясаҡтарын һәр кем яҡшы үҙләштергән инде. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Рәсәй буйлап таралған ризаһыҙлыҡ тулҡыны көсәйә бара. Дәүләт Думаһы фракциялары ЛДПР, КПРФ, "Ғәҙел Рәсәй", "Яблоко", Санкт-Петербург ҡала депутаттары, профсоюздар ойошмалары, ябай халыҡ вәкилдәре пенсия йәшен арттырыу буйынса яңы реформаға ҡырҡа ҡаршы мөнәсәбәттәрен белдереп сығыш яһай, митинг һәм протест акцияларына әҙерләнә.

Ҡайһы бер эксперттар фекеренсә, был ҡарар халыҡты сираттағы төп башына ултыртыу тип тә ҡарала. Уның механизмын да хисаплап бирәләр хатта. Бөгөн ил буйынса уртаса пенсия күләме айына 13 мең дә 300 һум икән, тимәк, дәүләт ҡатын-ҡыҙҙарҙы 55 йәштән һуң тағы ла 8 йыл эшләтеп, уларға ошо осор эсендә түләнергә тейешле 1 млн 300 мең, ә ирҙәргә 800 мең аҡсаны потенциаль пенсионерҙарға түләмәй, янда ҡалдырасаҡ. Реформа авторҙары шундай "һалам" да ташлап ҡарай халыҡҡа: йәнәһе лә, сит илдәрҙә күптән пенсияға сығыуҙың 65 (ҡатындар) һәм 67 (ирҙәр) йәш схемаһына күсеп бөткәндәр икән. Тик шуны күрергә лә, аңларға ла теләмәй улар: беҙҙәге тормош кимәле сит илдәгенән күпкә ҡайтыш бит!

Ҡайны саҡ юғары властар халыҡ тормошо хаҡында бер ни ҙә белмәй, ялған статистика мәғлүмәттәре буйынса ғына эш итә һымаҡ тойолоп китә. Шулай булмаһа, халыҡ менән иҫәпләшерҙәр, хәлдең, ризаһыҙлыҡтың айышына төшөнөргә тырышырҙар ине. Футбол - яҡшы, әлбиттә, тик бына "бер ҡапҡаға уйнау"ҙы ғәҙел һәм намыҫлы ғәмәл тип әйтеп булмай һис тә...

Әйткәндәй, был мәсьәләгә ҡарата ил Президенты В. Путиндың мөнәсәбәте сер булып ҡала. "Был турала һүҙ алып барырға иртәрәк әле. Әлеге ваҡытта Президент пенсия реформаһын тикшереү һәм фекер алышыуҙарҙа ҡатнашмай, - ти уның матбуғат секретары Д. Песков. - Был реформаның "һүрәтләнешен" тулыһынса күҙ алдына килтермәйенсә тороп, уның буйынса Президентҡа мөрәжәғәт итеү иртәрәк булыр." Шуға күрә пенсия йәшен арттырыу буйынса көн тәртибенә ҡуйылған мәсьәлә, ысынлап та, ниндәй "һүрәтләнеш" аласағын әйтеп булмай, әлегә фәҡәт шуныһы асыҡ: рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда, рәсәйҙәрҙең 92 проценты был яңылыҡҡа ҡаршы. Шаршамбы көн шундай хәбәр ҙә күренеп ҡалды: быйыл йыл аҙағында (йә киләһе йыл башында - әлегә аныҡлыҡ юҡ) В. Путин икенсе тапҡыр Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәт менән сығыуы ихтимал. Бындай ваҡиға, ғәҙәттә, мөһим темалар айҡанлы үткәрелә. Пенсия йәшен арттырыу мәсьәләһенә Президент, бәлки, шунда нөктә ҡуйырға уйлайҙыр?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӘЙҘӘГЕҘ, ҠЫМЫҘ ЭСЕРГӘ -

## тирмәләр ҡаласығына!

**(Башы 1-се биттә).**

**➔ Баш ҡалабыҙҙа әлегә быңдай проект булғаны юҡ ине, уның үҙенсәлеге һәм маҡсаты нимәлә?**

- Эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге милли үҙенсәлектәргә таянып башҡарған башҡорт егет һәм ҡыҙҙарын бер урынға туплаһы был проект. Салауат Юлаев майҙанындағы туҡланыу урындарын күптән күҙәтеп йөрөй инем. Баш ҡаланың үҙәгендә, милли батырыбыҙ һәйкәле янында башҡа милләттәр үҙ ризыҡтарын тәҡдим итә һатып алыусыларға. Йәмәғәтселек тә быға ризаһыҙлығын белдерә, беҙ, эшҡыуарҙар, үҙебеҙ ҙә ошо йүнәлештә проекттар эшләп, конкурстарҙа ҡатнаша килдек. Ни өсөн башҡорттар үҙебеҙ быңдай хеҙмәтләндереү өлкәләрен ҡулға алмайбыҙ, тип уйландым. Быйыл Совет районы хакимиәте ошондай проект тәҡдим иткәс, ҡыуанып тотонорға булдым. Совет районы ярҙамы менән Өфөнөң Якутов паркында "Тирмәләр ҡаласығы" барлыҡҡа килде.

**➔ Тимәк, һатыу нөктәләре тирмәләрҙән тора?**

- Ҡаласыҡ ете тирмәнән тора. Ете тирмә ҡуйыу минең яңғыҙым атҡарып сығырлыҡ эш түгел ине, шуға ла алдан уҡ эшҡыуарҙар табып, команда туплаңыҡ. Әлфиә менән Гөлфиә Хамматовалар, Вадим Йомабаев, Нариман Нигмәтов, Ришат Сабиров, Илдус Йомағужин - улар барыһы ла рухлы, дәртле башҡорт йәштәре һәм эшҡыуарҙары. Был үҙенсәлекле йәрминкәлә буҙа, ҡымыҙ, сәк-сәк, сөсө икмәк, талҡан, шулай уҡ милли бизәүестәр, кейемдәр һатыласаҡ.

Ҡаласыҡ йәй миҙгеле буйына 10.00-22.00 сәғәттәрҙә эшләйәсәк. Был ҡаласыҡ туристар өсөн дә, ошо продукттарҙы һатып алыусылар өсөн дә, эшҡыуарҙар өсөн дә ҡулай. Уның тирмәләр формаһында булыуы паркка ла йәм өҫтәй. Шулай уҡ әгәр ҙә эшҡыуарҙарҙан кемдәрҙер беҙгә ҡушылырға теләһә, уларҙың әҙер тауарын алырға ризамын. Ундайҙар миңә мөрәжәғәт итһендәр.

**➔ Һуңғы осорҙа эшҡыуарҙар араһында башҡорттар һаны күбәйәме?**

- Мин үҙем эшҡыуарлыҡтың сауҙа, реклама өлкәһендә 10 йыл эшләйем. Ул мәлдә башҡорттар һаны аҙ ине. Бөгөн был хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрә. Уларҙы нисектер бер урынға туплау тураһында ла хыяллана инем. Ниһәйәт, яңы йылдан һуң ватсап мессенджерында эшҡыуарҙар өсөн чат астым. Әлегә унда бөтөн республиканан 200-ҙән ашыу эшҡыуар бар. Бер-береһенән ишетеп, өҫтәлә баралар. Был беҙгә аралашыу өсөн майҙансыҡ. Унда яңы эш башлағанда нимәне нисек эшләргә икәнен дә, башҡа һорауҙарҙы ла уртаға һалып һөйләшәбеҙ, бер-беребеҙгә кәңәштәр бирәбеҙ. Тәжрибәле кешенән өйрәнеүе лә ҡулайлыраҡ. Ошонда уҡ үҙ тауарын тәҡдим итеүселәр ҙә бар.

**Ләйсән ДАЯНОВА әңгәмәләште.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Мәскәүҙә, Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллегенең конференциялар залында, милли батырыбыҙ, шағир һәм полководец Салауат Юлаевтың тыуған көнөнә арналған кисә үтте. Байрам Салауат Юлаев тураһында "Оран" фильмын күрһәтеүҙән башланды, шунан һуң йыйылыусылар "Аҡ тирмә" фольклор коллективы йыр теркөмөнөң сағыу музыкаль номерҙарын ҡараны.

✔Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 20 мең самаһы рәсми теркәлгән эшһеҙ иҫәпләнә. Ағымдағы йылдың май айында уртаса пособие күләме 4 078 һум, йәғни эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы дәүмәленән 46,1 процент тәшкил иткән. Төбәктең Хеҙмәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, эшһеҙлек буйынса иң түбән күләмдә пособие алыусылар 33 проценттан ашып киткән, иң ҙурын - 53 процент ала.

✔Бөрйән районының Морат туғайында IV "Тарихи-мәҙәни мираҫты музейлаштырыу: теория һәм практика" халыҡ-ара симпозиумы бара. Сара Шүлгәнташ мәмерйәһендәге боронғо рәсемдәрҙе һаҡлау һәм популярлаштырыуҙың көнүҙәк мәсьәләләренә арналған. Унда Ҡомарткыларҙы һәм иҫтәлекле урындарҙы һаҡлау буйынса халыҡ-ара советтың милли комитеты вице-президенты Ю.И. Аврутова, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Палеосәнғәт үҙәге етәксеһе Г. Дәвлет, Франция Мәҙәниәт һәм коммуникациялар министрлығынан Женевьева Пенсон һәм реставратор Эудалд Гуилламет ҡатнаша.

✔Башҡортостанда IV "Бөйөк дала" асыҡ республика башҡорт рок фестивале ойошторола. Сараны 30 июндән 1 июлгә тиклем Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында уҙғарыу күҙаллана. Ғаризалар 25 июнгә тиклем ҡабул ителә. Адресы: 453800, Башҡортостан Республикаһы, Хәйбулла районы, Салауат Юлаев урамы, 43, район мәҙәниәт йорто. Телефон/факс 8 (34758) 2-15-58, akyar-rdk@mail.ru.

✔Мәктәпте тамамлаусыларға аттестация тапшырыу тантанаһы 9-сы һәм 11-се класты тамамлаусылар өсөн 23-26 июнда үтә. Башҡортостан Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2018 йылда сығарылыш кисәләре 18 меңдән ашыу 11-се һәм 42,6 мең туғыҙынсы класты тамамлаусылар өсөн була.

✔ Быйылғы сарала Рәсәйҙең Гиннесс рекордтары китабына инерлек һандағы халыҡ йыйылып, ҙур Дуҫлыҡ әйлән-бәйләне ойошторолдо. Шуныһы шатландырҙы: башҡорт милли кейемендә килеүселәр күпселекте тәшкил иттек.



БАШ ҠАЛАМ

# МИЛЛИ КЕЙЕМЛЕ...

## дуҫлыҡ байрамы

**Башҡа йылдарҙан айырмалы, көндәрҙең һалҡын булыуына ҡарамаҫтан, баш ҡалала үткән аҙна "ҡыҙыу" булды. Башҡаса мөмкин дә түгел, сөнки "бәхетленең ҡунағы бергә" тигәндәй, барлыҡ оло байрамдар тап ошо ваҡытҡа тура килә: Өфө ҡалғәненә нигеҙ һалынған көн, Рәсәй көнө, милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуған көнө. Иң шәп, сағыу байрам саралары ла шул даталарға тап килтерелеүе лә юҡҡа түгел.**

Милли кейем байрамында, Аллаға шөкөр, икенсе йыл рәттән ҡатнашыу бәхетенә өлгәштем. Быйтыр Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры ҡаршыһындағы майҙандан телеүҙәккә, Салауат һәйкәленә тиклем, оло шатлыҡ кисереп, ҡөҙрәтле бер дуҫлыҡ тулҡынылай, шаулап-гөрләп Зәки Вәлиди урамы буйлап үткәйнек.

Быйылғы сарала Рәсәйҙең Гиннесс рекордтары китабына инерлек һандағы халыҡ йыйылып, ҙур Дуҫлыҡ әйлән-бәйләне ойошторолдо. Барлыһы 1192 кеше, оло ихласлыҡ, алсаҡлыҡ күрһәтеп (көн ярайһы уҡ һалҡын, елле булһа ла), йылы мөнәсәбәттәр солғанышында, шул түңәрәктә әйләндек. Майҙан балҡып торған тере сәскә гөлләмәһен, ергә төшкән йәйгорҙо хәтерләтә ине. Ҡулға-ҡул тотоношоп, эскерһеҙ йылмайып, мөләйем ҡараштар менән, ҡосаҡлашып, рәхәтләнеп аралаштыҡ.

Шуныһы шатландырҙы: башҡорт милли кейемендә килеүселәр күпселекте тәшкил иттек. Башҡорт ирегеттәренең быйтырғыға ҡарағанда күберәк булыуы ла күңелгә май булып яғылды.

Башҡа милли кейемдәр ҙә үҙенсәлекле, байрамса, күҙҙең яуын алып торҙо. Рус, украин, сыуаш, мари, татар, мордва, удмурт, тажик, немец милли кейемендәгеләрҙә, хатта алыҫ сит илдәрҙә йәшәгән халыҡтар кейемендәге кешеләр ҙә булды. Африка студенттары ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән һәр кейемде ҡарап, беҙҙең менән ҡуша бейеп-йырлап йөрөнө.

Мин был байрамға бик шәп ғаилә менән барғайным. Шабан менән Майя икеһе лә бик яғымлы, матур пар. Шабандың әсәһе Ҡурғандан, Сафаҡул районынан - Гөлсара апай Лоҡманова - килгән. Ҡурғандар, ысын мәғәнәһендә, кейем байрамының сағыу йондоҙона әүерелде! Ҡайыулы күлдәк итәктәре, алъяпҡыстары, шау тәңкәнән торған түшелдеректәре, ҡушъяулыҡтары, сикәнән башлап әйәккә тиклем тәңкәле һағалдырыҡтары - иҫ китмәле! Бына, исмаһам, матурлыҡ!

Милли кейем байрамынан һуң "Евразия йөрәге" фестивале сиктәрендә ойошторолған "Этнотөн" тамашаһын ҡараныҡ. Йәш әртистәр арбаны. Эрзә халыҡ ижадын еткергән ҡыҙҙар ҙа, яҡут ҡумыҙсы егете лә, Үзбәкстандан килгән йәш йырсы ла - барыһы ла оҡшаны. Һәр халыҡтың үҙенә генә хас оҫталығы, ылыҡтырғыс биҙәге бар.

Был байрам халыҡ күңеленә хуш килгәнен тойҙом, рух күтәренкелеге, яңы дәрт тейәп ҡайттыҡ. Рәхмәт ошондай шәп байрамдарҙы ойоштороусы әүҙемдәргә! Тормошобоҙ тыныслыҡта, татыулыҡта дауам итһен!

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Ҡала округы хакимиәтендә аҙна һайын уҙған оператив кәңәшмәнең сираттағыһына тап ошо мәғәнә һалыңды ла инде. Сөнки байрам итер, халыҡта байрам кәйефен тыуҙырыр һәм ял итеү урындары булдырыр өсөн дә тәүҙә ныҡышмалы эшләргә кәрәк.**

# БАЙРАМДАР ҮТӘ ЛӘ КИТӘ...

## көн дә эшләргә кәрәк!

Байрамдарға килгәндә, хакимиәт башлығы Ирек Ялалов белдереүенсә, бынан 6-7 йыл элек халыҡты скверҙарға, парктарға ҡайтарыу маҡсаты ҡуйылһа, бөгөн уға өлгәшелгән. "12 июндә махсус рәүештә бер нисә сквер һәм паркта булдым - аяҡ баҫыр урын юҡ, - тип белдерҙе ул. - Муниципалитеттың, ҡала предприятиеларының, бизнестың ҡала халҡы өсөн ял итеү зоналарын булдырыу эшмәкәрлеге һөҙөмтәләрен бирә. Беҙ ойоштороған барлыҡ саралар ҙа - халыҡ өсөн, улар халыҡҡа кәрәк. Быны бер нисә көн дауам иткән сараларҙа кешенең күп булыуы ла раҫланы. Шуға күрә ошо йүнәлештәге эшмәкәрлекте дауам итергә, байрамдар ойошторғанда яңы, заманса, креатив алымдар ҡулланырға кәрәк".

Шулай уҡ хакимиәт башлығы халыҡ менән аралашыуҙың да һөҙөмтәле эшмәкәрлек ысулы булыуына баҫым яһаны. Быға миҫал итеп ул "Вся Уфа" продюсер үҙәге ойошторған "тура эфир"ҙы килтерҙе. "Тапшырыуға бик күп һорауҙар килде, улар тура бәйләнештә лә яңғыраны. Яуап бирелеп өлгөрмәгәндәренең 10 проценты бөгөнгә ғәмәлгә ашырылды. Артабан да уларға шундай темпта яуап биреүҙе йәки күтәрелгән мәсьәләне хәл итеү тиҙлеген төшөрмәҫкә кәрәк. Мөрәжәғәттәрҙә булған проблемаларҙы беҙ өс төркөмгә бүлдек: беренсеһе - 2-3 аҙна эсендә хәл итеlергә тейешлеләр; икенсеһе - төҙөкләндереү миҙгеле һуңына, йән октябрь башына тиклем; өсөнсөһө - оҙайлы ваҡыт талап иткән проблемалар. Уларҙы хәл итеү финанс сығымдарына, проект-смета документтары әҙерләүгә, конкурс процедураларына бәйле. Шуға күрә граждандарҙың аңлап ҡабул итеүен һорар инем. Барлыҡ мөрәжәғәттәр ҙә контролдә тотола һәм уларҙың береһе лә яуапһыҙ ҡалмаясаҡ", - тип белдерҙе Ирек Ишмөхәмәт улы.

Шулай уҡ кәңәшмәлә мәҙәни-тарихи мираҫ мәсьәләһе лә күтәрелде. Бөгөн баш ҡалала 15 объект реставрациялана. Был эштәр барыһы ла инвесторҙар һәм бағыусылар иҫәбенә тормошҡа ашырыла. Бороңғо биналарҙы тергеҙеү процесында тарихи ысынбарлыҡты, йәғни биналарҙың элекке йөҙөн һаҡлап ҡалыуға ҙур иғтибар бирелә. "Баш ҡаланың теге йәки был районы территорияһында төҙөлөш эштәре алып барылғанда, бигерәк тә төҙөлөш тотош кварталда тормошҡа ашырылғанда, төҙөлөш предприятиеларына мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлап ҡалыу талабын ҡуйырға тейешбеҙ. Артабан да бороңғо объекттарҙы тергеҙеү һәм реставрациялау эштәре дауам итәсәк. Ул ғына ла түгел, ҡасандыр юҡҡа сыҡҡандарын да ҡабаттан тергеҙергә тейешбеҙ", - тип, хакимиәт башлығы миҫал итеп "ҡабаттан тыуған" Бушмариндар йортон килтерҙе.

Ҡалала бөгөн бер юлы бер нисә проект һәм программа тормошҡа ашырыла. Уларҙың барыһы ла ҡаланың тышҡы йөҙөн яҡшыртыуҙы, юлдарҙы һәм ихата территорияларын ремонтлауҙы, йәмәғәт киңлеген төҙөкләндереүҙе күҙаллай. Былтыр-быйыл был маҡсатта дөйөм алғанда 8 миллиард самаһы (7 миллиард 961 миллион һум) аҡса тотоноласаҡ. Төрлө сығанаҡтарҙа был һандарҙың күләме тирбәлеүен иҫәпкә алып, Ирек Ялалов һәр программа һәм проект буйынса асыҡлыҡ индерҙе: "Урамдарҙы ремонтлауға быйыл 1 млрд 445 млн һум бүленә (былтыр - 1 млрд 625 млн һум). Ҡала мөхитен формалаштырыу проектына дөйөм сумма 330 миллиондан ашыу тәшкил итә (былтыр - 279 млн һум). "Өфө ихаталары" программаһы буйынса 169 млн һум ҡаралған (былтыр - 242 млн һум). Шулай уҡ баш ҡалала урындағы инициативаларға ярҙам итеү программаһы ла тормошҡа ашырыла. Уның өсөн ике йылға дөйөм алғанда 22 млн һум тотоноласаҡ. Төбәк операторының капиталь ремонтлау буйынса ҡыҫҡа ваҡытлы планына ингән 549 йортто капиталь ремонтлау өсөн 2 млрд 530 млн һум аҡса бүленә (былтыр 420 йорт ремонтланған, сығымдар 1 млрд 318 млн һум булған). Был һандар баш ҡалала ниндәй күләмдәге эш башҡарылыуы һәм алып барылыуы хаҡында һөйләй. Финанстар федераль, республика, муниципаль бюджеттан күсә. Шуға күрә төрлө кимәлдәге власть органдарына һәм ҡала халҡына Өфөнө матурлауға индергән өлөштәре өсөн рәхмәт әйткем килә. Киләсәктә ҡала тағы ла матурыраҡ, уңайлыраҡ булһын өсөн ошо йүнәлештә эшмәкәрлекте дауам итәсәкбеҙ һәм барлыҡ көсөбөҙҙө һаласаҡбыҙ".

Оператив кәңәшмәлә төп тема булып ихаталарҙа һәм башҡа урындарҙа бынан өс йыл элек башланған рөхсәтһеҙ урынлаштырылған гараждарҙы алыу мәсьәләһе торҙо. "Был бик ҡатмарлы тема, башта граждандар был идеяға ныҡ ҡаршы булды, хатта ломдар, балталар менән киҙәнеүселәр ҙә осраны. Йәнәһе лә, улар үҙҙәренең милкен, ғәмәлдә рөхсәтһеҙ урынлаштырылған гараждарын һаҡлауға ташланды. Әммә хәл-торошто анализлау асыҡлауынса, ошо законһыҙ урынлаштырылған объекттарҙың 5-12 проценты ғына төп тәғәйенләнеше - машиналарҙы ҡуйыу өсөн файҙаланылған, ә башҡалары йәшерен эшҡыуарлыҡ алып барыу урыны булған. Уларҙа металлолом йыйылған, спиртлы эсемлектәр һатыу ойошторолған, хатта ҡайһы берҙәрендә уйын зоналары йыһазландырылған. Бөгөн баш ҡала ошо "яман шеш"тән йәйләп ҡотолоу юлында. Ҡаршылыҡтарға ҡарамаҫтан, эш системалы алып барыла. Гараждарға бәйле икенсе мөһим проблема - уларҙың энергетика, йылылыҡ, һыу торбалары өҫтөндә урынлашыуы. Авария торошо килеп тыуғанда йәки торбаларҙы алыштырырға тура килгәндә ниндәй ситуация тыуыуын күҙ алдына килтерегеҙ инде. Шуға күрә мәсьәлә бик ауыр һәм ҡатмарлы, әммә уны тормошҡа ашырырға кәрәк", - тип белдерҙе Ирек Ишмөхәмәт улы,

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔ 7 июлдә Өфөнән 15 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан майҙанда (М5 трассаһы, 1508-се саҡрым) "Урал йондоҙо" музыка һәм спорт фестивале үтә. Фестиваль программаһында: автомобилдәр алышы, каскадерҙарҙың күрһәтмә сығышы, MadMan командаһынан донъя кимәлендәге мотофристайл, шулай уҡ эксклюзив авто, мото һәм хәрби техникалар күргәҙмәһе. "Урал йондоҙо" фестивале Башҡортостанда икенсе тапҡыр уҙа. Тәү тапҡыр, 2017 йылда, сара 7 меңгә яҡын кешене йыйҙы.

✔ Белгестәр Рәсәй туристарынан илдең иң тәмле бөйөрәктәре тураһында һорағандар. Башҡортостан, Tvil.ru сервисы мәғлүмәттәре буйынса, лидерҙар иҫәбенә ингән. Атап әйткәндә, башҡорт бәлеше респонденттарҙың 20 процент тауышын яулаған. Тәүге өсәү араһында өсмөйөштәр менән Татарстандың баш ҡалаһы һәм кибиндар менән Ҡырым Республикаһы ла бар. Карелия калиткалары - рейтингта дүртенсе, бәшмәкле эслек менән Тверь бөйөрөгө бишенсе урынды биләй.

✔ Башҡортостанда "Ҡусмә халыҡтар уйындары" - этник спорт төрҙәре буйынса ярыштар 4500-ҙән ашыу тамашасыны йыйҙы. Сара Әбйәлил районының "Яҡтыкүл" курортында уҙҙы. Ойоштороусылар булып Башҡортостандың Спорт һәм йәштәр сәйәсәте министрлығы, "Яҡтыкүл" һәм "Юбилей" шифаханалары сығыш яһаны. Милли көрәш, традицион уҡ атыу, аттан уҡ атыу кеүек этник спорт төрҙәрендә 100-ҙән ашыу батыр көс һынашты. Һыбайлыларҙың "Ылаҡ" уйыны ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.

✔ Рәсәй йыйылмаһы 2018 йылғы Донъя чемпионатының төркөм этабындағы 19 июндә, Санкт-Петербургта үткән икенсе тур матчында Египеттың милли командаһын 3:1 иҫәбе менән еңде. Был юлы тоныҡтағы баш ҡала стадионы 64 мең тамашасыны йыйҙы. Киләһе уйын 25 июндә Һамарҙа була. Беҙҙең футболсылар Уругвай командаһы менән осраша, уйын киске сәғәт 7-лә башлана.

✔ Америка дарыуҙары Рәсәйҙең яуап итеп импорт һалымдары индереләсәк тауарҙар исемлегенә инмәй, тип асыҡлыҡ индерҙе иҡтисади үҫеш министры Максим Орешкин. Һалым Рәсәй баҙарында аналогтары булған тауарҙарға ғына ҡағыла, тип айырып әйтте министр. Өҫтәмә һалым һалынасаҡ Америка тауарҙары исемлеген Иҡтисади үҫеш министрлығы яҡын көндәрҙә әҙерләй.

Орджоникидзе районы хакимиәте башлығы Марат Ғәлиуллинға ошо тема буйынса һүҙ бирер алдынан.

Сығыш яһаусы килтергән мәғлүмәттәрҙән билдәле булыуынса, Орджоникидзе районында барлығы 12 мең самаһы гараж ҡоролмаһы иҫәпләнгән. Уларҙың 119-ы - гараж кооперативы, 4878-е - металл, 6306-һы капиталь ҡоролма. 700 объект - йорт территориялары эргәһендә урынлашҡан хужалыҡ бинаһы. Хакимиәттә был проблема буйынса эшсе төркөм булдырылған, эш планы төҙөлгән. Өс йыл эсендә 1113 гараж, бигерәк тә мәктәптәр, балалар баҡсалары, башҡа мәҙәни-социаль объекттар эргәһендәге ҡоролмалар, алынған. Улар урынында 500-ҙән ашыу парковка урыны булдырылған, 1000 кубометр сүп-сар сығарылған, 500 квадрат метр майҙанда газон һалынған. Тургенев урамында һүтелгән гараждар урыны аша ямғыр һыуын ағыу канализацияһы эшләнгән. Шулай уҡ төҫлө металл ҡабул итеүҙең 12 пункты, 245 рөхсәтһеҙ эшләнгән мөғәрәп һәм ҡар баҙы ябылған. Гараждарҙың 60 процентын граждандар үҙҙәре дачаларына йәки баҡсаларына күсергән.

Был йүнәлештә лә Ирек Ишмөхәмәт улы район хакимиәттәре башлыҡтарына ныҡлы контроль булдырыу бурысын йөкмәтте: "Беҙҙә халыҡ уйлап табыуға һәләтле, башлы, гараждарҙы икенсе урынға күсереп, тағы ҡайҙалыр йәшерен гараж кооперативтары ойоштороуға юл ҡуйырға ярамай. Совет һәм постсовет осоронда гараж кооперативы милекселәре территорияны таҙалыҡта, тәртиптә тотһа, хәҙер халыҡта гараж кооперативы мәҙәниәте бөтөнләй юҡ. Был территорияларҙы йыл әйләнәһенә муниципалитет ҡарарға тейеш. Хатта ҡаланың тарихи үҙәгендә 15-20 гараж торған кооператив милекселәре лә гараждарын буямай, үҙ арттарынан ҡалған сүп-сарҙы таҙартмай. Бындай күренеште Салауат Юлаев проспектынан барғанда ла күрергә мөмкин. Орджоникидзе районын алғанда, ундағы гараж кооперативтарындағы сүп-сар өйөмдәрендә ҡурҡыныс фильм төшөрөргә була. Уларҙы беҙ сығарырға тейешме? Бәлки, бөтөн гараж кооперативтарын бөтөрөп, урынына парковкалар эшләү файҙалыраҡтыр? Бер гаражды алып, ике парковка урыны булдыра алабыҙ. Икенсе яҡтан ҡарағанда, гараждар һәр ваҡыт криминаль хроника мәғлүмәттәрендә иҫкә алына, сөнки уларҙа урланған мөлкәт һаҡлана. Бик йыш улар электр энергияһы сығанаҡтарына законһыҙ тоташып, электр менән файҙалана. Шуға күрә ҡалалағы ер участкалары, гараждар һаны буйынса аныҡ анализ эшләргә һәм ошо территорияларҙы яңыса үҙгәртеп ҡороу преспективаларын ҡарарға тейешбеҙ".

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ЗАМАНСА...*

# СӘМЛЕ КРӘҪТИӘНГӘ...

## дәүләт ярҙам ҡулы һона



**Тарих ҡабатланыу үҙенсәлегенә эйә, тип бушҡа ғына әйтмәгәндәр. Көндәлек тормошта ла бының нәҡ шулай булыуына инандырған дәлилдәр осрап ҡына тора. Шуныһы ҡыҙыҡ, әллә ҡыҙғанысмы: туҙҙырып, тарҡатып, тарих төпкөлөнә оҙатҡандарҙың ҡәҙерен әле генә аңлай башланыҡ, шикелле. Шул арҡала элекке белем биреү системаһын һағынабыҙ, динде, мәсеттәрҙе, аҡһаҡалдар ҡорон, пионерҙар һәм ҡасандыр етди әһәмиәткә эйә булған башҡа төрлө ойошмаларҙы тергеҙергә тырышабыҙ. Булыры булған, буяуы уңған, үткәндәр, тарих менән генә йәшәп булмай, тип тә әйтер кемдәр. Эйе, был һүҙҙәрҙә лә дөрөҫлөк табырға була, әлбиттә. Тик үткәндәрҙән һабаҡ алып, алға атлау бөгөн бигерәк тә йәштәргә кәрәк.**

Дәүләт Думаһы тарафынан 1995 йылда "Ауыл хужалығы кооперацияһы тураһында" Федераль закон ҡабул ителә, депутаттар ваҡыты-ваҡыты менән был темаға әйләнеп ҡайтып, ҡануниәткә үҙгәрештәр индерә тора. Хәҙер инде көнүҙәк һалынған кооперативтар төҙөү мәсьәләһе атай-бабайҙарыбыҙ көс түгеп булдырған колхозлашыу осорон да хәтерләтеп ҡуя. 30-сы йылдарҙа илебеҙ гөр килеп колхозлаштырыу эше менән янып, берләшеп эшләүгә өҫтөнлөк биргән һәм үҙебеҙҙең генә түгел, башҡа туғандаш илдәр халҡын да туйындырырлыҡ иген сәскән, мал аҫраған. Үкенескә күрә, 90-сы йылдарҙа үҙгәртеп ҡороуҙар башланып, күмәк тырышлыҡ менән булдырылған эш тә тарҡалып юҡҡа сыға. Шул арҡала буш фермалар, сүп баҫҡан ташландыҡ баҫыуҙар күбәйә. Кемдер ошо буталсыҡ мәлдә ҡаушап ҡала, икенсе береһе өмөтһеҙлеккә бирелә, ә өсөнсөләре иһә үҙе генә белгән ниндәйҙер юлдар менән алға атлай. Ошо урында тарихтың ҡабатланып тороусан булыуы тағы бер ҡат иҫкә төшә. Тик тарих ҡабатланһа ла, спиралдәр быуынының юғарыраҡ кимәлдә ҡабатланыуын күрмәү мөмкин түгел. Әлеге ваҡытта ауыл хужалығы тармағында көнүҙәк һалынған кооперативтар мәсьәләһе лә шул уҡ элекке коллективлашыу осоро тиергә була, әммә ул замансараҡ шарттарҙа, яңы технологиялар ярҙамында төҙөлә. Шулай ҙа ата-бабаларыбыҙ булдырғанды ҡасандыр тәнҡитләп юҡҡа сығарһаҡ та, бөгөн уларҙың тәжрибәһен файҙаланмай сарабыҙ юҡ.

**(Дауамы 7-се биттә).**

*ҠЫҪҠАСА*

# СЕНТЯБРЬ БАШЫНДА...

✓ **Башҡортостанда Республиканың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға алтынсы саҡырылыш депутаттарын һайлау 2018 йылдың 9 сентябренә билдәләнде.** Был турала ҡарар 18 июндә, Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы ултырышында ҡабул ителде. Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев әйтеүенсә, республика халҡы 110 депутат һайлаясаҡ. Уларҙың яртыһы бер мандантлы округ, ҡалған 55-е берҙәм һайлау округы буйынса һайлана. Ултырышта алдағы һайлауға әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса саралар планы раҫланды. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Башҡортостан Республикаһының закондар сығарыу власының даими эшләүсе органы булып тора. Ул 110 депутаттан тора һәм биш йылға һайлана. Яңы һайланған 18 депутат профессиональ даими нигеҙҙә эшләйәсәк. Һайлауҙар дөйөм тиң һәм туранан-тура һайлау хоҡуғы нигеҙендә йәшерен тауыш биреү юлы менән үткәрелә.

✓ **Республикала 23 уҡыусы: туғыҙы - информатика буйынса, икәүһе - география буйынса, өсәү - профиль кимәлендәге математика һәм тарих буйынса, алтауһы химия буйынса Берҙәм дәүләт имтихандарында иң юғары балл алған.** Республиканың Мәғариф министрлығында билдәләүҙәренсә, профиль кимәлендәге математика буйынса уртаса балл былтырғыға ҡарағанда юғары. Өфөләге өс дөйөм белем биреү йортоноң: 93-сө гимназия һәм 96-сы лицей, шулай уҡ Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының өс сығарылыш уҡыусыһы был фән буйынса һынауҙарҙы йөҙ балға тапшырған. Былтыр республикала профиль кимәлендәге математика буйынса тик бер ҡатнашыусы ғына юғары балл йыйған. Шулай уҡ тарих буйынса ла Күмертау, Октябрьский һәм Өфөнөң 3 уҡыусыһының һөҙөмтәһе - 100 балл. Химия буйынса алты ҡатнашыусы 100 балл йыйған. Уларҙың бишәүһе Өфөнән, бер уҡыусы Күмертау ҡалаһынан. Был һөҙөмтәләр шулай уҡ былтырғыларҙан яҡшыраҡ.

✓ **Башҡортостанда бензинға һәм дизель яғыулығына ваҡлап һатыу хаҡтары тотороҡланды, тип хәбәр итә республиканың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты.** Ведомствоның матбуғат секретары Нина Никандрова билдәләүенсә, нефть продукттарына хаҡтарҙың үҫешен тотҡарлау өсөн федераль кимәлдә саралар күрелде. Һүҙ, атап әйткәндә, тармаҡҡа һалым йөкләмәһен - бензинға һәм дизель яғыулығына акциздар ставкаһын төшөрөү хаҡында бара. "Баҙарҙың конкурентлы булыуын билдәләп үтергә кәрәк. Республика биләмәһендә ике вертикаль интеграцияланған нефть компанияһы һәм 10-дан ашыу бойондороҡһоҙ уйынсы эшмәкәрлек алып бара, - тине Нина Никандрова. Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың майында республикала төрлө маркалы бензин һәм дизель яғыулығына ҡулланыу хаҡтары уртаса Рәсәй күрһәткестәренән түбән булды". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, майҙа Башҡортостанда бензиндың хаҡы алты тапҡыр ҡиммәтләнде.

✓ **Рәсәй Хөкүмәте пенсия балдарын бөтөрөргә ниәтләй. "Рәсәй-1" телеканалы эфирында вице-премьер Татьяна Голикова ошо хаҡта белдерҙе.** "Известия" яҙыуынса, 2015 йылғы пенсия реформаһы хеҙмәт пенсияһының страховка һәм тупланма өлөштәрҙән тороуын күҙ уңында тота ине. Страховка пенсияһын иҫәпләгәндә пенсия балдары файҙаланылды, хеҙмәт стажының һәр йылы шулар менән баһаланды, ә пенсия тәғәйенләгәндә тупланған балдар һумға күсерелде. Ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһына дәғүә итеү өсөн 30 һәм унан күберәк балл йыйырға кәрәк булды. Норма 2025 йылдан тулыһынса эшләй башлар тип күҙалланды. Мәҫәлән, 2015 йылда 6,6 балл етә ине. Хәҙер был системанан баш тартырға хәл ителгән. Халыҡтың йыйған аҡсаһы һаҡлана, тип белдерҙе вице-премьер. Уның һүҙҙәренсә, 2019 йылғы сираттағы пенсия реформаһы пенсия күләмен кәм тигәндә эш хаҡынан 40 процентҡа тиклем еткерергә тейеш.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йүткереү

❖ Июнь айынан көҙгә тиклем алмағастың япрағын өҙөп киптерергә һәм һаҡларға. Алмағастың сорты мөһим түгел. 1 ҡалаҡ япраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡасын ябып, 10 минут талғын утта тәнәтәбеҙ. Уттан алғас тағы ла 40 минут тотабыҙ. Өлкәндәргә көнөнә ашарҙан 15-20 минут алда яртышар стакан эсергә. Балаларға ярты стакандан әҙерәк күләмдә бирегеҙ. Төнәтмәнең тәме үгәй инә үләненеке кеүек, шунда уҡ һөҙөмтәһен бирә. Йәй көнө ағастан өҙөп алып төнәтмә яһап эсергә була, был осраҡта 6 япраҡҡа 1 стакан һыу ҡояһың.

## Банандан битлек

❖ 1 бананды изеп 1 ҡалаҡ бал, 2 ҡалаҡ һөт өҫтө ҡушығыҙ. Тирегеҙ майлы булһа, ярты балғалаҡ лимон һуты өҫтәп ебәрегеҙ. Бит тиреһенә һөртөп, 15-20 минуттан йыуығыҙ һәм аҡ сәскә төнәтмәһе йәки йәшел сәйҙе туңдырып һалған боҙ менән йөрөтөп сығығыҙ.

❖ Ярты бананды изеп, 1 йомортҡа һарыһы, 1 балғалаҡ зәйтүн майы ҡушып, биткә һөртөргә һәм 20 минуттан мамыҡ менән һөртөп алырға.

❖ 1 ҡалаҡ банан иҙмәһенә 1 балғалаҡ лимон һуты, 1 йомортҡа ағы ҡушырға, миксерҙа болғатырға, биткә 15 минутҡа һөртөргә. Бит тиреһен төҙә һыуыҡ һыу менән йыуып, аҙаҡтан аҡ сәскә төнәтмәһе менән сылатылған мамыҡ менән һөртөп алырға.

❖ Ярты банан, бер бүлем әфлисунды яҡшылап изергә. Бит һәм муйын тиреһенә һөртөргә. Яҡынса 20 минуттан һуң йылы һыу менән йыуырға. Аҙнаһына бер тапҡыр ғына эшләргә. Битлектән һуң биткә алоэ һуты һөртһән, тағы ла яҡшыраҡ.

## Киҙеү

❖ Киҙеүҙе, һалҡын тейеүҙе профилактикалау өсөн: 1 уртаса ҙурлыҡтағы һарымһаҡты таҙартып изергә, ярты стакан ваҡланған әстерхан сәтләүегенә, 2-әр ҡалаҡ үҫемлек майы, лимон һуты, бер семтем тоҙ ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан алда икмәккә һылап ашарға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Шөғәйеп бәйғәмбәр

Боронғо Сүриәлә Хиджаз ҡалаһынан төньяҡтараҡ ятҡан Мадийан ҡалаһында йәшәүсе ғәрәптәрҙе мадйаниттар тип атағандар. Улар ҙа Луттың халҡы кеүек Алланы танырға теләмәгән иманһыҙ әҙәмдәр булған һәм юлбаҫарлыҡ ҡылыуҙары менән тирә-йүндәге халыҡты дер ҡалтыратып тотҡан.

Улар Алла урынына ағасҡа табыныуҙы хуп күргән. Сауҙа иткәндә һатып алыусыларҙың аҡсаһын биреп еткермәҫкә ғәҙәтләнгәндәр, аҙыҡ-түлекте бер ваҡытта ла еткереп үлсәмәгәндәр. Кешенең дәрәжәһен төшөрөү, хоҡуғын һанға һуҡмау улар өсөн бер ни тормаған. Аллаһы Тәғәлә улар араһынан Шөғәйеп исемле кешене бәйғәмбәр итеп һайлаған. Бәйғәмбәр: "Эй, халҡым! Һеҙҙең дә, минең дә Алланан башҡа яҡлаусыбыҙ юҡ. Аллаға яҡынайығыҙ, Уға ғына табынығыҙ. Үҙ-ара кешеләрсә әҙәпле мөнәсәбәт булдырығыҙ, туғандарығыҙҙы хәстәрләгеҙ, кешеләрҙең хоҡуғын боҙмағыҙ, ерҙә бысраҡлыҡ таратмағыҙ, сәсеүлектәрҙе ҡыйлыҡҡа әйләндермәгеҙ. Оло юлдарҙа кеше талауҙарҙы туҡтатығыҙ. Үҙегеҙҙең бик аҙ ғына булыуығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, ә Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе балаларға, кешеләргә мөнәсәбәттең сафлығы айҡанлы ишәйтте, арттырҙы. .Бысраҡлыҡты, әшәкелекте өҫтөн күреүселәрҙең ғүмере нисек тамамланғанын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Әгәр һеҙ Аллаға һәм Уның яҡты көн кеүек асыҡ хәҡикәтенә ышанһағыҙ, үҙегеҙ өсөн яҡшы буласаҡ", - тигән.

Әдинһеҙлегенән, иманһыҙлығынан, оятһыҙлығынан шашып киммәтлегә еткән Мадйан халҡы Шөғәйеп бәйғәмбәрҙе мыҫҡыллап көлөп: "Һинең намаҙҙарың беҙҙе атай-олатайҙарыбыҙ табынған ташбүкәндәрҙән баш тарттыра алырмы ла, үҙебеҙҙең мөлкәтте үҙебеҙсә файҙаланып килем алырға ғәҙәтләнеүебеҙҙе бөтөрөр тип уйлайһыңмы? Һин һөйләгәндәрҙең күбеһе беҙҙең өсөн ят. Һин беҙҙең арала йомшаҡ бер әҙәмһең. Әгәр һинә яуызлыҡ ҡылырға теләһәк - ҡылабыҙ. Беҙҙе өгөт-нәсихәтең менән бер нисек тә туҡтата алмаясаҡһың. Әгәр һинең нәҫелдән дә беҙҙең кеүек ташбүкәндәргә табыныусылар булмаһа, үҙеңде күптән таш менән бәргеләп үлтерер инек. Һинең фәҡәт бер Аллаға табынырға саҡырыуҙарыңды ишетмәйбеҙ, йөрәктәребеҙ ҙә бикле", - тигән. Ә Шөғәйеп бәйғәмбәр: "Эй, халҡым! Минең нәҫелемде иҫегеҙгә төшөрөп, уны Алланан өҫтөн ҡуймаҡсыһығыҙмы, Алланы оноттоғоҙмо, Уға артығыҙ менән боролоп, минә ярарға тырышаһығыҙмы? Алла бөтәһен дә күрә, белә, ишетә. Ниндәй эш ҡылһағыҙ ҙа Унан йәшерә алмаясаҡһығыҙ. Уның ҡарғышын ала күрмәгеҙ", - тип өҙгөләнеп киҫәтә. Ләкин былар уны тыңларға ла теләмәй.

## Иҫкәртеү һанға һуғылмағас...

Шөғәйеп бәйғәмбәр арымай-талмай халҡын иманға, әҙәпкә саҡыра: "Әгәр иманға килеп, динде ихтирам итеп, Аллаға һыйынһағыҙ, Ул һеҙҙе үҙ ҡанаты аҫтына аласаҡ, бер ваҡытта ла яҡлауынан ташламаясаҡ", - ти.

Ләкин әхлаҡи яктан тарҡалған кешеләр уны һәр саҡ мыҫҡыллай: "Һинең ҡараштарыңды урталҡлашыр иптәштәрең дә юҡ бит, һине бында бер кем дә хөрмәт итмәй, нәҫелеңдә беҙҙең яҡлылар булмаһа, күптән үлтереп ташлар инек", - тип көләләр. Ә араларындағы ҡәҙимге билдәле әҙәмдәр хатта башҡаларына: "Әгәр Шөғәйеп бәйғәмбәргә эйәрһәгеҙ, һеҙ ата-бабаларығыҙ танырға ла теләмәгән дингә тартылғанығыҙ өсөн дәрәжәгеҙҙе, мал-мөлкәтегеҙҙе, ғүмүмән, бөтөн нәмәгеҙҙе лә юғалтасаҡһығыҙ", - тип ҡурҡыталар.

(Дауамы бар).

ӨФӨ БАШҠОРТО

# ҠИММӘТТӘРЕБЕҘҘЕ...

## заманса алымдарҙа балҡытайыҡ

**Йәнәшәбеҙҙә ҡыҙыҡлы кешеләр бик күп. Уларҙы беҙ көн һайын күреп йөрөгәнлектән, хатта артыҡ иғтибар ҙа итмәйбеҙ, шулай тейеш тип ҡабул итәбеҙ. Ә инде бәғзеләр тормошобоҙға ҡапыл килеп инә лә, уға яңы сағыу төҫтәр өҫтәп, тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ итә, үҙенең фекерҙәре менән байытып, уйландыра. Рубрикабыҙҙың сираттағы ҡунағы - баш ҡалала эшләп килгән АртКлуб етәксеһе, беренсе белеме буйынса инглиз теле уҡытыусыһы, тәржемәсе, икенсе вуз дипломы буйынса - юрист, шулай уҡ идара менеджменты буйынса белем камиллаштырыу курстарын тамамлаған Айгөл РӘШИТОВА.**



**➔ Һуңғы ваҡытта ҡала башҡорттары, ауыл башҡорттары тигән терминды бик йыш ҡулланабыҙ. Бер танышым быға ҡарата: минең өсөн ҡала, ауыл башҡорттары юҡ, улар барыһы ла башҡорттар, тигәйне. Улар нимә менән айырыла һәм һеҙ ҙә башҡорттарҙы ҡаланыҡына, ауылдыҡына айыраһығыҙмы?**

- Минеңсә, хәҙерге ваҡытта башҡорттарҙы ниндәйҙер принцип буйынса бүлгеләү ваҡыты үтгел. Киреһенсә, үҙен башҡорт тип иҫәпләгәндәрҙең барыһын бергә берләштерергә кәрәк. Әгәр үҙлегебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һәм телебеҙҙе һаҡлап ҡалырға теләһәк, ваҡ-төйәк ығы-зығыны ситкә ҡуйып тороп, һәр кем башҡорттоң һәм уға ҡағылған бөтөн нәмәнең ыңғай образын тыуҙырыу өсөн ниммәлер эшләргә тейеш. Шуныһы, балаларыбыҙға башҡортлоҡтоң әһәмиәтен аңлата, уларға милләт тойғоһон тапшыра алмаясаҡбыҙ. Быныһ өсөн, әйтеп үтеүемсә, башҡорттарҙы ғына түгел, ә кем башҡорт халҡын, уның мәҙәниәтен, тарихын ярата, баһалай - шуларҙың барыһын бергә тупларға кәрәк. Бөгөн етеҙ урбанизация заманында йәшәйбеҙ. Башҡорттарға ғына түгел, барлыҡ этностарға глобалләшеү, интернет, мәҙәниәттәрҙең һәм телдәрҙең ассимиляцияланыуы ҙур баҫым яһай. Шуға күрә, булған ҡиммәттәребеҙ, мәҙәни, тарихи байлығыбыҙ балаларыбыҙға, йәштәребеҙгә ҡыҙыҡлы булһын өсөн, уларҙы һаҡлап ҡалыу һәм заманса ҡорамалдар ярҙамында үҫтереү буйынса аңлы аҙымдар эшләргә тейешбеҙ.

**➔ Баш ҡалала совет йылдарында туған телдә белем алыу ҙур проблема булып торҙо. Был мәсьәлә һеҙгә лә ҡағылғандыр, моғайын. Бөгөн дә дәүләт телен өйрәнеү һәм туған телдә уҡыу көнүҙәк мәсьәлә булып тора. Һеҙҙең өсөн ата-әсәләр теле нимә ул?**

- Бик күп милләттәштәрем кеүек, мин дә ябай совет мәктәбендә уҡыным. Үкенескә күрә, Өфөлә башҡорт телен өйрәнеү мәктәбе бөрәү генә ине, ата-әсәләрҙең балаларҙы ошо мәктәпкә йөрөтөү мөмкинлеге лә бик булманы. Мин башҡорт телен йәйгеһен Салауат районына олатайым һәм өләсәйем янына ҡайтҡанда өйрәндем. Башҡорт телендә һөйләшеү шул тиклем оҡшаны. Бер айҙан инде башҡортса аралаша, аңлай башланым. Һөнәрем буйынса лингвист булараҡ, башҡорт телен лингвистика күҙлегенән сығып баһалай алам: башҡорт телендә үҙенсәлекле, башҡа телдәрҙә булмаған һүрәтләү саралары бар һәм улар һинд-европа телдәрендәгеләргә оҡшамаған.

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү, әлбиттә, республиканың барлыҡ мәктәптәрендә лә индерелергә тейеш. Башҡортостандың һәр кешеһе башҡорт телен аралашыу кимәлендә булһа ла белергә тейеш, был уның мәҙәниәт күрһәткесе лә булып тора.

**➔ Һеҙ - АртКлубта башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр өсөн курстар ойоштороусыларҙың береһе. Сер булмаһа, белем алыу процесы нисек барҙы һәм ниндәй һөҙөмтәләргә өлгәштегеҙ?**

- Мине был аҙымға башҡорт телен мәктәптәрҙә уҡытыу-уҡытмауға бәйле хәл-торош һәм социаль селтәрҙәрҙә алып барылған ғауғалы фекер алышыу этәрҙе. Сөнки башҡорт теле һәм мәҙәниәте һаҡланып ҡала һәм үсешә алырлыҡ берҙән-бер урын - ул Башҡортостан. Һәм уларҙы һаҡлап ҡалыу - атай-олатайҙарыбыҙ, киләсәгебеҙ, ғөмүмән, бөтөн кешелек алдындағы бурысыбыҙ. Ниндәй генә тел булмаһын - ул ҙур ҡиммәт, тормошҡа икенсе төрлө ҡарау, башҡа менталитеттарҙы аңлау мөмкинлеге. Башҡорт телен өйрәнеү өсөн эмоциональ һәм рациональ сәбәптәр бар.

Курстар ойошторғанда минең өсөн башҡорт телен өйрәнергә, шул телдә һөйләшергә, аңлашырға теләгән ололарҙы йыйыу һәм ҡала ундайҙарҙың барлығын һәм уларҙың аҙ түгеллеген күрһәтеү төп маҡсат булды. Уҡыу барышында ике төрлө программа буйынса эшләнек. Беренсеһе башҡорт телендә һөйләшкән, уны аңлаған, әммә тағы ла тәрәнерәк өйрәнергә теләгән башҡорттар һәм татарҙар өсөн булһа, икенсеһе телде бөтөнләй белмәгән кешеләрҙән тупланды.

АртКлубтағы курстар менән бер рәттән, уҡытыусыларыбыҙҙың береһе Гөлназ Йосопова үҙе уҡытҡан 94-се гимназияла ла шундай уҡ курстар ойошторҙо. Был инициатива менән гимназия директоры, рус милләтле ханым үҙе сыҡты. Унда беҙҙең курстарға әлегә алмағандар барҙы. Сөнки һөҙөмтә юғарыраҡ булһын өсөн курстарҙы бәләкәй төркөмдәр менән үткәреү яҡшыраҡ һәм беҙ барыһын да ҡабул итә алманыҡ. Әммә теләүселәр, шылтыратыусылар күп.

**➔ Клубығыҙҙа башҡорт ырыуҙары тураһындағы китаптарҙан тотош китапхана тупланған. Ә үҙегеҙ ырыуығыҙҙы беләһегеҙме?**

- Был китаптар килеүселәрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, китаптан ҡарай, эҙләй, туғандарына шылтыратып, белешә, мәғлүмәт ала башлайҙар. Үҙемә килгәндә, сығышым менән мырҙалар ырыуынан.

**➔ Ҡалала иң яратҡан өс урынығыҙ? Әгәр шундай мөмкинлек бирһәләр, архитектурала һәм дизайнда нимәләрҙе үҙгәртер инегеҙ?**

- Иң яратҡан урыным - Салауат Юлаев паркына алып барған аллея һәм парк үҙе. Уның оҙон ағас баҫҡыслы, матур скульптуралы һәм беседкалы урыны бигерәк тә күңелемдә һаҡлана. Минең бала сағым шунда үтте, һәр ял ата-әсәйем һәм ағайым менән шунда йөрөй инек. Хәҙер парктың элекке матурлығы ҡалмаған һымаҡ.

Икенсеһе - Комсомол һәм Новостройка урамдары араһындағы урман. Ул урманда беҙ атайым менән саңғыла йөрөй инек. Ғаилә менән прогулкаға сыға, һуңынан умырзаялар сәскә атҡанда тиҫтерҙәребеҙ менән шунда осраша торғайныҡ. Таныш, шул уҡ ваҡытта хәүефле булмаған урман, ҡала эсендә ҡырағай тәбиғәттең бер өлөшө һәр кемгә кәрәктер ул.

Өфөнсө яратҡан урыным - АртКлуб, Өфөлә минең өсөн иң ҡыҙыҡлы ваҡиғалар: үҙенсәлекле кешеләр менән осрашыу, төрлө рәссамдар менән берлектәге ижад, эксперттар менән көнүҙәк темалар буйынса фекер алышыу, башҡорт телен өйрәнеү һәм башҡорт телендә һөйләшеү үткән минең оҫтаханам. Бында мин һәр саҡ битараф булмаған, күҙҙәре янып торған, ҡаланың һәм республиканың тормошон ҡыҙыҡлыраҡ, мәғәнәлерәк итергә тырышҡан кешеләр араһында. Миңә төрлө ҡыҙыҡлы кешеләргә һәм проекттарға үҙ фекерҙәрен белдерергә урын бирә алыуым оҡшай, был майҙанда кешеләр үҙҙәренең гражданлыҡ бурысын ниндәйҙер кимәлдә тормошҡа ашыра.

**➔ Бөгөн ҡала мәҙәниәтендә башҡорт колориты тойоламы һәм ул етерлек кимәлдәме?**

- Минеңсә, беҙ республика этникаһының ҡеүәтен тулыһынса файҙаланмайбыҙ. Башҡорттарҙың мәҙәниәте ҡыҙыҡлы, үҙенсәлекле, үҙлекле һәм тәрән. Бары тик ул үҙенең асылыуын көтә. Мин йәштәрҙең башҡорттарҙың үҙенсәлеген заманса ҡыйыу итеп асырына өмөтләнәм.

**Земфира ХӘБИРОВА әңгәмәләште.**

✓ ***Был программаға ярашлы, кооперативтарға берләшеүселәргә 70 млн һумға тиклем грант бүлеү ҡаралған. Программа шарттары буйынса, грант алыу өсөн сығымдарҙың 40 проценты үҙеңдеке булһа, ҡалғанын хөкүмәт ҡаплай.***

*ЗАМАНСА...*

# СӘМЛЕ КРӘҪТИӘНГӘ...

## дәүләт ярҙам ҡулы һона

**(Башы 5-се биттә).**

Республикала кооперативтар төҙөү мәсьәләһен БР Башлығы Рөстәм Хәмитов бынан бер нисә йыл элек күтәрә башлағайны. Бөгөн был эш мотлаҡ хәл ителергә тейешле иң көнүҙәк проблемаларҙың береһе һанала. Белгестәр ҙә кооперация төҙөүҙе ауылдарҙа мәшғүллекте тәьмин итеү, агросәнәғәтте үҫтереү, өҫтәмә килем алыу һәм элекке коллективлашыу традицияһын кире тергеҙеү йәһәтенән иң уңайлы алым тип аңлата. Бының өсөн кооперативтарҙың күберәк хужалыҡтарҙы берләштереүе, улар араһында аяғына ныҡлы баҫҡан фермерҙар, шәхси хужалыҡтар булыуы мөһим. Әлбиттә, эш башлау өсөн тәү сиратта киң фекерләй белгән, башҡаларҙы үҙ артынан эйәрткән инициативалы лидер булыуы ла шарт. Нәҡ ошо кеше кооперацияның өҫтөнлөгө, файҙаһы тураһында барыһына ла аңлатырға тейеш. Ҡайһы бер ауыл хужалығы белгестәре һәм Бөтә Донъя банкы эксперттары белдереүенсә, кооперативтар булдырыуҙа тәүге урында финанс ярҙамы түгел, ә методика һәм мәғлүмәткә эйә булыу, төбәктең үҫеш кимәле юғарыраҡ урында тороуы мөһим һанала. Ә Рөстәм Зәки улы әйтеүенсә, әлегә ауыл ерендә бизнесты үҫтереү ҙур тотҡарлыҡ кисерә һәм был процесс 15-20 йыл буйына алға китмәй, бер урында тапана. Кооперативтар хәрәкәте булдырыу һәм яңы йүнәлеште үҫтереү өсөн дә башта республикалағы бизнес мөхитен өйрәнеү мөһим. Был йәһәттән беҙҙең республикала бөтә шарттар ҙа, уңайлыҡтар ҙа бар - юлдар яҡшы, инженер, интернет селтәрҙәре үҫешкән, продукцияға хаҡтар, уларҙы реализациялау һәм башҡа хеҙмәттәр буйынса фермерҙар тиҙ арала кәрәкле мәғлүмәт алып, үҙ-ара һөйләшеүҙәр, килешеүҙәр алып бара ала, бары тик дилбегәне ҡулға алып, эшләй белергә генә кәрәк, ти белгестәр. Шулай уҡ кооперативтар төҙөүҙе популярлаштырыу, был эште алға ебәреү өсөн ауыл хакимиәттәренең дә ныҡлы эшләүе, тейешле ярҙам күрһәтеүе мөһим.

Әлеге ваҡытта кооперативтар ойоштороу буйынса Башҡортостанда яңы ҡыбырлай башланылар тиергә лә була. Был йәһәттән Томск, Төмән, Ульяновск өлкәләре, Саха-Яҡут Республикаһы алда бара. Тәүге осорҙа беҙҙең республика кооперацияларҙы үҫтереүгә йүнәлтелгән пилот проектҡа ла инмәй ҡалғайны. Шул арҡала икенсе проектҡа инеү өсөн ҙур тырышлыҡ һалынды. Бөгөн республикала 116 ауыл хужалығы кооперативы теркәлгән. Шуларҙың 39-ы былтыр, 16-һы быйыл теркәлгән, ҡалғандары быға тиклем эшләп килгән кооперативтар. Ысынбарлыҡта, был кооперативтарҙың 80 проценты уңышлы эш башлаған. Яңы хәрәкәткә беҙҙә әле саҡ ҡушыла башлаһалар, Европала ул ҙур үҫеш кисерә. Унда 250 мең кооперативта 10 миллиондан ашыу кеше эшләй.

Кооперативтар төҙөү буйынса Башҡортостан әле саҡ әүҙемлек күрһәтә башлаһа ла, ул Рәсәйҙә ауыл хужалығы етештереүселәре булараҡ 7-се урынды биләй. Алғараҡ үрләү өсөн иҡтисад өлкәһенең кооперация секторын беҙҙә лә күтәреп алырға тырышалар һәм шул арҡала 2020 йылға Башҡортостанда 450 ауыл хужалығы кооперативы булдырырға тип хәл ителгән. Башҡортостан Башлығы ла ла был эш уңышлы тормошҡа ашыр, сөнки 1 миллион 300 мең кеше ауыл ерендә йәшәй, кооперативтар ойоштороу мөмкинлеге ҙур, тигән ышаныс белдерә.

Кооперация бергәләшеп эшләүҙе күҙ уңында тота, йәғни, үҫтереүсе, етештереүсе һәм һатыусы бер кооперация булып, йөктө бергәләп тарта. Былар иһә ауыл хужалығын үҫтереүгә, халыҡтың килемен арттырыуға, йәшәү кимәлен яҡшыртыуға, өҫтәмә эш урындары булдырыуға, ошо тармаҡтағы бизнеста конкуренция булдырыуға ла ҙур этәргес булаsaҡ. Кооперация төҙөгәндә коллектив ағзаларының ирекле булыуы, бер-береһенә ышаныуы һәм конфликтлы ситуацияларҙы дөрөҫ хәл итә белеүе мөһим. Нәҡ ошо ваҡытта ғына заманса талаптарға таянып, һөҙөмтәле алымдар менән эшләү мөмкинлеге тыуасаҡ. Белгестәр ауыл хужалығы кооперативтарын төҙөү өлгөрөп еткән мәсьәлә тип һанаһа ла, ғәҙәттәгесә, яңылыҡты тиҙ генә күтәреп алырға теләүселәр артыҡ күп түгел. Яңы йүнәлеште нисек кенә маҡтамаһындар, нисек кенә уның өҫтөнлөктәрен аңлатмаһындар, күптәр элек колхоз төҙөүҙә нисек икеләнеп, ҡурҡып ултырған, шундай уҡ тойғо кисерә. Элек: мин өс һыйырымды эйәртеп колхозға инһәм, һауып эсер кәзәһе лә булмаған күршем ниндәй өлөш индерер, тип ҡурҡһалар, әле лә ошондайыраҡ шиктәр, байыраҡтар менән ҡушылып, булғанымдан ҡолаҡ ҡағырмын, тип икеләнеүселәр күп. Эйе, яттар араһында ғына түгел, бер ата, бер әсә балалары араһында ла төрлө аңлашылмаусылыҡтар, бәхәстәр килеп сығыусан, ә бында ҡырҡ ата балаһы йыйылған ерҙә үҙ-ара килешеп, уртаҡ йөк тартып эшләү өсөн мөнәсәбәттәрҙең дә ышаныслы, етди булыуы шарт. Көслө, үҙ артынан башҡаларҙы эйәртә, икеле уйҙарҙы тарата, эргә-тирәләге социаль хәл-торошто, географик урынды яҡшы белгән лидер булғанда, ҡурҡырлыҡ урын юҡ. Бынан тыш, кооператив ағзаларының һәр ҡайһыһының үҙ тауышы бар, бергә ҡарар ҡабул итәләр, взностарҙы бергә түләйҙәр, тип аңлата белгестәр.

Бөгөн Республика Башлығы кооперативтар төҙөү өсөн төрлө яҡлап ярҙам итергә, был йәһәттән ресурстар бүлергә, ойоштороу эштәрендә ярҙам күрһәтергә әҙерлеген белдерә. Ошо маҡсаттан, ауыл хужалығы ҡулланыусылары кооперативының матди-техник базаһын үҫтереү өсөн, дәүләт 300 млн һум аҡса һалырға әҙер, йәғни һәр инициатив төркөмгә 3 млн һумға тиклем аҡса бүлеү ҡарала. Быйыл ауыл хужалығы кооперацияларын булдырыу программаһына республиканың 300 ауыл биләмәһе ҡушылыуы көтөлә, уларҙа 100 кооператив булдырырға планлаштырыла.

Яңы башланғысҡа беҙҙең Белорет районынан да ҡушылыусылар бар. Мәҫәлән, Рөстәм Мөхәмәтдинов һөт йыйыу һәм эшкәртеү, Гөлнара Абдуллина ит эшкәртеү, колбаса етештереү, Анатолий Потеев йәшелсә продукцияһы етештереү, эшкәртеү һәм консервалау буйынса кооператив төҙөйәсәк. Ә бына шифалы үләндәр йыйыу буйынса Марсель Мортазин эш башлаған да инде. Был элек-электән эшләп килгән кооператив. Унда 100-ҙән ашыу кеше эшләй.

2017 йылдың 8 февралендә Республика Башлығының "Ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативының матди-техник базаһын үҫтереү тураһында" ҡарары сыҡты. Был программаға ярашлы, кооперативтарға берләшеүселәргә 70 млн. һумға тиклем грант бүлеү ҡаралған. Программа шарттары буйынса, грант алыу өсөн сығымдарҙың 40 проценты үҙеңдеке булһа, ҡалғанын хөкүмәт ҡаплай. Грант төҙөлөш, етештереү объекттарын реконструкциялау, модернизациялауға йүнәлтелә. Грантҡа алынған мөлкәт Рәсәй Федерацияһы законына ярашлы 5 йыл буйына һатыуға, бүләк итеүгә, ҡуртымға биреүгә, алыштырыуға рөхсәт ителмәй. Грант алыу өсөн конкурста ҡатнашыуға заявка биргән ваҡытта кооператив эшмәкәрлеге 1 йылдан ашыу булырға һәм ул Башҡортостан территорияһында теркәлергә, кооператив ағзалары етештергән продукцияның 70 проценты ауыл хужалығы өлкәһенеке булырға тейеш. Был кооператив грант алғандан һуң 5 йылдан да кәм эшләмәҫкә бурыслы. Бынан тыш, кооперативтар, алған гранттарын тулыһынса маҡсатҡа ярашлы тотоноп бөткәндән һуң, тағы ла грант алыуға заявка бирә ала.

"Беҙ быға тиклем кооперативһыҙ ҙа эшләп килә инек, - тип һөйләй Рөстәм Мөхәмәтдинов. - Берләшеп эшләгәндәргә хөкүмәттең ярҙам итеүен иҫәпкә алып, 10 кеше йыйылып, үҙ-ара килештек тә был эшкә ҡушылырға булдыҡ. Үҙебеҙҙең 1 млн һумға өҫтәп, дәүләттән 2 млн һум ярҙам ала алһаҡ, һөт эшкәртеү ҡорамалдары һатып алырға ниәтләйбеҙ. Эште 10 кеше менән башлап ебәрергә хәл иттек, уңыш йылмайһа, артабан киңәйергә, айырым кешеләрҙе, эрерәк крәҫтиән-фермер хужалыҡтарын да саҡырырға мөмкин. Кооператив ишеге һәр саҡ асыҡ була. Беҙҙең маҡсат - һөт продукцияһын башынан аҙағына тиклем эшкәртеп, һатыуға сығарыу һәм шуның менән һөт продукцияһын реализациялау проблемаһын хәл итеү. Быға тиклем ошо уҡ эштәрҙе һәр кем үҙе башҡарҙы. Тик яңығыҙына ниәттәренде тормошҡа ашырыу өсөн ваҡыт күберәк китәсәк. Ә бында иһә бер йыл уңышлы ғына эшләгәндә, артабанғы үҫеш өсөн хөкүмәттән тағы ярҙам алып була".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәмғиәттең башҡа өлкәләрендәге кеүек үк, ауыл хужалығында ла ҙур үҙгәрештәр бара. Әленән-әле индерелеп торған яңылыҡтарҙы үҙләштереп, уларға ныҡлап өйрәнергә күптәрҙең ваҡыты ла ҡалмай. Аңлағандары иһә унан файҙа алырға, мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмаҫҡа тырыша. Кооперативтар хәрәкәте лә уға өмөт бағлаусыларҙың ышанысын аҡлар, мәнфәғәттәрен тулыһынса яҡлар тип ышанғы килә.**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Был мәсьәлә буйынса Зәйнулла Рәсүлевтың һәм уның коллегаларының фәтүәһе (дини-юридик ҡарары) баҫылған брошюра бер нисә мәртәбә нәшер ителеп, XX быуаттың беренсе тиҫтәһе аҙағында бөтә урындарҙа ла уҡытыуҙа яңы фонетик ысул индереү өсөн хәл иткес факторға әйләнә. Зәйнулла Рәсүлевтың фонетик ысулға ҡарата булған илтифатлығына һәм уның йәҙитселәр хөрмәт иткән суфый шәйехтәренең береһе булыуына ҡарамаҫтан, ул үҙен йәҙитсе итеп иҫәпләгән, тип уйларға ярамай. Ғәмәлдә "Рәсүлиә"не йәҙитселәр менән ҡәҙимселәр араһындағы упҡын өҫтөнән һалынған күпер рәүешендә күреп, ҡатнаш, уртасыл типтағы мәҙрәсә итеп һүрәтләргә булыр ине. Бәлки, Зәйнулла Рәсүлев үҙе лә ҡәҙимселек менән замансалыҡты ялғай алыуға һәләтле зат булып тойолғандыр.

Үҙ эйәрсәндәренән булған сирлеләргә ул, ғәҙәттә, башҡа суфый шәйехтәренә хас булғанса, бетеү генә түгел, медицинала ҡулланылған дарыуҙар тәҡдим итеп, уларҙы ошо дауалау саралары менән үҙенең шәхси диспансеры аша тәьмин итеп торған. Зәйнулла ишанға "сит ил ғилемен" яҡшы белеүе айҡанлы барыһы ла хөрмәт менән ҡараған, күрәһең, ул татар телендә таратыла башлаған ғилми-популяр китаптарҙы үҙаллы өйрәнә алған.

Шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың замандашы Абдрахман әл Мағази уның "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендәге көндәлек режимы тураһында бик фәһемле яҙма ҡалдырған. Шәйехтең ижтимағи эше иртәнге сәғәт һигеҙҙән уның кәңәштәренә, шәфҡәт-мәрхәмәтенә, ғәмәли ярҙамына мохтаж булған мөриттәрен һәм башҡа йомош менән килеүселәрҙе ҡабул итеүҙән башланған. Шәйехтең өҫтәлендә һәр саҡ ҡайнар самауыр булып, һәр килеүсегә сәй тәҡдим ителгән. Сәғәт ун икелә ул "Сахих аль-Бухари" (мосолман ғалимы Бохариҙың Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең хикмәтле һүҙҙәренән туплаған йыйынтығы) текстары һәм "Тафсир аль-Джалалейн" (мосолман ғалимы Суюти тарафынан яҙылған Ҡөрьән тәфсире) буйынса шәкерттәргә һабаҡ бирергә бара, дәрестәр өйлә намаҙына тиклем дауам итә. Төшкө аштан һуң шәйех йә алдан килешелгән берәй осрашыуға киткән, йә тағы ла мәҙрәсәгә килеүселәрҙе ҡабул иткән, шунан һуң икенде намаҙына тиклем ял итеп алған. Киске, йәғни аҡшам намаҙына тиклем Зәйнулла мәсеттә үҙенең мөриттәре менән осрашып, улар менән бергә Нәҡшбәндиә туғанлығының хатми хваджаганг тип аталған махсус доғаларын уҡыған. Йома көн һәм мөриттәр күпләп килгән башҡа көндәрҙә хатми хваджаганг икешәр тапҡыр уҡылыр булған. Мосолмандарҙың ураҙа тотоу ваҡыты булған Рамаҙан айы был тәртипкә ҡайһы бер үҙгәрештәр индергән: Зәйнулла шәйех ҡай саҡта дәрестәрен төштән һуңға күсергән, ә Рамаҙан айының һуңғы ун көнөндә иғкикаф (башҡалар менән аралашмай, мәсеттә бер үҙең бикләнеп ултырыу рәүеше) башҡарған.

"Рәсүлиә" мәҙрәсәһенең әһәмиәтен тулыһынса аңлар өсөн башҡорттарҙың һәм татарҙарҙың ҡаҙаҡтар, ә XVI быуаттан башлап башҡа дала халыҡтары менән күрше йәшәгәндәрен иҫкә алырға кәрәк. XIX быуатта татар буржуаз синыфының үҫә башлауы менән татар сауҙагәрҙәре ҡаҙаҡ далаларына даими барып йөрөп, был яҡтарҙа үҙҙәрен исламлаштырыу агенттары итеп тә таныта. Әлбиттә, сауҙагәрҙәрҙең мәҙәни һәм дини йоғонтоһо һис шикһеҙ сикләнгән була. Ислам динен, мәҙәниәтен һәм әҙәбиәтен ҡаҙаҡтар араһына тәрәнерәк индереү мөмкинлеге ҡаҙаҡ шәкерттәрен башҡорт һәм татар мәҙрәсәләренә ебәрә башлау менән асыла.

**(Дауамы бар).**

*✓ Беҙҙең халыҡты Сталиндың сәйәси золомо ныҡ киҫә. Ҡайҙалыр уҡығайным, хатта беҙҙең республикаға ике мең кешене иркенән мәхрүм итергә, тигән разнарядка була. Урындағы властар был һанды илле мең кешегә алып барып еткерә.*



**Күренекле яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаева быйыл яҙ үҙенең 75 йәшлек, ә күренекле яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Яныбай Хамматов, Ғәли Ибраһимов исемендәге премиялар лауреаты Сабир Нәғим улы Шәрипов 70 йәшлек юбилейҙарын билдәләне. Улар менән ҡорған әңгәмәбеҙ халҡыбыҙ яҙмышы, әҙәбиәт, сәнғәт, мәҙәниәт проблемалары хаҡында.**

# АУЫЛЫМ, МИЛЛӘТЕМ, ошондай уртаҡ маҡсат

**Элегерәк, беҙ бала, үҫмер саҡта 50-60 йәшкә еткән кешеләр ҡарт күренә торғайны. Хәҙер бына элекке самалар менән Мәрйәм апайға ҡараһаң - 75, Сабир ағайға - 70 йәш биреп булмай. Әлхәмдилүллаһ! Был ҡартлыҡтың йәшәреүеме, әллә киреһенсәме? Һәр хәлдә, һеҙ бала, үҫмер саҡта әлеге һеҙҙең йәштәгеләр нисек булып күренә ине?**

**Сабир Шәрипов:** Был һорауҙың социаль мәғәнәһе лә ҙур. Мин, мәҫәлән, һуғыштан һуң тыуғанмын. Беҙҙең заманда 40-50 йәштәгеләр ҙә ҡарт күренде. Икенсенән, беҙҙең яҡта, мәҫәлән, урман ҡырҡыу, ағас ташыу уғата ауыр. Был хәтәр кәсеп һаулыҡты ала, күп урмансылар оҙаҡ йәшәй алмай. Һал ағыҙыуҙа, ҡыуғында йөрөүселәр, ҡыштарын диләнкәлә эшләүселәр һыуыҡ тейгеҙеп, олоғая килә тиҙ бирешә. Медицинаның артта ҡалыуы ла урмансыларҙың уртаса йәшендә сағылыш тапҡандыр. Һуғыш ваҡытында яуҙа ла, тылда ла булған ауырлыҡтар, һуғыш яралары, аслыҡ йылдарындағы миктәүҙәр - халҡыбыҙ шул осорҙа күргән ыҙалыҡтарҙы һөйләп бөтөрөрлөк түгел инде ул.

**Мәрйәм Бураҡаева:** Мин дә, Сабир ҡусты әйткәнсә, ғүмер оҙайлығында йәшәү рәүешенең сағылышын билдәләр инем. Әммә бер үк заман кешеләре, йәғни йәштәштәр араһында ла айырма бар бит. Һикһән йәшлектәр араһында тетә һуғып донъя көтөүселәр ҙә, үлем көтөп ятыусылар ҙа юҡ түгел. Йылдар иҫәбен дә, йәш билдәләүҙе лә кешелек донъяһының аҡыллы баштары уйлап тапҡан бит. Әммә тәбиғәт тарафынан түгел. Тимәк, тәбиғәттә йәш билдәләү зиһен яҡтылығына, аң торошона, йәшәү маҡсатына, сәләмәтлеккә, ҡыҫҡаһы, күңел донъяһына бәйле, тип уйлайым. "Эй, ҡыҙым, беҙҙең йәшкә ет әле, ҡартлыҡтың ни икәнлеген аңларһың", - ти ине ололар. Артабан инде: "Инәй, һеҙгә нисә йәш ул?" - тип һораусылар була башланы. Яҙмыштың иркә балаһы, сәскәнән-сәскәгә ҡуныр йәшәгән күбәләк булманым, әммә мин туҡтауһыҙ идеялар, проекттар менән йәшәйем һәм йәш - ул күңел торошо, тигән һығымта яһау дөрөҫ булалыр, тип уйлайым.

**Сабир Шәрипов:** Сер түгел: ҡырыҫ себер тайгаһында чукча, эвен, яҡут, тофалар һ.б. милләттәрҙе абхаздар, черкестар ише оҙаҡ йәшәүселәр иҫәбенә индереп булмай. Ләкин, уйлауымса, һәр халыҡ үҙенсә бәхетле, үҙенсә һөйкөмлө.

**Кешенең йәшенән халыҡтың, милләттең йәшенә күсәйек. Үҙем менән булған ҡыҙыҡлы бер ваҡиға хаҡында әйтеп үтәм. Быйыл 24 февралдә Баймаҡ районының Темәс ауылы янында спорт уйындары ойошторолдо. Бәйге лә булды. Башҡорт тоҡомло аттар йәшенә ҡарап дүрт төркөмдә сабышты. Башҡа тоҡомло аттар ҙа үҙ-ара ярышты, һуңынан санаға егелгән аттар, юртаҡтар ике тәгәрмәсле арбала уҙышты. Бәйгегә Әбйәлил районының Айыуһаҙы ауылынан дүрт йәшлек башҡорт тоҡомло айғырҙы алып килгәндәр. Республика, Рәсәй, төбәк-ара бәйгеләрҙә алдынғылыҡты бирмәгән ул айғыр. Үҙенең йәшендәге аттар менән сабышырға мәле килеп еткәйне, сабышыуҙан баш тартты ла ҡуйҙы. Айғырҙы сабышырға алып килеүсе танышым, Айыуһаҙы ауылы ир-уҙаманы Биктимер Кәримов миңә был хәлде шулай аңлатты: баҡтиһәң, башҡорт айғыры сабышырға йыйылған аттар араһында ҡатнаш ҡанлы аттарҙың барлығын һиҙә лә, улар менән ярышҡыһы килмәй икән. Был хәл мине ныҡ тетрәндерҙе. Ни өсөн тигәндә, беҙ, Евразияла йәшәгән боронғо халыҡтарҙың береһе булһаҡ та, һуңыраҡ осорҙа формалашҡан халыҡтар менән нимәләлер ярышырға теләйбеҙ. Бында айғырҙың ҡылығы беҙҙе шул хаҡта иҫкәртмәйме: беҙ был осраҡта йөҙ йәшлек ҡарттың егерме йәшлек егет менән йүгереп ярышҡан хәлдә түгелбеҙме?**



**Мәрйәм Бураҡаева:** Йәшәү дәүерендә этнос бер нисә фаза аша үтә. Был һорауға яуапты улым Илгизәр әле яңыраҡ икенсе тапҡыр нәшер ителгән "Башҡорт көсө" (Илгизәр Диҡҡәт, 2017) исемле китабында "Боронғо ауаздың шаңдауы" тигән яҙмаһында бик төплө яуап бирә. Ул былай тип яҙа: "Бөйөк ғалим Лев Николаевич Гумилевтың этногенез теорияһы буйынса һәр бер милләт, кеше һымаҡ, тыуа, үҫә, ир ҡорона инә һәм ҡартая... Был осор, йәғни этногенез арауығы, башҡа халыҡтар йәки дәүләттәр тарафынан көсләп йоғонтоға йәки ҡырылыуға дусар булмаһа, 1200 йылдан 1500 йылға тиклем дауам итә. Ошо дәүерҙе йәшәгәндән һуң ул, боронғо әкиәт батыры һымаҡ, өс юл сатына килеп баҫа һәм артабанғы яҙмышын үҙе һайлай". Тимәк, халыҡ үҙ яҙмышын үҙе һайлаған саҡта төрлө шарттарға дусар була. Әйткәндәй, егет ҡоро сағында башҡорттар даланың ғәйрәтле ҡәүеме һаналған, ике ҡитғаны дер һелкетеп тотҡан ҡыпсаҡтарҙы ла йотҡан. Был осорҙа халыҡтың ир-аттары күберәк тыуа. Улар икенсе яҡтан ҡыҙҙарҙы кәләш итеп алырға тырыша.

Ярышыуға килгәндә, беҙ әлеге фазабыҙҙа ярышмайбыҙ, олпатлыҡ беҙҙең ҡанға һалынған барыбер ҙә. Бөгөнгө көндә беҙгә үҙебеҙҙе раҫлау, булған ҡиммәттәрҙе ныҡ тотоу, тыуған еребеҙҙә ышаныслы баҫып тороу, ошо маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн татыулыҡ һаҡлау, бер-беребеҙҙең ҡаҙаныштарын күреү, шәхестәребеҙҙе күтәреү (билдәле: шәхесен күтәрә белгән халыҡ үҙен күтәрә), ҡаныбыҙға һалынған һәләттәрҙе асыу, донъя кимәленә сығыу йүнәлешендә эшләргә кәрәк. Беҙ бит иҫ китмәле бай рухлы, рухи ҡиммәтле халыҡ. Тик үҙ баһабыҙҙы үҙебеҙ генә белеп етмәйбеҙ. Ә үҙ баһаһын белмәгән халыҡ үҙен раҫлай алмай.

Беҙҙең рухи булмышыбыҙ икенсе берәүҙекенә лә оҡшамаған. Милләтте рухи тормош, рухи булмыш бар итә. Әхмәр ҡустым, һин әйткән хәлгә килгәндә иһә, Темәстәге бәйгелә сабышыуҙан баш тартҡан айғыр дөрөҫ эшләгән. Сөнки уға бындай тойомлауҙы, бындай аңды тәбиғәт һалған. Тик бына беҙ, кешеләр генә, үҙебеҙҙең бындай тәбиғи һиҙгерлегебеҙҙе юғалта барабыҙ.

*Бөгөнгө көндә беҙгә үҙебеҙҙе раҫлау, булған ҡиммәттәрҙе ныҡ тотоу, тыуған еребеҙҙә ышаныслы баҫып тороу, ошо маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн татыулыҡ һаҡлау, бер-беребеҙҙең ҡаҙаныштарын күреү, шәхестәребеҙҙе күтәреү (билдәле: шәхесен күтәрә белгән халыҡ үҙен күтәрә), ҡаныбыҙға һалынған һәләттәрҙе асыу, донъя кимәленә сығыу йүнәлешендә эшләргә кәрәк. Беҙ бит иҫ китмәле бай рухлы, рухи ҡиммәтле халыҡ. Тик үҙ баһабыҙҙы үҙебеҙ генә белеп етмәйбеҙ. Ә үҙ баһаһын белмәгән халыҡ үҙен раҫлай алмай.*

**Сабир Шәрипов:** Телевизорҙан туған телендә һөйләшкән 500 кешеһе генә ҡалған халыҡты күрһәттеләр. Беҙ шулай уҡ борон заманда бик көслө ҡәүем һаналып, хәҙер ер йөҙөнән юғалған халыҡтарҙы ла беләбеҙ. XX быуат башында төрөк халҡына яңы өмөт, һулыш биргән Мостафа Кемал менән ырыуҙаш - кирәй ҡыпсаҡ ырыуынан булған. Ул Ғосман империяһы ярсыҡтарын тәшкил итеүсе төрлө халыҡтарҙы берләштереп, Төркиә дәүләтселеген төҙөй, дөйөм алфавит булдыра. Ул күптәрҙе үҙ ҡәүеменә саҡырып ала. Бик күп сауҙагәрҙәр, сәйәсмәндәр уның саҡырыуын ҡабул итеп, Төркиәгә китә. Туҡайҙың "Беҙ китмәйбеҙ" тигән шиғыры тап шул хаҡта. Яныбай ағай Хамматов башҡорттарҙың ҡасандыр 7-8 миллион кешене тәшкил итеүе хаҡында яҙғайны. Тулы тормош менән йәшәгән милләт артырға тейеш бит инде, тик беҙҙә бөгөн әллә ни артым тойолмай. Был уйландырып ҡына ҡалмай, хатта һиҫкәндерә лә.

**Беҙ яңырыу осорон кисерәбеҙ. Сабир ағай һан буйынса артыу мәсьәләһен күтәрҙе. Был йәһәттән шундай бер теориям бар. Боронғо милләттәр һан буйынса артыуҙы маҡсат итеп ҡуймайҙыр ул. Милләттең эсендә ниндәйҙер үҙгәреш бара. Мәҫәлән, үткән быуаттың етмешенсе-һикһәненсе йылдарында ауылдарҙан ҡыҙҙар ҡалаларға китте. Уларҙың күбеһе дөйөм ятаҡтарҙа йәшәп, кейәүгә сыҡмайынса ҡартайҙы. Ҡыҙҙар киткәндән һуң ауылдарҙа ҡалған егеттәр өйләнмәйенсә, һаҡалдары биленә етте. Ҡыҙҙар йәмһеҙ булғаны, бала табырға эшкинмәгәне өсөн йәки башҡа сәбәптән кейәүгә сыҡмай ҡалманы бит инде. Егеттәр ҙә донъя көтөргә эшкинмәгәне, булдыҡһыҙ булғаны өсөн өйләнмәй торманы. Ошо күренештең сәбәптәре нимәлә? Үҙемсә шулай уйлайым: донъяла бөтә нәмә иҫәпле, шул иҫәптән халыҡ өсөн бирелгән йәндәр ҙә һанаулы. Миҫалға Алтын Урҙа империяһын алайыҡ. Үҙ заманында ғәскәренең һаны буйынса донъяла иң ҙуры һаналған, халыҡ мыжғып торған территорияла бөгөн 3 миллион самаһы ғына кеше йәшәй. Рәсәйҙә лә халыҡ һаны кәмей, киләсәктә Ҡытайҙы ла, Һиндостанды ла, Африканы ла шундай уҡ яҙмыш көтә. Ошонан сығып, минең теориям: боронғо халыҡтар һан буйынса артмау иҫәбенә ҡәүемдең йәшәү мөҙҙәтен һуҙмаймы икән?**

**Сабир Шәрипов:** Беҙҙең халыҡтың күп ир-аттары яуҙарҙа, ихтилалдарҙа ҡырылған. Беҙ быға тиклем ауыл иҫәбенә тулылана килә инек. Һуңғы йылдарҙа ауылда йәшәүселәрҙең һаны кәмеүе дөйөм халыҡтың һанында ла сағылыш таба. Башҡалар өсөн нисектер, ауылдарҙың кәмеүе беҙҙең өсөн яҡшыға түгел. Тел дә зәғифләнә, йолалар онотола бара.

**Мәрйәм Бураҡаева:** Әхмәр ҡустым, һин әйткән теория буйынса ҡарағанда, әгәр ҙә халыҡтың һаны тәбиғи юл менән артмай икән, шул уҡ тәбиғәт үҙенә кәрәк саҡта халыҡтың һанын күбәйтә лә алалыр. Әлеге ваҡытта беҙгә күберәген тышҡы факторҙар йоғонто яһай. Беренсенән, булмышыбыҙ иркенлектә йәшәргә өйрәнгән, беҙ ҡала ерлегендә башҡалар менән аралашып йәшәүгә, шунда үҙеңдең ишеңде табыуға ҡулайлашмағанбыҙ, тейбеҙ. Әммә ҡулайлаша барабыҙ бит. Өфөлә күпме башҡорт ғаиләләре теркәлә. Алтмыш биш-етмешенсе йылдарҙа мин Башрадиола йәштәр өсөн тапшырыуҙар әҙерләгәндә, Никах теркәү йортона барып, үҙ-ара өйләнешкән башҡорт ғаиләләре тапмай бер булғайным. Ә хәҙер ҡарайыҡ! Ғаилә байрамдарында ғына ла ниндәйен йәштәр ҡатнаша!

**Сабир Шәрипов:** Беҙҙең халыҡты Сталиндың сәйәси золомо ныҡ киҫә. Ҡайҙалыр уҡығайным, хатта беҙҙең республикаға ике мең кешене иркенән мәхрүм итергә, тигән разнарядка була. Урындағы властар был һанды илле мең кешегә алып барып еткерә, йәғни ошо моментты файҙаланып, милләттең ҡаймағын, зыялыларын юҡ итә. Үкенескә күрә, хәҙерге көндәге күп кенә проблемаларыбыҙ тап ошо факторға бәйле икәнлеген дә танырға мәжбүрбеҙ. Шул уҡ ваҡытта Салауат батырҙар, Зәки Вәлиди, Мортазиндар, Башҡорт ғәскәре айбарлы көрәшмәһә, бөгөн беҙ булыр инекме икән? Ниндәй халыҡҡа әйләнер инек? Шөкөр, бихисап ҡорбан-

# ТУҒАНДАРЫМ -

## тирәһендә ойошайыҡ!

дар аша бөгөнгә хәлгә күтәрелгәнбеҙ, тим.

**Мәрйәм Бураҡаева:** Дөрөҫ. Ошо фекерҙе үҙебеҙгә ҡарата ла ҡулланайыҡ. Йәшәү - ул көрәш, тигән хәҡиҡәт бар. Бөгөнгө көндә лә халҡыбыҙ ете юл сатында тора. Кем дөрөҫ йүнәлеш күрһәтер? Киләсәктә берәү: "Әгәр яҙыусы Сабир Шәриповтар йәки Мәрйәм Бураҡаевалар үҙ ваҡытында шул-шул фекерҙе әйтмәһә, китабында шулай тип яҙмаһа, беҙгә дөрөҫ йүнәлеш күрһәтмәһә, бөгөнгө көндә башҡорт булыр инеме?" - тип, беҙҙең быуынға рәхмәтле булырға тейеш бит! Үҙебеҙҙең ҡулдағы бөтөн сараларҙы: матбуғатты, радио-телевидениены, интернет бәйләнештәрен файында һөйләшергә кәрәктер. Үҙендә башҡорт итеп тойоуын, теленә, милләтенә мөнәсәбәтең мөһим. Башҡорт балаһы үҙенең туған телен, милләтен яратырға, башҡаларға кәмһетергә юл ҡуймаҫҡа тейеш. Таңсулпан ҡыҙымдың иптәштәре килә лә, уға "Таңсулпан" тип һүҙ ҡушһа, яуап бирмәй ҙә ҡуя. "Мин Таңсулпан түгел, ә Таңң-н-н-н-сулпан", - тип өйрәтә ине әхирәттәренә. Был Таңсулпандың үҙенең теленә ҡарата мөнәсәбәте. Беҙең һәр ҡайһыбыҙ үҙ балаларыбыҙға кәмһенмәү тойғоһо һалһаҡ, ғорурлыҡ тойғоһо уятһаҡ, был тел дә һаҡланасаҡ. Рәми Ғарипов әйткәнсә, "Бер телдән дә телем кәм түгел, кәм күрер уны тик кәм күңел". Кәм күңел булмайыҡ. Халыҡтың һан яғынан аҙ йәки күп булыуы теленең бөйөклөгөн йәки түбән кимәлле булыуын аңлатмай. Бөтөн телдәр ҙә тиң!

**▸ Тел мөхитен булдырыу, һаҡлау ауылдарыбыҙҙы һаҡлау менән туранан-тура бәйле. Ауыл мәктәбен һаҡлау өсөн балаларҙың ата-әсәһен эш менән тәьмин итеү тәүшарт. Тимәк, тел мөхитен һаҡлау рухиәт мәсьәләһе булыуҙан тыш, иҡтисад мәсьәләһе лә. Шулай түгелме?**

**Мәрйәм Бураҡаева:** Ата-әсәһенә йәшәү рәхәт булған ауылда балаһы ла йәшәргә ҡала. Шөкөр, мин барған саҡта Ейәнсура районының Ибрай ауылы ике генә урам ине, хәҙер ул дүрт урамлы булып китте. Эш урындары ла юҡ, мал көсө менән йәшәйҙәр, халыҡ шул тиклем татыу, бер-береһенә ярҙамсыл. Ауылда ҡул эштәре лә табалар, ситкә сығып эшләп тә ҡайтыйтығыҙ.

**ҡайтығыҙ. Һис юғы көҙгәгәҙ сереп, тыуған еребеҙгә ашлама булыр", - тигәйне...**

**Мәрйәм Бураҡаева:** Хәҙер ауыл халҡына ашлама ғына кәрәкмәй шул. Уларға ауылдашының тере ваҡытында ярҙамы кәрәк. Әҙәби әҫәрҙәр, осрашыуҙар, байрамдар аша араларҙы һыуытмау сараһы күрергә кәрәк. Дәреслектәргә тарихи романдарҙы тыңҡыслап тултырыусы авторҙар ҙур зыян эшләне. Балалар әҙәбиәттән һыуынды. Үҫә килә әҙәби китап уҡыу, эшкә киткән саҡта үҙең менән яратҡан китабыңды алып китеү тигән ғәҙәт юҡҡа сыҡты.

**Сабир Шәрипов:** Үҙҙәре мәктәптә бер дәрес тә уҡытмаған беҙҙе һаҡлау зарурлығы, Ғафури - халыҡ мәнфәғәтен аңлай белеү өсөн һәр саҡ уның менән бергә булырға кәрәклеге, Рәми Ғарипов - туған телдең әһәмиәте тураһында ниндәйен көслө шиғырҙар яҙып, халыҡтың йөкомһораған зиһенен яҡтыртып ебәрҙе заманында. Әле туған телдең әһәмиәте тураһында туҡтауһыҙ аңлатыу эше алып бармаһаҡ, яҙмышыбыҙ киләсәге томанлы. Һуңғы ун биш-егерме йыл фәҡәт публицистик әҫәрҙәр яҙыу, халыҡ араһында мәғрифәтселек менән шөғөлләнеү менән мәшғүлмен. Әлегә минең башымда шул ғына.

Ер йөҙөндәге бөтә тауышлы йән эйәләре үҙ-ара өн аша ара-

ҙаланып, заманындағы бөйөк зыялыларыбыҙ башҡарғанды дауам итергә тейешбеҙҙәр ул?

**▸ Әгәр ҙә һин сәйәсәт менән шөғөлләнмәһәң, сәйәсәт һинең менән шөғөлләнәсәк, тигән һүҙҙәр бар. Беҙ барыбер ҙә үҙебеҙҙең хоҡуҡтарыбыҙ өсөн көрәшеп йәшәргә бурыслыбыҙ.**

**Сабир Шәрипов:** Сәйәсәт власҡа, фирҡәләргә генә кәрәкмәй. Һәр кеше үҙенсә сәйәсмән ул барыбер ҙә. Әгәр ҙә беҙ һуғыш теләмәйбеҙ икән, был осраҡта ла сәйәсмәнбеҙ. Элек һайлауҙарҙа Мостай Кәримдәр, Рәсүл Ғамзатовтар, Зәһир Исмәғилевтар мотлаҡ сығыш яһап, беҙ уларҙың сығыштарын ҙур тиражлы гәзиттәрҙә баҫа торғайныҡ. Һуңғы һайлауҙарҙа бер яҙыусының да һүҙе яңғыраманы. Беҙҙә лә, Мәскәүҙә лә шул уҡ күренеш күҙәтелде. Күберәген эшләпәле режиссерҙар нотоҡ уҡыны, артистар сығыш яһаны. Был яҡшы күренеш түгел.

**Мәрйәм Бураҡаева:** Шуны әйтәм дә инде. Әммә яҙыусылар әүҙем түгел, тип әйтә алмайым. Әле исемләп һанап китмәһәм дә, улар халыҡ белә һәм уларға рәхмәтле. Халыҡ алдына сығыусы яҙыусылар булды. Һайлауҙарҙа башҡортса бюллетень талап итеү ҙә шул уҡ көрәш. Берәү: "Бөтә нәмә өсөн көрәшәбеҙ, арыным", - тип яҙа интернетта. Мин уға: "Тормош ул үҙе көрәш, көрәшеүҙән арыу - йәшәүҙән арығанһың тигән һүҙ", - тинем.

**▸ Мәрйәм апай, һеҙҙең "Агизел"дең март айында сыҡҡан "Мөхит тәрбиәһе" мәҡәләһе берәүҙе лә битараф ҡалдырмағандыр. Ни өсөн был мәсьәлә үтә лә мөһим. Сөнки башҡорт балалар баҡсаһына йөрөгән, башҡорт мәктәбендә уҡыған балалар урамға сыҡҡас та дөйөм аралашыу теленә күсә лә ҡуя. Бында мөхиттән тыш, тағы ла башҡа шарттар хаҡында ла уйланырға, саралар күрергә кәрәктер.**

**Мәрйәм Бураҡаева:** Бында эске рухи көсөндә арттырыу хаҡлар, ләкин өйҙә Ибрайҙа һалалар. Себерҙә эшләгән егеттәр ярышып бура күтәрә. Һуңғы йылдарҙа ғына ете ике ҡатлы йорт ҡалҡып сыҡты. Тик тырым-тырағай таралып аҡса эшләү, әлбиттә, берҙәмлекте ҡаҡшата, әммә ауылым, милләтем, туғандарым, тигән уртаҡ маҡсат тирәһендә ойошоуҙы көсәйтергә тейешбеҙ.

**▸ Икенсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында сығыш яһаусы Батырхан Мырҙабаев: "Ситтә йөрөһәгеҙ ҙә һис юғы үлергә тыуған яғығыҙға**

әҙәмдәр эшләне инде быны. Уларҙы тыйыусылар булманы. Ул тарихи романдар бик ҡатмарлы, хатта өлкән кешеләр ҙә аңларлыҡ түгел.

**▸ Һуңғы ваҡытта ҡурайыбыҙға дәғүә итеүселәр күбәйҙе. Быға нисек ҡарайһығыҙ?**

**Сабир Шәрипов:** Ҡурай үләненең Уралда ғына үҫкәне, унда башҡорт ҡына уйнағаны һәр кемгә мәғлүм. Ҡаҙаҡ та, татар ҙа ҡурайҙа уйнамаған, юҡ менән булышалар.

**Мәрйәм Бураҡаева:** Ҡурайыбыҙға ғына түгел, һәр төрлө рухи байлыҡтарыбыҙға: йырҙарыбыҙға, бейеүҙәребеҙгә, тарихи шәхестәребеҙгә дәғүәләшәләр. Беҙгә үҙебеҙҙең боронғо йәшәү ҡанунына таянырға кәрәк: кешенекен алма, үҙеңдекен бирмә. Билдәле бит: башҡорт бер кемдең дә ерен баҫып алмаған, фәҡәт үҙенекен бирмәҫ өсөн яуға күтәрелгән.

**▸ Һуңғы ваҡытта һеҙ әҙәби әҫәрҙәр яҙмайһығыҙ, Мәрйәм апай. "Шишмә", "Һылыуҡай", "Йәнтөйәк" һымаҡ әҫәрҙәрегеҙҙе уҡыусы ныҡ һағына. Халыҡтың яҙмышына бәйләп, ошо идеяларығыҙҙы һалып, бер роман яҙһағыҙ булмаймы? Әҙәби әҫәрҙең йоғонтоһо бөтөнләй икенсе төрлө була бит.**

**Мәрйәм Бураҡаева:** Мин шиғыр яҙа белмәйем, шуға ла халыҡтың аңын уятырлыҡ публицистик әҫәрҙәр, ҡыҫҡа фекерҙәр яҙам. Халыҡҡа тос, артабаңғы йәшәйеш өсөн йүнәлеш бирерлек трибун шағирҙар һүҙе кәрәк бөгөн. Аҡмулла - белем алыу мөһимлеге, Бабич - тупраҡты йәғни ере-

лаша. Әгәр ҙә беҙ икенсе телгә күсәбеҙ икән, балабыҙ менән арабыҙға пәрҙә ҡорабыҙ. Беҙҙең өсөн иң тәүҙә өн, моң яҡын, шунан һуң ғына туған телебеҙ килә. Беҙгә фәҡәт үҙ баланды үҙеңдән алыҫлаштырмау өсөн туған өнөбөҙ нигеҙендә бар булған телебеҙҙе өйрәтергә кәрәк. Һәр хәлдә, тәбиғәт тә шулай. Шуға күрә лә минең барлыҡ уйҙарым шул тирәлә әйләнә.



**▸ Ата-әсәһенән алыҫлашҡан бала милләтенән дә алыҫлашамы?**

**Мәрйәм Бураҡаева:** Эйе. Атаәсәһен һанламаған кеше уның телендә һөйләшмәй, милләтен һанламаған кеше халҡы телендә һөйләшмәй. Әле роман яҙыусылар булыр әле, мин иһә халҡыма кәрәк булған публицистика жанрында эшләйем. Әле "Нимә ул туған тел?" тигән яҙмалар өҫтөндә көс түгәм.

**▸ Быйыл март айында үткән президент һайлауында бер эксперт бик ҡыҙыҡлы фекер әйтте. Ер шарында, Рәсәйҙә һан нисбәте буйынса ҡатын-ҡыҙҙар иң күбе иҫәпләнә. Һайлауҙарға ла күбеһенсә улар йөрөй, президенттарҙы ла улар һайлай. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ әүҙем. Беҙҙәге ағинәйҙәр хәрәкәтен генә алайыҡ. Хатта ки, ҡатын-ҡыҙ риза булмаһа, беҙ, ирҙәр уларға өйләнә лә алмайбыҙ. Асылда, ҡатын-ҡыҙ беҙҙе һайлай. Дөйөмләштереп әйткәндә, һайлау хоҡуғына ла улар хужа. Шулай бит, Сабир ағай?**

**Сабир Шәрипов:** Телде лә ҡатын-ҡыҙ ныҒыраҡ һаҡлай. Юҡҡа ғына туған телде әсә теле тип әйтмәйҙәр. Кавказда ҡырҡлаған милләт вәкиле йәшәй, берене лә үҙ телен онотмай. Уларҙа ҡатын-ҡыҙ эшләмәй тиерлек, уның ҡарауы, ғаиләне, йола-традицияларын, туған телен һаҡлай.

**Мәрйәм Бураҡаева:** Иисус Христостың, йәғни Ғайса пәйғәмбәрҙең ҡайтыуы аҡканлы бөтөн телдәргә лә "Библия"ны тәржемә итәләр. Шунда Себерҙәге ҡайһы бер халыҡтарҙың телдәре бөтөнләй юғалғаны асыҡланған. Шул телдәрҙе тергеҙеү маҡсатында Библия институты аҡса бүлә. Эште нимәнән башлағандар? Кухня теленән. Баҡтиһәң, кухняла йөрөгән ҡатын-ҡыҙ милли ризыҡтарҙың, ҡорамалдарҙың атамаларын, эш процесындағы төшөнсәләрҙе туған телдәрендә һаҡлап ҡалған икән.

**Сабир Шәрипов:** Рәсәйҙә лә бар ундай халыҡтар. Ненецтар, шорҙар ныҡ кәмегән, бер нисә ауылда ғына тороп ҡалған.

**▸ Мәрйәм апай, Сабир ағай, яҙмышығыҙ ижад, яҙыусылыҡ юлына бәйле булмаһа, ниндәй һөнәрҙе һайлар инегеҙ?**

**Сабир Шәрипов:** Мин уҡытыусы булыр инем. Юҡҡа ғына иң тәүге уҡыу йортом да педучилище түгелдер. Бала сағымды атайҙарҙың, ағайҙарҙың һал ағыҙғанын күреп, киләсәктә һалсы булырға ла хыялландым. Урман ҡарауылсыһы булып эшләһәм дә үҙ хеҙмәтемә намыҫ менән ҡарар инем. Белоретта мәғдәнсе булып эшләп, байтаҡ ҡына аҡса эшләп ҡайтҡан ағайҙарҙы күреп, мәғдәнсе лә булырға хыялланған саҡтарым булды.

**Мәрйәм Бураҡаева:** Мин дә уҡытыусы булыр инем. Әле лә үҙемдә был һөнәрҙән ныҡ айырылғанмын тип әйтә алмайым. Ҡайһы бер мәктәптәрҙә бер генә йыл эшләп китһәм дә, элекке уҡыусыларым минән: "Апай, һеҙ беҙҙә нисә йыл эшләнегеҙ ул?" - тип һорайҙар. Бындай һорау мине шатландыра. Тимәк, аҙ ғына ваҡытта мин уҡыусыларым күңелендә иҫтә ҡалырлыҡ булып ҡалғанмын.

ШУЛАЙ ИТЕП:

**Халыҡ мәнфәғәтенән айырылған әҙәбиәттең әһәмиәте юҡ. Бигерәк тә милли әҙәбиәт үҙе ижад ителгән телдә һөйләшеүсе халыҡтан, уның көнүҙәк проблемаларынан, рухиәт мәсьәләләренән алыҫ тора алмай. Был - аксиома. Ил инәһе, ил ағаһы йәшенә еткән әҙиптәребеҙгә рух ныҡлығы, ғаилә ҡыуаныстары, ижад шатлыҡтары насип булһын!**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
әңгәмә ҡорҙо.

*Сәйәсәт власҡа, фирҡәләргә генә кәрәкмәй. Һәр кеше үҙенсә сәйәсмән ул барыбер ҙә. Әгәр ҙә беҙ һуғыш теләмәйбеҙ икән, был осраҡта ла сәйәсмәнбеҙ. Элек һайлауҙарҙа Мостай Кәримдәр, Рәсүл Ғамзатовтар, Зәһир Исмәғилевтар мотлаҡ сығыш яһап, беҙ уларҙың сығыштарын ҙур тиражлы гәзиттәрҙә баҫа торғайныҡ. Һуңғы һайлауҙарҙа бер яҙыусының да һүҙе яңғыраманы. Беҙҙә лә, Мәскәүҙә лә шул уҡ күренеш күҙәтелде. Күберәген эшләпәле режиссерҙар нотоҡ уҡыны, артистар сығыш яһаны. Был яҡшы күренеш түгел.*

✓ *"Урал батыр" эпосын башҡарған саҡта Ғәбит Арғынбаевтың ҡобайырҙы һәр саҡ баштан башлауы, бүленгән ерҙән дауам итеп алып китә алмауы, бик ныҡ бирелеп, образға инеп, ым-хәрәкәтләнеп һөйләүен тасуирлап яҙа ғалим.*



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ҠОБАЙЫРҒА

## "Урал батыр" эпосын башҡарыусы балаларҙың

**"Урал батыр" эпосында һүрәтләнгән ваҡиғалар бөтә донъяны һыу баҫҡан дәүер - туфан ҡалҡҡан замандарҙан һуң ер йөҙөндә яңы кешелек цивилизацияһы Уралдан башланыуға ишаралай. Һинд, иран һәм арий халыҡтары үҙҙәренең иң тәү төйәктәре тип Урал тауҙарын телгә ала. Урал тауҙарының Европа-Азия ҡитғаһында иң борон барлыҡҡа килгән ҡарт тауҙар икәне фәнгә билдәле, бер-береһенә ҡатланып өйөлгән Уралтау ҡаяларының полиозей эраһында уҡ диңгеҙ төбөнән ҡалҡҡан һәм күптән һүнгән вулкандарҙан ҡалған тау өйөмдәре икәнен беҙҙең эпос образлы тел менән аңлатырға тырыша. Шулай итеп, башҡорт халҡының донъя барлыҡҡа килеү хаҡындағы аңбелеме, уны күҙ алдына килтереүе, мифологик ҡараштары эпоста сағыла, уның геройҙары халҡыбыҙҙың мифик батырҙары булып тора. Шуға ла "Урал батыр" башҡа эпостарҙан үҙенең донъяуи ҡараштары тәрәнлеге, йыһандағы һәм ерҙәге йәшәү-үлем серҙәрен аңлатыуы менән айырыла. Ул оло тормош һәм кешелек дәреслеген хәтерләтә. "Урал батыр"ҙа һүрәтләнгән ваҡиғалар боронғо Месопотамия һәм Вавилон ерендә, беҙҙең эраға тиклем өс-дүрт мең йыл әүәл йәшәгән Шумер илендә ижад ителгән "Гилгәмеш" эпосындағы хәлдәргә ауаздаш. Был оҡшашлыҡ фәндә билдәле. Урал менән Шүлгән исеме Көньяҡ Уралдағы ер-һыу, тау-таш атамаларында йыш осрай.**

Башҡортостандың халыҡ сәсәне, бөтә тормошон башҡорт халҡының ауыҙ-тел байлығын йыйыуға арнаған бөйөк фольклорсы, драматург, йәмәғәт эшмәкәре Мөхәмәтша Буранғолов (1888-1966) үҙенең туған халҡына иҫ киткес оло бүләк ҡалдыра. Егерменсе быуат башында Рәсәйҙә күтәрелгән милли үҙаң уяныу, халыҡ ижадын һәм тарихын өйрәнеү идеялары менән рухланып, ул башҡорт халыҡ эпостарын, ҡобайырҙарын, дастандарын яҙып ала башлай. Уларҙы яттан һөйләгән ғәжәйеп сәсәндәрҙе эҙләй һәм ғүмерен халыҡ ижадын яҙып алыуға, ташҡа баҫтырыуға, фәнни өйрәнеүгә һәм сәхнәгә сығарыуға бағышлай. Ул Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылында йәшәүсе Хәмит Әлмөхәмәтов (1861-1923) менән уның Иҙрис ауылында йәшәгән кейәүе Ғәбит Арғынбаев (1856-1921) бик оҫта ҡобайырсылар булыуын ишетә. Улар менән аралашыу өсөн ваҡытын да, мөлкәтен дә йәлләмәй. Ошондай һәләтле сәсән һүҙ оҫталарына юлыҡтырған Аллаһы Тәғәләгә мең шөкөрҙәр итә. Танаһын, атын һатып, Баймаҡ яғына юллана, Икенсе Этҡол ауылы янындағы Хәмит утары тип йөрөтөлгән тау башында башҡорт халҡының мәшһүр рухи ҡомартҡыһы "Урал батыр" яҙып алына. Был ваҡиғаның тарихи әһәмиәтен билдәләп ҡуйылған Сәсән ташы әле лә һаҡлана.

Яҙыу машинкаһында латин графикаһы менән 1941 йылда баҫылған "Урал батыр" ҡобайырының төп нөсхәһе, Мөхәмәтша Буранғолов ҡулынан төҙәтмәләр индерелгән килеш, М. Ғафури исемендәге Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты (хәҙерге Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты) Ғилми архивында һаҡлана. Ҡыҙғанысҡа күрә, Мөхәмәтша Буранғоловтың башына төшкән күп һынауҙар сәбәбенәнме, ҡулъяҙма рәүешендәге төп нөхсәһе юғалған. "Урал батыр" ҡобайыры ҡағыҙға төшкәндән илле һигеҙ йыл үткәс кенә 1968 йылда "Ағиҙел" журналында беренсе мәртәбә ҡыҫҡартылып баҫыла. "Урал батыр" ҡобайырының бөгөн киң таралған варианты дүрт мең ярым шиғри юлды (4575 юл) тәшкил итә. 1972, 2007 йылдарҙа эпостың тулы варианты бер нисә мәртәбә донъя күрә.

Хәмит сәсән менән Ғәбит сәсән "Урал батыр" ҡобайырын Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаевтан отоп алыуын әйткән, ә Ишмөхәмәт сәсән үҙенең уҡытыусыһы Айҙар Байыҡ сәсән булыуын әйтеп ҡалдырған. Был сылбырҙа башҡорт сәсәнлек мәктәбенең төп шарты - күсәгилешлек сағыла. Ҡобайыр башҡарыусылар Башҡортостандың төрлө тарафында йәшәгән, бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә торған, кем кемгә өйрәтә, кемдән отоп ала, кемдән ишетә - барыһын да әйтеп һөйләү мотлаҡ булған. Был йоланы тотоу арҡаһында ҡобайырҙар ҡатмарлы замандарҙа ла юғалмаған, ил хәтеренән юйылмаған.

Мөхәмәтша Буранғолов тағы бер нисә йылдар дауамында сәсәндәр менән осраша, 1910-20 йылдарҙа ул Ғәбит Арғынбаевтан бик күп ауыҙ-тел ижады үрнәктәрен яҙып ала - мәшһүр "Урал" йыры, оҙон көйҙәр, "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Ынйыҡай менән Юлдыбай", "Аҡбуҙат", "Алдар менән Зөһрә", "Аҡһаҡ ҡола" кеүек эпик әҫәрҙәр ҡағыҙға теркәлә.

Сәсәндәрҙең эпос, иртәк йә ҡобайыр башҡарыу вәзенен, оҫталығын уларҙы күрепбелгән кешеләрҙең йәки ғалимдарҙың иҫтәлектәре һәм тасуирламаһы аша күҙ алдына килтерәбеҙ. Уларҙың ҡобайыр әйтеүе ғәжәйеп халыҡсан, еңел, шаян һәм хисле була. "Урал батыр" эпосын башҡарған саҡта Ғәбит Арғынбаевтың ҡобайырҙы һәр саҡ баштан башлауы, бүленгән ерҙән дауам итеп алып китә алмауы, бик ныҡ бирелеп, образға инеп, көлгән ерҙә көлөп, бейеп-елкенеп, ым-хәрәкәтләнеп һөйләүен тасуирлап яҙа ғалим. Эпосты бер тында башҡарып ҡарау теләге, мәшһүр ҡомартҡыны ятҡа һөйләгән кешене күреү, үҙ ҡолағың менән тыңлау хыялы Башҡортостан мәҙәниәте һәм матбуғатында уҙған егерменсе быуаттың етмешенсе йылдарынан бирле тулҡына.



Тоталитар режим тарафынан ҡаты тыйылыуға ҡарамаҫтан, артабан күренекле башҡорт ғалимдары Мөхтәр Сәғитов, Әхнәф Харисов, Кирәй Мәргән башҡорт ҡобайырҙарын, иртәктәрен, эпостарын өйрәнә һәм дәреслектәргә индерә. Советтар илендә үҙгәртеп ҡороу елдәре иҫеү менән рухи терелеү, милли йәнлелек башлана. Ғалимдар, шағирҙар, мәғариф һәм мәҙәниәт етәкселәре башҡорт сәсәндәре мәктәбен тергеҙеү хаҡында һүҙ башлай (Р.Т. Бикбаев, Ә.М. Сөләймәнов, М.Б. Юлмөхәмәтов). 1990 йылдың мартында Республика Халыҡ ижады үҙәге (директоры Ю.И. Ғәйнетдинов) Нефтселәр мәҙәниәт һарайы сәхнәһенә бөтә республиканан ҡобайыр һөйләүселәрҙе йыя. Рәшит Әхтәров, Хәнифә Әбүбәкирова, Гөлнур Мамлиева, Әсмә Усманова, Вәсилә Садиҡова, Фәүзиә Юлдашбаева, Гүзәл Халиҡова, Асия Ғәйнуллина һ.б. боронғо әйтеш традицияларын тергеҙә, өлкән быуынға эйәреп, биш йәш шағир - Рәмил Ҡолдәүләт, Рәйес Түләк, Буранбай Исҡужин, Әхмәр Үтәбай, Ғәбиҙулла Зарипов та заман темаларын күтәреп, сәсәнлектә ярыш-әйтештә майҙан тота.

1996 йылдың башында Бөрйән районы Яңы Монасип мәктәбендә "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе уҡыусыларҙың, Иҫке Собханғол ауылында "Һомайғош" фольклор ансамбленең тәүге сығыштары яңғырай (ойоштороусылар - Бөрйәндең мәғариф бүлеге хеҙмәткәрҙәре Клара Байназарова, Роза Ғүмәрова, уҡытыусылар Мәрйәм Ҡәҙерғолова, Марат Муллағолов һ.б.). Шул уҡ йылда Сибай ҡалаһының 13-сө башҡорт мәктәбендә "Урал батыр" эпосын ятҡа һөйләү бәйгеһе үтә (уҡытыусы Асия Ғәйнуллина).

1996 йылдың аҙағында республика музыкаль белем биреү мәктәп-интернатында (директоры Ф.Б.Санъяров, бөгөн Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика мәктәп-гимназияһы) "Урал батыр" ҡобайырын башҡарыусы балаларҙың тәүге ҙур бәйгеһе үткәрелә. Шунан һуң Башҡортостандың мәғариф министры Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисаметдинова "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе уҡыусыларҙың бөтә республика конкурсын иғлан итә.

1997 йылдың февраль айында төбәктәрҙә еңеүсе балалар Өфө дәүләт филармония сәхнәһендә беренсе республика конкурсына йыйыла.

1998 йыл Бөрйәндә район кимәлендә йәнә бәйге үтә.

1999 йылдың июнендә Бөрйән районы Шүлгәнташ мәмерйәһе янында икенсе республика конкурсы ойоштоform рола. Эпос һүҙҙәрен ятлаған балалар Урал батыр, Шүлгән, Һомай, Йәнбикә, Йәнбирҙе образдары аша донъяны сәләмләй. Туғыҙ райондан саҡырылған төркөмдәр араһында Саҡмағош районы Ҡаръяуҙы мәктәбенән килгән балалар беренсе урынды яулай (уҡытыусы Альмира Мәснәүи ҡыҙы Калагаева). Эпосты һөйләү конкурсының шарттары асыҡлана, БДУ доценты Х.М.Әхмәтов сығыш яһаусыларҙы ятланған юлдар һанына ҡарап баһаларға тәҡдим итә.

2000 йылда Бөрйән районы мәғариф идаралығы район күләмендә "Һомайҙа ҡунаҡта" тигән йәнә бер бәйге үткәрә.

Бөрйән районы мәғариф идаралығы һәм Башҡортостандың Мәғариф министрлығы 2001 йылда балаларҙы Бөрйәнгә өсөнсө бөтә республика конкурсына йыя. "Урал батыр"ҙы башҡорт һәм инглиз телдәрендә тулыһынса ятлаған Әбйәлил районы Ҡыҙрас мәктәбе уҡыусыһы Венера Баймөхәмәтова бәйгене яңы баҫҡысҡа күтәрә (уҡытыусылары Мәүжиҙә Баймөхәмәтова менән Тәнзилә Ҡунафина). Дүрт мең биш йөҙ шиғри юлды яттан һөйләү мөмкинлеге иҫбатлана. Был бәйгелә эпостың йөкмәткеһен сәхнәләштереү һәм тыуған яҡ хаҡында ҡобайыр әйтеү шарттары өҫтәлә. "Урал батыр" эпосын ятҡа һөйләгән уҡыусыларҙың республика конкурсы бынан һуң йыл һайын үткәрелә. Унда ҡатнашыу өсөн һәр районда бәйгеләр үтә, иң оҫта һөйләгән уҡыусы һайлап алына. Һәр төбәктән берәр команда туплана. Ко-



# ТЕРЕҢҺЫУ БӨРКӨП...

## республика конкурсы тарихынан

манда визитка программаһын әҙерләй, оҫталыҡтарына ҡарап эпос һөйләүсе, үҙ ҡобайырын әйтеүсе, викторина өсөн яуаплыһы була. Берәй ҡурайсы, бейеүсе, йырсының ҡатнашыуы ла мөмкин була. Конкурс шарттары төрләнә, талаптары арта, әммә уға булған мөнәсәбәт тап Бөрйән конкурсы яулаған үрҙәрҙә ҡала.

2002 йылда Хәйбулла районы Йәнтеш ауылында үткән конкурста Йылайыр районы Һабыр мәктәбе уҡыусыһы Гөлсәсәк Торомтаева Гран-при яулай. Командалар араһында ла ярыш ҡыҙыу бара. Мең километр юл үтеп килгән Тәтешле районы командаһы еңеп сыға.

2003 йылдағы Баймаҡ районы Талҡаҫ күле буйындағы бәйге - дүртенсе республика конкурсы - Эпос байрамына әйләнә. Урал батыр ҡиссаһын боронғо сәсәндәрсә һөйләгән Йылайыр районы уҡыусыһы Айрат Атанғоловҡа Гран-при бүләге тапшырыла. Йылайырҙар икенсе мәртәбә еңеүсе була - икеһен дә Һабыр мәктәбе уҡытыусыһы Фәндизә Ҡудашева әҙерләй. Баймаҡта, эпос ятлауҙан тыш, балалар башҡорт халыҡ ҡобайырҙарына әйәреп, көн ҡағыҙына һуға торған темаға үҙҙәре яҙған ҡобайырҙар менән сығыш яһай.

2004 йылда "Урал батыр" эпосын ятлаған бәйгеселәр Ейәнсура районының йәмле төбәгендә Урта Муйнаҡ ауылы янында палатка лагеры ҡора. Иң оҫта башҡарыусы Миләүшә Ильясова Гран-при ҡотон Ауырғазы районы Төрөмбәт мәктәбенә алып китә (уҡытыусыһы Г. Ильясова).

2005 йылда бәйгеселәр тауыштары Дәүләкән районы Асылыкүл буйында яңғырай. Гран-при бүләге Тәтешле районы уҡыусыһы Әлиә Гәзизоваға бирелә (уҡытыусылары Гүзәл Ғәскәрова менән Руфина Ғәлимйәнова). Башҡорт халҡының "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосы геройҙары өс йөҙләп бәйгесене сәләмләп ҡаршылай (тамашаның етәксеһе Зөләрәм Снегирева). Асылыкүл буйында илле биш команда ярыша, эпосты тулыһынса ятлаған балалар һаны егермәнән арта. Йыл һайын ҡатнашып, ятлаған юлдар һанын арттырып килеүселәр, дүрт-биш йыл рәттән ҡатнашҡан бәйгеселәр барлыҡҡа килә. "Урал батыр" башҡорт телендә уҡыған ауыл йәки ҡала мәктәптәрендә берҙәй өйрәнелә алыуы раҫлана. Әҫәр буйынса әҙерләнгән викторина бәйгеселәрҙең уны тәрән аңлауын, башҡорт әҙәбиәте һәм Башҡортостан тарихы буйынса белемдәрен сағылдырған яңы һынау була.

Бәйге 2006 йылда Миәкә районында үтә. Гран-при бүләгенә Хәйбулла районы Әбеш мәктәбе уҡыусыһы Александр Щуплов лайыҡ була (уҡытыусыһы Әминә Юнысова). Миәкәләге йыйын бөйөк башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 175 йыл тулыуға бағышлана. Конкурстың икенсе турында Урал батыр ауазының дауамы - Аҡмулла шиғырҙарын ятлаған балалар абруйлы жюри алдында имтихан тота. Беренсе урынға - Рида Тимершәйехова (Илеш районы), икенсе урынға - Эльвина Ҡыямова (Асҡын районы) лайыҡ була.

2007 йылда "Урал батыр" эпосын башҡарыусылар Стәрлебаш районында йыйыла. Был юлы Гран-при ҡотон Баймаҡ районы Кәрешкә мәктәбе уҡыусыһы Вәсилә Ҡаҙарбаева яулай (уҡытыусыһы Янылбикә Вәлишина). Стәрлебаштағы йыйын Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 75 йыл тулыуға арнала. Урал батыр рухлы һүҙ оҫталарының ижадына эпос бейеклегенән ҡарап баһа бирелә, Урал батырҙың бөгөнгө фекерҙәштәре, Башҡортостан бәхете, шәхес азатлығы өсөн янған шәхестәрҙең эшмәкәрлеге алға ҡуйыла.



2008 йылда Стәрлетамаҡ ере унынсы республика бәйгеһен ҡабул итә. Гран-при бүләгенә Илеш районы, Үргә Йәркәй 1-се урта мәктәбе уҡыусыһы (уҡытыусылары Ғәлиә Мөхәмәтова менән Ғәлимә Ғәлиева) Рида Тимершәйехова лайыҡ булла. Бәйгенең юбилейы хөрмәтенә тантаналы кисә уҙғарыла, театрлаштырылған тамаша ҡуйыла (ҡуйыусы режиссёр Альмира Ҡыуатова, сценарий авторы Сәрүәр Сурина, ойоштороусы Эльвера Ишемғолова).

2009 йылда эпос көндәре - ун беренсе республика конкурсы Бәләбәй районына күсә. Гран-при Дыуан районынан Зөлфирә Таһироваға бирелә. Өфө ҡалаһы, 136-сы башҡорт лицейы уҡыусыһы Йәмил Нәмаҙбаевтың эпосты башҡарыу оҫталығы бәйгене яңы баҫҡыска күтәрә, Йәмилгә Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимовтың маҡтау хаты һәм махсус бүләге - ноутбук тапшырыла (уҡытыусыһы Гөлнур Зарипова). Бәләбәйҙәге бәйгелә Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Рәшит Ниғмәти менән Баязит Бикбай ижады буйынса викторина ла үтә.

2010 йылда Дәүләкән районында ун икенсе республика конкурсы үткәрелә. Гран-при - Ишембай ҡалаһы, З. Вәлиди исемендәге 2-се республика башҡорт гимназия-интернаты уҡыусыһы Рәсилә Хисмәтуллинала.

2011 йылда ун өсөнсө республика конкурсы Туймазы районы Ҡандракүл буйында үтте. Гран-при яулаусы - Хәйбулла районы Әбеш мәктәбе уҡыусыһы (уҡытыусыһы Әминә Юнысова) Гәзиз Әлмөхәмәтов.

2012 йылда "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе балаларҙың ун дүртенсе республика конкурсы Сибай ҡалаһы янында - Ирәндек тауы буйында, "Юлдаш" балалар ял лагерында ойошторолдо. Гран-при бүләген яулаусы сәсәнһүҙ оҫтаһы - Инсаф Йәмилев (уҡытыусыһы Фәүзиә Ишкинина). Инсаф Йәмилевҡа Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың "Мәғариф" Өҫтөнлөклө милли проекты буйынса "Һәләтле йәштәргә дәүләт ярҙамы" премияһы бирелде. Гран-при яулаған йәш ҡобайырсылар Башҡорт дәүләт университетының, Башҡорт дәүләт педагогия институтының филология факультетына имтиханһыҙ уҡырға инеү мөмкинлеген алды.

Баймаҡ районы Талҡаҫ күле янындағы "Орлёнок" ял-һауыҡтырыу лагерында 2013 йылда уралбатырсылар ун бишенсе йыйынға йыйылды. Гран-при - Ишембай ҡалаһындағы Республика кадет мәктәбендә уҡыусы Ислам Төхфәтуллинда. Унан алдағы бәйгелә ул беренсе урынды яулағайны.

2014 йылда Бөрйән районы ҡобайыр башҡарыусыларҙы йәнә үҙенә йыйҙы. Ун алтынсы конкурстың Гран-при бүләген Салауат районы Әлкә мәктәбенән Илнар Зарипов яуланы.

2015 йылда Бөрйәндә ун етенсе конкурс үтте. Гран-при лауреаты - Зарема Әминева (уҡытыусыһы З.А. Әминева). Зарема - Учалы районы Мулдаҡай ауылы ҡыҙы, ул үҙенең тәжрибәле һәм оҫта ҡобайырсы икәнен иҫбат итеп, бернисә йыл рәттән унышлы бәйге тота килде.

2016 йылда Бөрйән ун һигеҙенсе бәйгене ҡаршыланы. Гран-при бүләген Гөлфрүз Хисмәтуллина яуланы. Ишембайҙағы Ә.-З. Вәлиди исемендәге башҡорт гимназия-интернатында уҡыған Гөлфрүздең (уҡытыусыһы Фаягөл Әмирханова) апаһы Рәсилә Хисмәтуллина 2010 йылда Дәүләкән районында үткән бәйгелә еңеүсе булғайны (уҡытыусыһы Рифат Әйүпов). Бәләкәй төркөмдәге балалар араһында Учалы ҡыҙы Ләйсән Золотарева бар халыҡты таң ҡалдырҙы.

2017 йылда Бөрйәндә үткән ун туғыҙынсы бәйгелә Баймаҡ районы Кәрешкә ауылынан Гөлнара Ҡаҙарбаева Гран-при яуланы. Ул 2007 йылда Стәрлебашта еңеп сыҡҡан Вәсилә Ҡаҙарбаеваның һеңлеһе. Бер ғаиләнән йәнә ике ҡобайыр оҫтаһы!

Шулай итеп, ҡобайырсы балаларҙың республика бәйгеләре Бөрйән (1998, 2001), Хәйбулла (2002), Баймаҡ (2003), Ейәнсура (2004), Дәү-ләкән (2005), Миәкә (2006), Стәрлебаш (2007), Стәрлетамаҡ (2008), Бәләбәй (2009), Дәүләкән (2010), Туймазы (2011) райондарында, Сибайҙа (2012), Баймаҡта (2013), Бөрйәндә (2014, 2015, 2016, 2017) үтте. Эпосты ятлау, сәхнәләштереү, ҡобайыр башҡарыу вәзен-алымын өйрәнеү киң үҫеш алды. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы (министрҙар - Фирҙәүес Хисаметдинова, Ғәлиә Мөхәмәтйәнова, Зөһрә Рәхмәтуллина, Зиннәт Аллаяров, Әлфис Ғаязов, министрлыҡ хеҙмәткәрҙәре - Миндебай Юлмөхәмәтов, Артур Сурин, Зилә Яппарова, Рәйсә Күзбәкова, Салауат Кәримов), Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Башҡорт дәүләт университеты һәм Башҡорт дәүләт педагогия университеты ғалимдарынан абруйлы жюри тупланды (даими рәйесе - Әхмәт Сөләймәнов, баһалама төркөмө - Салауат Ғәлин, Мирас Иҙелбаев, Розалия Солтанғәрәева, Ғәйнислам Ибраһимов, Ғиниәт Ҡунафин, Әхмәт Дәүләтҡолов, Сәлимә Таһирова, Ғәлимә Ғәлина, Азамат Юлдашбаев, Гөлнур Хөсәйенова).

Эпик тере һүҙ үлемһеҙ һәм терелтер көскә эйә. "Урал батыр" эпосын яттан һөйләгән балаларҙың сәсәнлек традицияларын яңыртыуы заманса мәҙәни күренеш. Тарих тәғәрмәсе кире әйләнмәгән кеүек, боронғо сәсәндәрҙе ҡабатлау мөмкин түгел, әммә үлемһеҙ һүҙ һәм фекер ҡала, тел һәм рух йәшәй. Башҡорт халҡының ижади ҡеҙрәтен туплаған ҡобайырҙы һәр яҡлап өйрәнер ғалимдарыбыҙ - тарихсы, философ, социолог, психолог, географ, археолог, ботаник, табиптар бөгөн үҫә. "Урал батыр" эпосын белгән, ятлаған, уның асылын аңлаған балалар үҙҙәренең тормош асылын да табыр, кешелекте Урал батыр саҡырған яҡтылыҡҡа әйҙәр, Урал батыр кеүек тыуған илен һәм ерен һаҡлаусы быуын үҫер, тип ышаныс килә.



**Сәрүәр СУРИНА,**
**"Урал батыр" бәйгеһенең телевизион йылъяҙмаһы авторы (1994-2014 йй.)**

✓ *Сифатлы итеп әҙерләнгән үлән сәйҙәре менән магазин сәйҙәре ярыша ла алмай. Шулай уҡ, дарыу итеп ҡулланыу маҡсатында, махсус үҫемлектәр менән төрләндереп, дауалаусы сәй ҡушылмалары әҙерләргә мөмкин.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨНӨҢДӨ... туңдырманан башла

■ Дарыухананан үҙ-аллы дарыу һатып алып, баланы дауалауҙан тыйылығыҙ, ти табиптар. Был бигерәк тә йүткереүҙе дауалай торған дарыуҙарға ҡағыла. Бала организмы өлкәндәрҙекенән айырыла, улар дарыуҙарҙың кире тәьҫирен күпкә ауырыраҡ кисерә. Дрейк университеты фармакология профессоры Эдвард Белл ата-әсәләргә ошондай кәңәш менән мөрәжәғәт итә. Бала өлкән кешегә ҡарағанда йылына 6-10 тапҡыр йышыраҡ һыуыҡ тейҙереп ауырый. Был мәлдә баланың танауы тона, ул йүткерә, температураһы күтәрелеүе лә бар һәм ғәҙәттә, ауырыуҙың дөйөм оҙайлығы 7 көндән 10 көнгә тиклем дауам итә. Шуға ла бала гел ауырый кеүек тойола. Ата-әсә тиҙ генә уны дауаларға ла тотона һәм иң тәүҙә дарыу һатып ала. Рецептһыҙ һатылған күп кенә препараттар тиҙ арала йүткереү һәм һыуыҡ тейеү билдәләренән ҡотолдорорға вәғәҙә итә. Тик 12 йәше тулмаған балаларға уларҙы биреү бөтөнләй ярамай, ти ғалим. Был препараттар тейешенсә клиник тикшереү үтмәй, тимәк, бала организмына кире тәьҫире лә өйрәнелмәй. Йәғни, дарыу бирәм, тип, балағыҙҙы ағыулап ҡуйыуығыҙ бар.

■ Сыр кальций һәм B12 витаминына бай тәмле һәм файҙалы ризыҡ. Ул ҡартайыу процесын да яйлата икән. Ғалимдар һуңғы тикшеренеүҙәр сиктәрендә үңәҙле сыр берләшмәләренең тәьҫирен һынаған. Һүҙ спермидин тигән берләшмә тураһында бара, уның емеш себендәренең һәм ҡорттарҙың ғүмерен оҙайтыуы хаҡында белгестәр күптән белдергәйне. Был юлы был берләшмәне сысҡандарҙа һынап ҡарағандар. Бер төркөмгә спермидин өҫтәлгән һыу эсергәндәр, икенсеһенә - ябай һыу. Һөҙөмтәлә, тәүге төркөмдәге сысҡандарҙың ғүмере күпкә оҙайған. Берләшмә йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртҡан һәм ҡан баҫымын түбәнәйткән. Етмәһә, ул аутофагия процесын әүҙемләштергән, һөҙөмтәлә күҙәнәктәр токсиндарҙан таҙарынып, зарарланған өлөштәрен яңынан эшкәрткән. Аутофагия - күҙәнәктең һәм уның эшмәкәрлегенең ғүмерен ярайһы оҙайта, тимәк, ҡартайыуҙы ла әкренәйтә. Тағы бер тикшеренеү күрһәтеүенсә, көн һайын 80 грамм майлы сыр ашау "файҙалы холестерин" кимәлен күтәрә.

■ Иртәнге ашҡа туңдырма ашағыҙ, шул саҡта һеҙ аҡыллыраҡ буласаҡһығыҙ, ти Токио университеты ғалимдары. Туңдырма кешегә иғтибарын тупларға ярҙам итә һәм, әлбиттә, кәйефен дә күтәрә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар уянғас та туңдырма ашарға тейеш була. Бынан һуң уларҙың аҡыл кимәле компьютерҙа тикшерелә. Икенсе төркөм ғәҙәттәгесә иртәнге аш ашай. Тәүге төркөмдөң һөҙөмтәләре һәр ваҡытта ла яҡшыраҡ булып сыға. Улар мәсьәләләрҙе тиҙерәк сисә. Мейе әүҙемлеген тикшереп өйрәнгәндән һуң, туңдырма ашағандан һуң юғары тибрәлештәге альфа-тулҡындар әүҙемерәк булыуы асыҡлана. Улар кеше тыныс мәлдә, зиһене асыҡ саҡта күберәк була.

ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ

**Донъяның ғүмер өсөн хәүефле булған төрлө хәл-ваҡиғаларына тарып тора кеше. Аҙашҡанда бирешмәҫ өсөн булһа ла һәр кем эйә булырға тейеш белем даирәһе бар. Шуның береһе ашарға яраҡлы үҫемлектәрҙе таный һәм таба белеү. Гәзиттең 14-се, 22-се һандарындағы "Шифа" битендә аш һәм салаттар өсөн ҡулланыла торған үҫемлектәргә арналған кәңәштәр баҫылғайны, был юлы иһә сәй әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән үләндәрҙе барлап сыҡмаҡсымын.**

# ТӘБИҒӘТТӘ ШУНДАЙ РИЗЫҠТАР БАР

## Үлән сәйҙәре өсөн үҫемлектәр:

**Турғай еләге** - япраҡтары (земляника лесная)
**Ер еләге** - япраҡтары (клубника)
**Ағас еләге** - япраҡтары (малина)
**Гөлйемеш** - япраҡтары (шиповник)
**Сейә** - япраҡтары (вишня)
**Боланут** - япраҡтары, бөрөһө (кипрей узколистный)
**Ҡара көртмәле** - япраҡтары (черника)
**Ҡарағат** - япраҡтары (смородина)
**Кесерткән** - япраҡтары (крапива)
**Мәтрүшкә** - япраҡтары, сәскәләре (душица обыкновенная)
**Һары мәтрүшкә** - япраҡтары, сәскәләре (зверобой продырявленный)
**Аҡ мәтрүшкә** - япраҡтары, сәскәләре (котовник)
**Кейәү үләне** - япраҡтары, сәскәләре (тимьян, чабрец)
**Йүкә** - япраҡтары, сәскәләре (липа)
**Мелисса** - япраҡтары, сәскәләре (мелисса лимонная)
**Бөтнөк** - япраҡтары, сәскәләре (мята)

## Сәй әҙерләү ысулы

**Бәҫәртеү:** сәй өсөн үләнде 5 сантиметр ҡалынлыҡта, бер тәүлек тирәһе күләгәлә һулытып, бәҫәртеп һалып ҡуялар.

**Ыуыу:** саҡ ҡына һуты сығырлыҡ итеп ыуалар.

**Ферментлаштырыу:** ыуылған үҫемлектәрҙе 5 сантиметрға тиклем ҡалынлыҡта йәшниккә йәки табаға һалалар, еүеш сепрәк ҡаплап, 6-10 сәғәткә 26°С температурала тоталар.

**Киптереү:** ферментлаштырылған үләнде 100°С температурала 40 минут тирәһе киптерәләр (мейестә, духовкала).

Сәйҙе бер үҫемлектән йәки бер нисә үҫемлекте ҡушып эшләргә була. Сифатлы итеп әҙерләнгән үлән сәйҙәре менән магазин сәйҙәре ярыша ла алмай. Шулай уҡ, дарыу итеп ҡулланыу маҡсатында, махсус үҫемлектәр менән төрләндереп, дауалаусы сәй ҡушылмалары әҙерләргә мөмкин.

## Мәҫәлән, әҙ ҡанлылыҡтан сәй составы:

**Турғай еләге япраҡтары** (земляника лесная) - кобальт, тимергә, фолий кислотаһына бай.

**Шартый еләк япраҡтары** (клубника) - тимергә, фолий кислотаһына бай.

**Ағас еләге япраҡтары** (малина) - фолий кислотаһына, B12 витаминына (цианкобальтамин) бай. Тимер, баҡыр иондары сығанағы.

**Әлморон йәки гөлйемеш япраҡтары** (шиповник) - фолий кислотаһы, кальций, тимер, баҡыр тоҙҙары сығанағы.

**Сейә япраҡтары** (вишня)- фолий кислотаһы, тимер, баҡыр иондары сығанағы.

**Боланут япраҡтары, бөрөһө** (кипрей узколистный) - кальций, тимер, баҡыр тоҙҙары сығанағы.

**Ҡара көртмәле япраҡтары** (черника) - кальций, тимер, баҡыр тоҙҙары сығанағы.

**Ҡарағат япраҡтары** (смородина)- кобальт, баҡыр, тимер сығанағы.

**Кесерткән япраҡтары** (крапива)- тимер, кальций тоҙҙары, викасол сығанағы.

**Туғай клеверы** - B12 витаминына бай (цианкобальтамин).

**Ҡандала үләне сәскәһе, япраҡтары** (донник лекарственный) - кальций, тимер, баҡыр тоҙҙары сығанағы.

**Ҡара мышар** (арония) - тимер, баҡыр иондары сығанағы.

**Крыжовник япраҡтары** - тимер, баҡыр иондары сығанағы.

## Үҫемлектәрҙән - кофе:

**Бәпембә** тамырынан кофены алыштыра алырлыҡ эсемлек әҙерләп була. Бәпембә тамырының составында 5 процент аҡһым, 2 процент алма кислотаһы, 10 процент шәкәр һәм 53 процент тирәһе инулин бар. Ҡыҙҙырғанда инулин шәкәргә тарҡала.

Кофе әҙерләү өсөн **цикорийҙы** ла файҙаланып була. Был үҫемлек тә ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенән. Зәңгәр төҫтәге сәскәләре кәрзинкәгә йыйылған. Һабаҡтары ҡытыршы. Бейеклеге 1,5 метр тирәһенә етә. Ланцет формаһындағы япраҡтарының ситтәре осло тешле. Июнь-июлдә сәскә ата. Юл ситтәрендә үҫә. Цикорийҙың тамырынан шәкәр алалар, спирт ҡыуалар. Хәҙерге көндә цикорийҙың йыуан тамырлы культуралы сорттары бар.

**Имән сәтләүеге.** 1 кг киптерелгән имән сәтләүегендә 45 г аҡһым, 40 г май, 610 г углевод, 50 г күҙәнәклек, шулай уҡ танин, флавонол кварцетин (антиоксидант, шешенеүҙе, елһенеүҙе, тартылыуҙы кәметә, диуретик үҙенсәлектәргә эйә. Кеше өсөн кварцетин ағыулы, әммә ебеткәндә йә йылытҡанда ул тарҡала) барлығы асыҡланған. Имән сәтләүегендә PP һәм B төркөмөндәге витаминдар, кальций, магний, калий, тимер, фосфор тоҙҙары, цинк, баҡыр, марганец микроэлементтары бар.

Ҡыҙҙырылған **томбойоҡ** орлоҡтарынан да кофе әҙерләп була.

## Әҙерләү

**Бәпембә** тамырын буйына ҡырҡалар йәки айыралар һәм киптерәләр. Унан ҡыҙарғансы һәм кетерләгәнсе ҡыҙҙыралар. Ҡыҙҙырылған бәпембә тамыры татлы була. Уны сәйгә ҡушып эсергә лә, онтаҡ эшләп, кофе урынына ҡулланып та була. Сөнки бәпембә тамырындағы шәкәр ҡыҙҙырғанда карамелгә әйләнә. Эсемлеккә кофе төҫөн һәм тәмен бирә.

Халыҡ медицинаһында бәпембәне йоҡоһоҙлоҡтан ҡулланалар. Шулай уҡ уны "йәшәү эликсиры" тип һанайҙар. Бәпембә үпкәләрҙе таҙарта, һары ауырыуынан дауалай, ҡан баҫымын кәметә һәм аш һеңдереү процесына ыңғай йоғонто яһай.

Цикорий һәм бәпембә тамырҙарына ныҡ итеп ҡыҙҙырылған имән сәтләүектәрен ҡушып та тәмле кофе эшләргә мөмкин. Сәтләүек ҡыуағының емештәренән эшләнгән һөт тә ҡушһаң, бик тә тәмле, туҡлыҡлы һәм шифалы эсемлек килеп сыға. Кофе өсөн имән сәтләүектәрен ҡабығынан әрсеп, ҡыҙарғансы (ҡарайтырға ярамай) ҡыҙҙыралар һәм онтаҡ эшләп файҙаланалар.

**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА.**
**Бөрйән районы Байназар ауылы.**
**(Дауамы. Башы 14-се, 22-се һандағы "Шифа" битендә сыҡты).**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҮЛӘН ЙЫЯ БЕЛӘҺЕҢМЕ?



**Үлән йыйыуҙың дөйөм ҡағиҙәләре бар. Уларҙы тик ҡоро, ҡояшлы көндә, ысыҡ йәки ямғырҙан һуң үләндәр кибенгәс кенә йыйырға кәрәк.**

Йонсоу көндә йыйылған үҫемлектәр файҙалы өлөшсәләрен юғалта, тиҙ күгәрә, һаҡлауы ауыр. Әлбиттә, тамырҙарҙы, бүлбеләрҙе болотло көндә лә ҡаҙырға була. Сәскәләрҙе яңы атҡан сағында һабағы менән бергә өҙөп алырға кәрәк. Япраҡтарҙы үҫемлек сәскәгә тумаланғас һәм сәскә атыу мәлендә, иҫке, һарғайғандарынан айырып, йәшелдәрен генә йыялар. Емеш һәм орлоҡтарҙы өлгөрә барған берен ҡарап, һутлы емештәрҙе - иртә таңдан йәки кискә табан йыялар.

Һабаҡтарҙы япраҡ һәм сәскәләре менән бергә ҡайсы ярҙамында ҡырҡырға йәки ураҡ менән урырға була. Йыйғанда үләндәрҙе бик баҫҡыламай ғына кәрзингә һала барығыҙ. Тамырҙарҙы (бүлбеләрҙе) ҡаҙып алғас, тупраҡтан таҙартып, һалҡын һыуҙа сайҡап, үлән йәки тоҡ өҫтөнә һалып киптерәләр.

Файҙалы матдәләр һаҡланһын өсөн йыйылған үләндәрҙе дөрөҫ киптерергә лә кәрәк. Ғәҙәттә, үләндәрҙе 1-2 сантиметрҙан да бейек итмәй йәйеп һалып, сарҙаҡта, ылашта, яҡшы елләтелгән урында киптерәләр. Үләндәрҙе, бушаҡ бәйләмдәргә бәйләп, сарҙаҡҡа элеп тә киптереп була.

Әгәр япраҡ һәм сәскәләре уҫҡа ыуғанда ваҡланһа, емештәр таралып торһа - тимәк, яҡшы кипкән.

Кипкән үҫемлектәр ҡараңғы, ҡоро урында, таҙа һәм ныҡ ябылған һауыттарҙа һаҡланырға тейеш. Еҫе ныҡ таралған үләндәрҙе еҫһеҙҙәренән айырым һалығыҙ. Дөрөҫ һаҡлағанда, сәскә, япраҡ, үләндәрҙе - 1-2, ә тамыр һәм бүлбеләрҙе 2-3 йыл буйы ҡулланырға мөмкин.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ҺӨҘҺӨТ - УРМАН ЙӘМЕ



**Башҡортостан урмандарында йәй осоронда бик матур ҡусмә ҡош йәшәй. Ул һөҙһөт тип атала. Урыҫтар уны удод ти.**

Был ҡошто башҡалар менән бутарлыҡ түгел. Берҙән, уның суҡышы бигерәк оҙон. Бер аҙ алға табан бөгөлгән суҡыштың оҙонлоғо 5 см-ға хәтлем барып етә. Икенсенән, был ҡоштоң башында 10 см-ға еткән матур ғына тажы бар. Был таж 15 см-ға ҡәҙәре йәйелә. Ә былай һөҙһөт үҙе әллә ни ҙур түгел. Беҙ белгән күгәрсендән әҙ генә бәләкәйерәк. Төҫө ҡыҙғылт-һары, ҡорһағы аҡ. Күп осраҡта ағас ҡыуышлыҡтарында оя ҡора.

Исеме һөҙһөт булһа ла, һөт эсмәй был ҡош. Зарарлы бөжәктәр менән туҡланып, урманға ҙур файҙа килтерә ул. Тауышы тоноҡ. Уның, һөҙ-һөҙ-һөҙ-һө-ө-ө-ө-т, тип ҡысҡырған тауышы бик алыҫҡа ишетелә. Әйткәндәй, был ҡошҡа арнап сығарылған йомаҡ уның туҡланыуы һәм үҙенсәлекле тауышы менән бәйле.

*Ҡатыҡты ла ул эсмәйҙер*
*Эсмәйҙер ул һис һөт.*
*Һөҙ һө-ө-ө-өт! - тип оҙаҡ өндәй*
*Тажлы баш ҡош һөҙһөт.*
*(Ғүмәр Ғайсин).*

Мосолмандарға һөҙһөткә һунар итеү тыйылған. Уның ите харам булып иҫәпләнә. Был ҡош тураһында Фурҡан (ямандан яҡшыны айырыусы Китап) сүрәһендә ошолай тип телгә алына.

Ул (Сөләймән) ҡоштарҙы күҙҙән кисергәс:

- Ни өсөндөр һөҙһөттө күрмәйем. Әллә ул юғалып ҡалдымы? - тине. - Һәр хәлдә, мин уға ҡаты яза бирәсәкмен йәки уның башын сабып өҙҙөрәсәкмен, әгәр ҙә ул ни өсөн килмәгәнен аҡларлыҡ асыҡ дәлил килтермәһә.

Оҙаҡ та уҙмаҫтан, Һөҙһөт килеп етте һәм әйтте:

- Мин һин белмәгән нәмәне беләм, - тине. - Сәбәнән мин һинә бик тә мөһим бер хәбәр килтерҙем; хаҡтыр, мин шунда батшалыҡ итә торған бер ҡатынды осраттым. Уның бөтөн нәмәһе бар. Ул бик ҙур тәхеткә эйә; улар Аллаһ урынына Ҡояшҡа табына торған халыҡ. Яман ғәмәлдәрен матур күрһәтеп, шайтан уларҙы юлдан яҙҙырған. Шунлыҡтан улар тура юлды тапмай; күктәрҙә һәм Ерҙәге асыҡ һәм йәшерен нәмәләрҙең бөтәнөһөн белеп тороусы Аллаһҡа улар сәждә итмәй; бөйөк Ғәрештең хужаһы, Үҙенән башҡа һис бер тиңе булмаған Аллаһ - берҙән-бер Илаһ (тип танымай).

Сөләймән әйтте:

- Ҡарап ҡарайыҡ, һин дөрөҫөн һөйләнеңме, әллә ялғанланыңмы? - тине. - Һин ошо хатты алып кит, уларға тапшыр. Бер аҙ ваҡыт яуап көт. Нисек яуап бирерҙәр икән?

Күреүебеҙсә, был сүрәлә һөҙһөт илсе хеҙмәтен үтәй.

Һөҙһөт Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән. Был ҡош беҙҙә йәй осоро ғына йәшәй. Көҙ йылы яҡтарға осоп китә ул. Беҙҙең тәбиғәтте күпкә күркәм итеп ебәргән һөҙһөткә беҙҙең урмандарҙы йыл да үҙ итергә насип итһен.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# РАМАҘАН АЙЫ...

## күңелдәрҙе нурланы

**Бала саҡтың яҡты хәтирәләре күңелде йылыта. Ана шундай яҡты бер хәтирә минең ҡәрсәмдең (ҡартәсәйемдең) ураҙа тотоуы менән бәйле.**

Миңә биш йәштәр самаһы. Уянып киттем. Ҡәрсәм урындыҡ ситендә самауыр борлатып сәй эсеп ултыра. Тышта ҡараңғы, ә өй эсе нур менән тулы. Бала саҡта Рамаҙан айының нурын күрәһең икән ул! Мин, тороп, ҡәрсәм эргәһенә барып ултырам. Ул миңә сәй яһай. Рәхәтләнеп сәй эсәбеҙ. Ризыҡтар шундай тәмле!..

Аҙаҡ һәр саҡ ошо кисте эҙләнем. Үҙем байтаҡ йылдар ураҙа тотам. Ләкин ҡәрсәм менән сәхәр эскән шул төн миңә һәр саҡ етмәй. Ҡәрсәм: "Сәхәргә торғас, бөгөн көндөҙ ашама, йәме", - тине. Ҡабат ятып, йоҡонан торғас, байтаҡ уйнағас, мин асыҡҡанымды тойоп, ашарға ултырҙым. Ҡәрсәм күрһә лә, бер нәмә лә өндәшмәне. Ғәҙәттә, үҙен тыңламаһалар, ул беҙҙе ороша торғайны. Был юлы шелтә булмауы шулай уҡ мине ғәжәпләндерҙе. Ләкин был хәл минең хәтеремдә мәңгелеккә уйылып ҡалды. Рамаҙан айының мөғжизәле, йылы, яҡты икәнен шул саҡта аңланым.

Ҡасандан бирле ураҙа тотаһың, тип һораған кешеләр ҙә бар. Ҡырҡ йыллап була инде. Элегерәк минең эргә-тирәлә ураҙа тотҡан кешеләр юҡ та ине. Белһәләр, ғәжәп итәләр ине. Бөгөн ураҙа тотоусылар һаны күп. Мин ошондай үҙ үҙгәрештәрҙең булыуына ҡыуанып бөтә алмайым. Бер кешенең ғүмерендә булған бындай хәлдәр, йәғни Ислам диненә ҡайтыусыларҙың бермә-бер артыуы милләттең киләсәгенә өмөт менән ҡарарға яраймы итә, әлхәмдулиллаһ!

Үҙемдең туғандарымдың балалары ла ураҙа тота. Уларҙы иман юлына баҫтырыуҙа минең әсәйемдең, йәғни уларҙың ҡәрсәләре-өләсәләре шулай уҡ ҙур роль уйнаны. Быуындар бәйләнеше шулай дауам итергә тейеш. Ураҙа беҙгә фарыз ителгән, Аллаһы Тәғәләнең кешеләргә әмере. Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанды үтәй алыуҙан да оло бәхет бармы икән? Юҡ, әлбиттә. Мин һеҙгә быуна ошо бәхетте теләйем.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

**Ғалимдар, тормошта һәр кемдең үҙ өлөшө бар, тип өйрәтә. Берәүҙәр "Өлөшөмә тейгән көмөшөм" тип, барына шөкөр итеп, бары менән байҙарса йәшәй белә. Икенселәр әллә күпме малы булып та, аҙмышына зарланыуҙан туҡтамай, уға күберәк кәрәк - күңелен көнсөллөк, ҡомһоҙлоҡ арбап ала, ҡулына күберәк эләктереп ҡалыу өсөн ул кеше хаҡына инеүҙән дә тартынмай, урлашыуға, талауға, ҡан ҡойоуға, йән ҡыйыуға бара.**

# ҠОМҺОҘ БУЛМА

Ҡомһоҙлоҡ хужа булып алған йәмғиәттә ғәҙел була белмәүҙәргә юл асыла, именлек, татыулыҡ юҡҡа сыға. Рухи ҡиммәттәр, әхлаҡ иң түбән урынға тәгәрәп, нәфсе ҡотҡолары аҫтында күмелеп ҡала.

"Кешенең ҡорһағын тупраҡтан башҡа бер нәмә лә тултыра алмай", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһисс-сәләм.

"Байлыҡ, - тигән ғалим Шопенгауэр, - тоҙло һыу кеүек, күпме генә эсһәң дә, һыуһаның ҡанмай. Көсәйә генә бара".

"Ҡомһоҙ кеше ебәк ҡорто кеүек, үҙ тирәләй ебәк сүстәрен күберәк туҡыған һайын, уның йәшәүгә булған мөмкинлеге лә сикләнә".

"Күп кешеләр байлыҡты төрлө теләктәрҙе бойомға ашырыу өсөн бер сығанаҡ тип һанаусан", - тип яҙа фарсы ғалимы Сәйед Мөхтәбә Мусауи Лари "Йәштәр һәм тәүфиҡ" исемле хеҙмәтендә.

Ғәмәлдә иһә, фәҡәт фәҡирҙәр араһынан сыҡҡан заттар донъя тарихына иң ҙур өлөш индереп киткән. Яҙыусылар, уйлап табыусылар, ғалимдар башлыса халыҡтың ярлы ҡатламынан күтәрелгән.

**Сәләх СУҠБАЕВ әҙерләне.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### Аҡһым нисек ярҙам итә?

Мейе тән ауырлығының 2 процентына тиң, әммә ул организм тыныс ваҡытта сарыф иткән энергияның 20-25 процентын ҡуллана. Шәкәр мейелә ҡәнәғәтлек пептиды - эндорфиндар эшләп сығарыуҙы арттыра, тиҙәр. Шул уҡ ваҡытта калорияһыҙ шәкәрҙе алмаштырыусылар, мәҫәлән, аспартам, ҡандағы эндорфиндарҙы ике тапҡырға күбәйтә икән.

Икенсе яҡтан, шәкәрҙе артыҡ ҡулланыу инсулин барлыҡҡа килтерә, уның тәьҫирендә нормаль аҡыл эшмәкәрлеге һәм яҡшы торош өсөн кәрәк булған ҡандағы глюкоза кимәле кәрәкле билдәнән түбәнәйә. Оптималь тип рационда калориялылығы буйынса 10 процент шәкәр (тәүлегенә 50-60 грамм) булыуы һанала.

### Витаминдар нимә менән ярҙам итә?

Нервылар процесы торошона шулай уҡ витаминдар һәм минераль матдәләр ыңғай йоғонто яһай. Ныҡ арығанлыҡты, күптәрҙең ҡыш һуңында һәм яҙғыһын үҙен насар тойоуын ризыҡта етерлек күләмдә витаминдар булмау менән бәйләйҙәр. АҠШ-та һәм Бөйөк Британияла үткәрелгән тикшереүҙәр витамин препараттары IQ тесында уҡыусыларҙың когнитив функцияларын арттыра, асоциаль тәртибен нормалләштерә икәнлеген раҫлай.

**В1 витамины (тиамин)** - аҡһым, май, углевод алмашыныуында ҡатнаша, йөрәк-ҡан тамырҙары һәм нервылар эшмәкәрлегенә йоғонто яһай. Уға эре итеп тарттырылған ондан бешерелгән икмәк-булка изделиелары, ҡайһы бер ярмалар (бигерәк тә һоло, ҡарабойҙай, тары), ҡуҙаҡлылар (борсаҡ, ноҡот, соя), бауыр, бөйөр һәм башҡа субпродуктар, сүпрә инә.

**В2 витамины (рибофлавин)** - майҙар алмашыныуында ҡатнаша һәм организмды энергия менән тәьмин итә. Нервылар системаһына ыңғай йоғонто яһаған ферменттар составына инә. Уның төп сығанағы булып һыйыр бауыры, ит, тауыҡ йомортҡаһы, сыр, эремсек, скумбрия тора. Шулай уҡ ҡарабойҙайҙа, йәшел борсаҡта, шпинатта ла бар.

**В6 витамины (пиридоксин)** - аҡһым, майҙар, углеводтар, холестерин алмашыныуында ҡатнаша, нервылар системаһы эшмәкәрлеге өсөн мөһим. Һөттә, эремсектә, сырҙа, ҡарабойҙай һәм һоло ярмаһында, иттә һәм субпродукттарҙа, тауыҡ йомортҡаһында, балыҡта, эре итеп тарттырылған онда бар.

**РР витамины (ниацин)** - углеводтар, аҡһымдар алмашыныуында, организмды энергия менән тәьмин итеүҙә ҡатнаша. Ферменттар составына инә, нервылар, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн мөһим. Төп сығанаҡ булып һыйыр малы бауыры, бөйөрө, тел, тауыҡ, быҙау ите, һыйыр малы ите, һарыҡ ите тора. Уларҙа ошо витамин ҡарабойҙай ярмаһы, ҡуҙаҡлылар, ҡоро сүпрәгә ҡарағанда 1,5 тапҡырға күберәк.

**Фолий кислотаһы (фолацин)** - аҡһым, холин алмашыныуҙа мөһим роль уйнай. Липидтар амашыныуын, ҡан барлыҡҡа килтереүҙе көйләй. Бауырҙа, бөйөрҙә, петрушкала, ноҡот борсағында, шпинатта, салатта күп.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 25 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.35 "Модный приговор".
12.15, 17.05, 18.15, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.25 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.15 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Чемпионат мира по футболу 2018. Сборная России - сборная Уругвая. Прямой эфир из Самары.
21.00 "Время".
21.35 "Садовое кольцо". 7-я серия. Мелодраматический сериал (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу 2018. Сборная Испании - сборная Марокко. Прямой эфир из Калининграда.
01.00 "Оттепель". Сериал (16+).
02.05 "Познер" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Чужие родные". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.35 "Точки опоры". Детективный сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неудача Пуаро". Сериал (16+).**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на баш. яз.).**
**14.45, 23.45 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**17.00 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.30 "Бай бакса" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**24.00 "Без единой улики". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 26 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 02.10, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.30, 18.15 "На самом деле" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Чемпионат мира по футболу 2018. Сборная Дании - сборная Франции. Прямой эфир из Москвы.
20.20 "Время".
21.35 "Садовое кольцо". 8-я серия (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу 2018. Сборная Нигерии - сборная Аргентины. Прямой эфир из Санкт-Петербурга.
01.00 "Оттепель". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Чужие родные". 3-я и 4-я серии (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.35 "Точки опоры". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неудача Пуаро". Сериал (12+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 23.30 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**16.45 "Современник" (12+).**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Учим башкирский язык".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Интервью".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское времечко".**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**24.00 "Призрак Мон-Сен-Мишель". Худ. фильм (18+).**
**По окончании Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә".**

## 27 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 02.10, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Давай поженимся!" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.40, 18.10 "На самом деле" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Чемпионат мира по футболц-2018. Сборная Южной Кореи - сборная Германии. Прямой эфир из Казани.
21.00 "Время".
21.40 "Садовое кольцо". 9-я серия (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболц-2018. Сборная Сербии - сборная Бразилии. Прямой эфир из Москвы.
01.00 "Оттепель". Мелодраматический сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Чужие родные". 5-я и 6-я серии (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.35 "Точки опоры". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неудача Пуаро". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 23.45 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**16.45 "Замандаш" (12+).**
**17.00 "Моя республика" (12+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Свадьба наизнанку" (6+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**19.30 "Алтын тирмә".**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**24.00 "Дело-труба". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 28 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 02.05, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.30, 18.15 "На самом деле" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Чемпионат мира по футболу-2018. Сборная Японии - сборная Польши. Прямой эфир из Волгограда.
21.00 "Время".
21.35 "Садовое кольцо". 10-я серия (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу-2018. Сборная Англии - сборная Бельгии. Прямой эфир из Калининграда.
01.00 "Оттепель". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Чужие родные". 7-я и 8-я, заключительная, серии (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.35 "Точки опоры". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неудача Пуаро". Сериал (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Байтус" (6+).**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.45 "Особый отдел. Контрразведка" (12+).**
**17.30 "Орнамент".**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**19.30 "Башҡорттар" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Пропала маленькая девочка". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 29 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
20.00, 21.35 "Три аккорда" (12+).
21.00 "Время".
22.30 "Садовое кольцо". 11-я серия (16+).
23.30 "Оттепель". Сериал (16+).
00.30 "Городские пижоны". "Дэвид Боуи" (12+).
01.40 "Харлей Дэвидсон и ковбой Мальборо" (16+).
03.30 "Человек в красном ботинке" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!" (12+).
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Юморина". Главный юмористический фестиваль года (12+).
23.50 "Одинокие сердца". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неудача Пуаро". Сериал (16+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Ч.Айтматов. "Белый пароход" (12+).**
**14.15 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-саға" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Выше всех!" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Вопрос + Ответ = Портрет" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**24.00 "Неуловимая четверка". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 М.Бурангулов. "Шәүрәкәй" (12+).**

## 30 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30, 06.10"Фантазия белых ночей". Сериал (12+).
06.00, 10.00 Новости.
07.40 "Играй, гармонь любимая!"
08.25 "Смешарики. Новые приключения".
08.40 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.10 "Неслужебный роман Людмилы Ивановой" (12+).
11.10 "Теория заговора" (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.25 "Виталий Соломин. "...И вагон любви нерастраченной!" (12+).
13.20 "Женщины". Мелодрама.
15.20 "Инна Макарова. Судьба человека" (12+).
16.10 "Вместе с дельфинами" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.15 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
21.35 "Садовое кольцо". 12-я серия (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу-2018. 1/8 финала. Прямой эфир из Сочи.
01.00 "Оттепель". Сериал (16+).
02.20 "Другая женщина". Худ. фильм (18+).
04.20 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.45 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и Медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.00 "По секрету всему свету".
09.20 "Сто к одному".
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Смеяться разрешается".
12.55 "Пластмассовая королева". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
16.40 "Привет, Андрей!" Ток-шоу (12+).
17.45 "Вести в субботу".
18.45 Футбол. Чемпионат мира-2018. 1/8 финала.
21.00 "Просто Роман". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
01.00 "Сердце без замка". Худ. фильм (12+).
03.15 "Личное дело". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30,18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Опасные каникулы". Худ. фильм (6+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00, 21.00 "100 имен Башкортостана".**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "У дачи" (12+).**
**11.45 "Орнамент" (6+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 Замандаш" (6+).**
**13.15 "Учим башкирский язык".**
**13.30 "Бай баҡса" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**17.00 Творческий вечер народного артиста РБ Алмаса Амирова" (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Весело живем" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Песня года" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан".**
**22.30, 01.30 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018" (12+).**
**24.00 "Карибское золото". Худ. фильм (16+).**
**02.15 И.Абдуллин. "Озорная молодость".**

## 1 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ,
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.20, 06.10 "Фантазия белых ночей". Сериал (12+).
06.00, 10.00 Новости.
07.30 "Смешарики. ПИН-код".
07.45 "Часовой" (12+).
08.15 "Здоровье" (16+).
09.20 "Угадай мелодию".
10.10 "Олег Видов. С тобой и без тебя".
11.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Анастасия Вертинская. Бегущая по волнам" (16+).
13.05 "Человек-амфибия". Худ. фильм.
14.55 "Михаил Козаков. "Разве я не гениален!" (12+).
15.50 "Раиса Рязанова. День и вся жизнь" (12+).
16.45 "Большие гонки".
18.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.00 "Звезды под гипнозом" (16+).
20.45 "Что? Где? Когда?" Финал летней серии игр.
22.00 "Воскресное "Время".
22.40 Чемпионат мира по футболу-2018. 1/8 финала. Прямой эфир из Нижнего Новгорода.
01.00 Музыкальная премия "Жара".
02.50 "Сицилийский клан". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

04.55 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.00 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.30 "Никому не говори". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
16.15 "Вести недели".
18.45 Футбол. Чемпионат мира-2018. 1/8 финала.
21.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране".
01.00 "Право на правду". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ҡош юлы. Балалар" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Сулпылар".**
**11.30 "Ал да гөл" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**12.30 Итоги недели (на башк.яз.).**
**13.15 "Учим башкирский язык" (6+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Башҡорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Включайся!" (12+).**
**19.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.00 "Лидеры региона" (12+).**
**20.30 "Моя республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 " Свидание с джазом" (12+).**
**00.15 "Проект "А": часть вторая". Худ. фильм (12+).**
**02.00 Л.Герш. "Эти свободные бабочки" (12+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 23 ИЮНЬ - ХАЛЫҠ-АРА ОЛИМПИЯ КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**24-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ихата. Зөләйха. Тирмәмдә. Ҡыштау. Һабаҡ. Нәби. Ысыҡ. Сәнс. Доғалыҡ. Ирем. Лифт. Ғына. Егеткә. Ағуна. Батыр. Сыба. Әрйә. Артек. Ыҙан. Гете.

**Вертикаль буйынса:** Һандуғас. Тубылғы. Ҡарлуғас. Заём. Ыласын. Әшнә. Халҡым. Абаға. Сал. Ринг. Әминә. Торт. Архив. Егет. Ҡылыс. Терһәк. Илемә. Тояҡ. Уралым. Әсә.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Июнь-Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (11) дүшәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 26 (12) шишәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 27 (13) шаршамбы | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 28 (14) кесе йома | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 29 (15) йома | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 30 (16) шәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 1 (17) йәкшәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ИҒТИБАР!

## ИШАНЫБЫҘ ХӨРМӘТЕНӘ

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы һәм Хөкүмәте булышлығында 4-7 июлдә "Рәсәйҙәге традицион Ислам һәм билдәле башҡорт ғалимы, дин белгесе, мосолман донъяһының мәғрифәтсеһе шәйех Зәйнулла Рәсүлев" халыҡ-ара ғилми конференцияһы ойошторола.**

Конференцияны асыу тантанаһы һәм пленар ултырыш 5 июлдә Өфөнөң Конгресс холл бинаһында була (иртәнге сәғәт 10-да). 6 июлдә Силәбе өлкәһенең Троицк ҡалаһында тантаналы саралар уҙа. 7 июлдә Учалы ҡалаһында тантаналар ойоштороу, Зәйнулла Рәсүлевтың тыуған төйәгенә һәм изге Әүештауға барыу күҙаллана. Ойоштороусылар - Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы дин эштәре буйынса совет, Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Халыҡ-ара ислам бизнесы ассоциацияһы.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

## ҠЫҘЫЛСА ТАРАЛА



**"Роспотребнадзор"ҙың Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәренә һылтанып хәбәр итеүенсә, 2018 йылда донъяның бер нисә төбәгендә ҡыҙылса буйынса эпидемиологик хәл теркәлгән. Европала был сирҙең 28 илдә таралыуы күҙәтелә.**

Украиналағы хәл ведомствола айырыуса хәүеф тыуҙыра, 2017 йылда унда сир күрһәткесе 2016 йылғы кимәлдән 70 тапҡырға артып киткән. Өҫтәүенә ҡыҙылсанан һуң өҙлөгөү арҡаһында 11 кеше яҡты донъя менән хушлашҡан. Ағымдағы йылда Львов, Карпат аръяғы, Ивано-Франковск, Одесса, Черновицкая өлкәләрендә, Киевта бик күп осраҡтар теркәлгән. 2018 йылда инфекцияның таралыуы дауам итә: ҡыҙылсаның 900-ҙән ашыу осрағы теркәлгән, бер нисә тиҫтә үлем осраҡтары тураһында мәғлүмәттәр бар. Аргентинала, Бразилияла, Колумбияла, Эквадорҙа, Мексикала, Перуҙа, шулай уҡ Канадала һәм АҠШ-та ауырыу сығанаҡтары теркәлгән. Ансоатеги, Боливар, Дельта-Амакуро, Монагас, Сули штаттарында сирләләр бик күп.

Инфекция таралыуының төп сәбәбе - халыҡтың ҡыҙылсаға ҡаршы прививка яһатмауы. "Роспотребнадзор" белдереүенсә, ҡыҙылсаны берҙән-бер һөҙөмтәле иҫкәртеү сараһы - вакцинация, шуға күрә прививка яһатмаған һәм быға тиклем ҡыҙылса менән сирләмәгән кешеләргә сәфәргә сығырҙан 14 көн алдараҡ прививка эшләтергә кәңәш ителә. Башҡортостанда 2016-2017 йылдарҙа бер ауырыу осрағы теркәлгән, йәғни республикала ҡыҙылса буйынса эпидемиологик хәл имен тип баһалана. Төбәктә халыҡтың йоғошло сирҙәргә ҡаршы прививка яһатыу кимәле ярайһы уҡ юғары һәм 95-98 процент тәшкил итә. Шул арҡала ҡыҙылса, эпидемик паротит, дифтерия, быума йүтәл, һын ҡатыу менән сирләү кәмегән, сәсәк ауырыуы бөтөрөлгән. Ҡыҙылса тураһында һөйләгәндә, шуны белергә кәрәк: һәр кем 35 йәшкә тиклем ошо сиргә ҡаршы ике прививка яһатырға тейеш.

## БИЛМӘНДӘ - СИР



**Белгестәр Өфөләге "Лента" супермаркеттар селтәре продукцияһына тикшереү үткәргән. Магазиндарҙың береһендә листериялы билмәндәр табылған, тип хәбәр итә "Интерфакс" "Башҡортостан ғилми-етештереү ветеринария лабораторияһы" вәкиленә һылтанма менән. Билмәндең Ҡаҙанда етештерелеүе билдәле.**

Баҫма мәғлүмәттәре буйынса, тикшереү етештереү үҙконтроле барышында гипермаркеттың башланғысы буйынса уҙғарылған. "Хәүефле йоғошло ауырыу ҡуҙғытҡысы табылғандан һуң ошо продукцияның бөтә партияһы ла һатыуҙан алынды, айырым һаҡлана", - тип аныҡлана агентлыҡ белдереүендә. Әле листерияның ярымфабрикатҡа нисек эләгеүен асыҡлайҙар, контроль-күҙәтеү сараларын Башҡортостан ветеринарияһы эксперттары тормошҡа ашыра.

Билдәле булыуынса, листериоз - кешеләр һәм хайуандар араһында таралған хәүефле йоғошло сир, үҙәк нервылар системаһын, үрсеү ағзаларын зарарлай, ҡайһы берҙә ауырыуҙың билдәләре беленмәй. Листериозды күп кенә хайуандар, шул иҫәптән кимереүселәр һәм ҡоштар йоҡтора ала.

"Башинформ".

✓ Яҡшы менән юлдаш булһаң, эшең бөтөр; яман менән юлдаш булһаң, башың бөтөр.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).



ЗАУЫҠ

Тамара ИСКӘНДӘРИӘ



# РУХЫМ, ҺИН БИТ МИҢӘ БОРОНДАРҘАН

## мираҫ булып ҡалған ҡомартҡы

### БАШҠОРТОСТАН

Бөйөк бер моң биләй күңелемде,
Сикһеҙ тулҡын иле,
Олуғ көс.
Ошо көйҙән донъя яңырғандыр,
Урал ергә тере һыу бөркҡәс...

Был тәрәнлек,
Был бейеклек хисе
Бер Хоҙайҙан ергә таралған.
Уттан, һыуҙан Һомай ҡосағында
Ул мөхәббәт өсөн яралған!

Сылтыр шишмә, йылға тулҡындары,
Оло дарьяларҙың тын зары,
Сын-сын бейеп төшкән ҡар бөртөгө -
Боҫ һырыған ағас һындары...

Ул көйҙә бар мәғрур тауҙар тыны,
Көрт аҫтында сәскә һулышы,
Бөжәк безелдәүе, аҙғы елдә
Шартлап тирткән бөрө тауышы...

Ат кешнәүе, йәшен йәшнәүеме,
Яңы тыуған бала илауы,
Доға мәкәменә иҙерәп ҡалған
Донъяларҙа тынлыҡ тулғауы -

Бөтәһе бар унда!
Йыһан йыры
Һәр бер күҙәнәккә тулышҡан...
Башҡортостан!
Олуғ моңон аша
Илһам алам һинең һулыштан!..

### ЕТЕ ҠЫҘ

Тулған айҙың яҡтыһында
Ойоп бейей ете ҡыҙ.
Керпегенән нур тамғанын
Тойоп бейей ете ҡыҙ.
Бер һағышлы көйҙә йәнгә
Уйып бейей ете ҡыҙ.

Күтәрелеп ҡарамаҫтар
Һылыуҙар һеҙҙең күҙгә.
Башҡорт ҡыҙҙары ғорур, тип,
Баҫмағыҙ, тиеп, теҙгә,
Әйтеү әйтерҙәр мәңгегә,
Әйләнерҙәр ҡарһүҙгә...

Күл өҫтөндәге көҙгөлә
Йөҙөп бейей ете ҡыҙ.
Күңелдәрҙән моң дарьяһын
Һөҙөп бейей ете ҡыҙ.
Сеү! Әүернә тамғаһын бит
Төҙөп бейей ете ҡыҙ!

Бына улар ҡапыл бергә
Ҡараштарын күтәрҙе.
О, ул ҡараш! Тетрәтер ул
Хатта аяҙ күктәрҙе.
Фатиханын биреп, үтте
Улар һуңғы күперҙе...

Асылғандай тарихтағы
Фасыл ғына - ете ҡыҙ.
Намыҫ көслө үлемдән, ти
Аҫыл ғына ете ҡыҙ.

Тормош әүернәһен беҙгә
Васыят ҡыла ете ҡыҙ.

Ай, ете ҡыҙ, ете ҡыҙ!..

### ТОРАТАУ

Дарьяларҙың тулҡынында
Яралдың, шихан.
Данлы, шанлы тарихыңды
Яҙғандыр йыһан.

Күк монарҙа көнгә бағып,
Ҡалҡып тора тау.
Халҡыбыҙҙың аманатын
Һаҡлай Торатау.

Тәүтормоштан ҡаға тулҡын,
Мөһабәт тулҡын.
Башҡорт иле, башҡорт теле
Мәңгелек булһын!

Ерен, телен яҡлап ҡалҡҡан
Һиндә Торахан.
Арыҫландай миҫле батыр,
Әйҙә, оран һал!

Күк монарҙа көнгә бағып,
Ҡалҡып тор, ай, тау!
Башҡортомдоң тыуыр таңын
Яҡла, Торатау!

### ТӨРКИЛЕК

Эркелеп килә ул, эркелеп,
Йыһандың төбөнән бөркөлөп...
Салт ҡояш, күк томан эсенән
Булмышты балҡыта төркилек.

Күктәрҙең бурьяклап хәтерен,
Ҡалҡытып тарихтың хәтерен,
Күк әрем еҫенән ыҫланып,
Алып кил,
Төркилек, хәбәрен!

Сал дала бөркөтөләй, элек
Йәшенле болотто ал телеп!
Теленде,
Иленде
Иркәләп,
Эркелеп ҡайт йәнгә,
Төркилек!

### ДИҢГЕҘ ҠАБЫРСАҒЫ

Торатау ҡабырсағы һин,
Һырлы-ҡырлы ҡабырған!
Ҡолағың һаман шаулаймы
Диңгеҙ башҡарған йырҙан?

Бында дарья йәйрәп ятҡан...
Шаулы тулҡын сыңлауын
Һинең инде нисә быуат
Онотолоп тыңлауың?

Торатауҙың, Йөрәктауҙың,
Шәкетауҙың, Ҡуштауҙың
Күкрәгендә күпме дәүер
Йәйләнең дә ҡыйшланың?
- Ҡайҙа һинең диңгеҙең? - тип
Һорайым ҡабырсаҡтан.
"Ике йөҙ һикһән миллион
Йылдар үтте ул саҡтан...

Бында сикһеҙ дарья ине,
Тулҡыны ине тиңһеҙ.
Һыуҙа йәшәр бар йәнлекте
Ошонда йыйҙы диңгеҙ.

Әйтте:
- Һеҙ, балаларым, - тип, -
Түгелһегеҙ мәңгелек.
Диңгеҙ кибер,
Донъя бөтмәҫ -
Берҙәм булайыҡ элек!

Бик күп дәүерҙәр үтерҙәр,
Йәнлектәр булыр башҡа.
Беҙ тауҙар булып ҡалырбыҙ -
Әйләнеп тораташҡа...

Шул саҡ бында төйәкләнер
Байман башҡорт балаһы.
Үҫеп сығыр ауылдары,
Әллә күпме ҡалаһы.

Изге тау, тип барса халыҡ
Һыйыныр беҙгә шул саҡ..."
... Быңа нимә бөйән итте
Шихандағы ҡабырсаҡ.

### РУХЫМ

Рухым, һине нисә яҙмыш уты
Теткеләне иҫке байраҡтай?
Кешеләргә, ҡара, һин кәрәкмәй,
Һинһеҙ улар, имеш, байыраҡ та...

Рухым, һин бит миңә борондарҙан
Мираҫ булып ҡалған ҡомартҡы.
Тәрән дарьялай һин,
Бейек күктәй,
Миһырбанлыҡ та һин,
Йомартлыҡ.

Уҫаллыҡ юҡ һиндә.
Бар ҡәтғилек,
Халҡыма хас ҡаты ихтыяр.
Сал бөркөттәй бейектән ос, рухым,
Ваҡлыҡтарға итмәй иғтибар.

Һиндә - үткәндәрҙең өмөттәре,
Һиндә - дәүерҙәрҙең һағышы.
Рухым,
Һин бит -
Күпме быуаттарҙың
Йөрәгемә ҡаҡҡан тауышы...
Шарлауыҡтай йәнде һуғарыһың,
Ниндәй ҡөҙрәт - һинең алғышта!
Бағышлайым
Барлыҡ булмышымды
Һинең өсөн тиңһеҙ алышҡа.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЭТ ЭТЛЕГЕН ИТМӘҺӘ...

## өнө бөтә

Яҡшы менән юлдаш булһаң, эшең бөтөр; яман менән юлдаш булһаң, башың бөтөр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин уңыш формулаһын бирә алмайым, ә бына уңышһыҙлыҡ формулаһын тәҡдим итәм: һәр кемгә ярарға тырышып ҡара.

**(Г. Своуп)**

Етәкселек итеү - ул башҡаларҙы бар эштәрҙе лә эшләргә мәжбүр итеү сәнғәте.

**(Билдәһеҙ автор)**

Әгәр ҙә кешеләр үҙ-үҙҙәрен йышыраҡ ишетһә, аҙыраҡ һөйләргә тырышырҙар ине.

**(Билдәһеҙ автор)**

Ҡайһы берәүҙәр беренсе рәттә сакта файҙаһыҙ, әммә икенсе рәттә ялтырайсаҡ.

**(Вольтер)**

Килешеп эшләгәндә әһәмиәтһеҙ генә эштәр ҙә күтәрелә, килешеү булмағанда бөйөк эштәр ҙә һәләк була.

**(Гай Крисп)**

Насар етәксе нимә эшләргә кәрәк икәнен белә. Ә яҡшыһы быны нисек эшләргә икәнен күрһәтә.

**(С. Орджоникидзе)**

Ҡаршы тора алғанға ғына таянырға мөмкин.

**(Блез Паскаль)**

Һинең хаталарыңды эҙләгән дошманың ул хаталарҙы йәшерергә тырышҡан дуҫыңдан файҙалыраҡ.

**(Леонардо да Винчи)**

Тәнҡитләгәндә, фекерҙе тәнҡитлә, уның авторын түгел.

**(Билдәһеҙ автор).**

Асыу ҡыҫҡа ваҡытлы аҡылһыҙлыҡ.

**(Гораций)**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Көнсығыш хакимына кемдер берәү үҙенең яҡын-тирәһендәге ҡомһоҙ һәм тоғро булмаған хеҙмәткәрҙәрен власть менән боҙолмаған башҡа кешеләргә алыштырырға кәңәш биргән. Күпмелер уйлап торғандан һуң хаким былай тип яуаплаған: "Яңыраҡ мин баҙарға барҙым һәм себендәр һырып алған хәйерсене күрҙем. Мин, әлбиттә, уға ярҙам итергә теләнем һәм уның битендәге себендәрҙе ҡыуған булдым. Ә хәйерсе миңә былай тине: "Йә, әфәндем, был ҡылығың менән нәмәгә өлгәштең инде? Мине һырып алған себендәр минең ҡанымды һурып туйғайны һәм тынысланғайны. Хәҙер уларҙың урынын яңылары, астары биләйәсәк һәм миңә шундай ҡанығыу менән ябырыласаҡ, түҙеп кенә тор!"**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 22 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 1092/06